Ф.Ғ. ХИСАМИТДИНОВА

# БАШҠОРТ МИФОЛОГИЯҺЫ

БӨТӘ ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ ҠОРОЛТАЙЫ БАШҠАРМА КОМИТЕТЫ
РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ

**Ф.Ғ.Хисамитдинова**

# БАШҠОРТ МИФОЛОГИЯҺЫ

**Белешмә-һүҙлек**

Өфө
«Ғилем»
2002

УДК 398
ББК 82
Х 51

**Хисамитдинова Ф.Ғ.** Башҡорт мифологияһы: Белешмә-һүҙлек. – Өфө: Ғилем, 2002. – 126 б.

ISBN 5-7501-0299-8

Һүҙлек башҡорт мифологияһына ҡараған 140 һүҙҙе үҙ эсенә ала. Популяр формала мифик заттар, мифология менән бәйле ўрындар, әйберҙәр тасуирлана. Һүҙлектә мифология менән бәйле һүҙҙәр, текстар ҙа урын алған. Башҡорт мифологияһы, теле менән ҡыҙыҡһынған бөтә кеше өсөн дә файҙалы ҡулланма булыр.

***Рецензенттар:***
филология фәндәре докторы, профессор Э.Ф.Ишбирҙин;
филология фәндәре кандидаты Н.Ф.Суфьянова

© Хисамитдинова Ф.Ғ., 2002

ISBN 5-7501-0299-8 © «Ғилем» нәшриәте, 2002

## Ҡәҙерле уҡыусым!

Һинең ҡулыңда бик серле лә, ҡурҡыныс та донъяны һүрәтләүсе һүҙлек. Һүҙлеккә тупланған материал һиңә таныш та, таныш түгел дә һымаҡ. Ысынлап та, эйәләр, бисуралар, шайтандар, ен-пәрейҙәр, аждаһалар, дейеүҙәр тураһында һинең ишеткәнең дә, уҡығаның да бар. Бапаҡтар, бишмыйыҡтар, серле бабайҙар менән һине бәләкәй сағыңда ҡурҡыта ла торғайнылар. Бәлә-ҡазаға тарығанда әле лә Аллаға, Хоҙайға, Тәңрегә ялбараһыңдыр. Балаң илағанда, малың ятып үлгәндә күҙ тейеүгә ышанаһыңдыр. Ятраткан кешең аңламаһа, бәлки һөйҙөргөс тә ҡулланаһыңдыр. Ямғыр яумай ҡоролоҡ интектерһә, бәлки ауылдаштарың менән теләккә, һыу һалышыуға сығаһыңдыр. Бәлки быларҙың береһен дә һин башҡармайһыңдыр. Хатта шуларҙы үтәгәндәргә юмор менән ҡарайһыңдыр. Шулай ҙа, мин уйлайым, хатта һинең күңелеңдә лә серле, сихри күренештәргә, әйберҙәргә ҡарата шикшөбһәләр йәшәй. Һин ауырыһаң, бәлә-ҡаза килһә, эстән генә булһа ла, Хоҙайҙың ярлыҡауын, ҡотҡарыуын үтенәһең. Шулай бит?! Эйе, шулай. Икенсе төрлө булырға тейеш тә түгел. Ул ышаныуҙар, мифик заттар, сихыр һәм эпсендәр, йолалар һәм дә ырымдар – һинең тамырҙарың, олата-бабаларыңдан ҡалған күңел байлығың, һинең башҡортлоғоңдоң бер билдәһе. Шуға оялма, йәшермә, хатта шул сихри донъяны белеүең менән ғорурлан. Сөнки һин бик бай мифологик мираҫҡа эйәһең. Боронғо олата-бабаларыбыҙҙың донъяға ҡараштарын, уй-фекерҙәрен, хис-тойғоларын һәм табыныуҙарын, йәғни донья һүрәтен белеү – ул ғорурлыҡ, хәҙерге донъяны аңлау өсөн ҙур бер сығанаҡ. Бәлки шуғалыр ҙа һуңғы йылдарҙа мифология менән ҡыҙыҡһыныу артҡандан арта. Мифология буйынса энциклопедиялар, һүҙлектәр, монографиялар сыға. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, башҡорт мифологияһы буйынса материал күп булһа ла, әлегә һүҙлектәр юҡ. Шуны иҫәпкә алып төҙөлдө лә инде был һүҙлек. Ҡыҫҡаса һүҙлек булараҡ ул ҡыҫҡа ғына информатив статьяларҙан тора. Статьяла мифик персонаждар, урындар, әйберҙәр тасуирлана. Һүҙҙәрҙең диалекттарҙағы варианттары, фразеология һәм мәҡәлэйтемдәрҙәге ҡулланылышы сағылыш тапҡан. Статьяларҙа шулай уҡ мифик заттар, әйбер-урындар менән бәйле ышаныуҙар, тыйыуҙар, эпсен-арбауҙар ҙа урын алған. Һәр халыҡтың мәшһүр «этимолог» булыуын иҫәпкә алып, һүҙлектә ҡыҫҡа ғына этимологиялар ҙа бар. Һүҙлек нигеҙҙә уҡытыусыларға, студенттарға, уҡыусыларға тәғәйенләнгән. Ул шулай уҡ башҡорт мифологияһы, теле менән ҡыҙыҡһынған бөтә кешегә лә файҙалы булыр тигән өмөттәмен.

***АҒАС ЭЙӘҺЕ.*** Диалекттарҙа *ағас анаһы, ағас хужа, енле ағас, яңғыҙ ағас эйәһе* исемдәре менән йөрөй. Башҡорт мифологияһында ағас эйәһе – яңғыҙ ағаста йәшәгән эйә. Кешегә ул ғәҙәттә күренмәй. Бик һирәк кәкүк, ҡоҙғон ҡиәфәтендә осрай. Ышаныуҙар буйынса, эйәле ағасты киҫергә, өй, аҙбар, мунса бүрәнәләренә, утынға алырға ярамай. Уның ботағын, ҡайын булһа, туҙын, ҡарағай булһа, сайырын, имән булһа, сәтләүеген алыу ҙа тыйыла. Эйәле йәки енле ағасты киҫкәндә, ут сәселә, эргәһенән үткәндә шатырлаған, шытырлаған тауыштар ишетелә. Эйәле ағасты аҙбарға һалһаң, мал үрсемәй, зыянлай, өй бүрәнәһенә алһаң, өй тынғыһыҙ була, хужалары йыш ауырый, ҡазалана. Хатта утынға тип ишек алдына килтерелгән ағастың да эйәһе булыуы тураһында ышаныуҙар бар. Бына шуларҙың береһе.

«Өйәңке күленең ярында ике мөһабәт өйәңке үҫеп ултырған. Берҙәнбер көндө уларҙың береһен йәшен атып һындыра. Рәбиға исемле әбей һынған ағасты ишек алдына килтертә. Шул көндән башлап әбейҙең йоҡоһо ҡаса, сөнки төн уртаһы етеү менән кемдер тәҙрә шаҡып йөрөй башлай. «Кем унда?»– тип һораһа ла, яуап бирмәй, ти. Аптырағас, әбей ағасты кире урынына илттерә, тик шунан һуң ғына төнгө ҡунаҡтың килеүе туҡтала».

*(И. Ҡотлоюлов. «Йәшлек», 28/I 1999 й.).*

*Ағас эйәһе* атамаһының килеп сығышы төрки сығанаҡлы *ағас* һәм *эйә*һүҙҙәре менән бәйле. Ә ағас эйәһе үҙе боронғо башҡорттарҙың Ағас тәңреһенә барып тоташа. Билдәле булыуынса, Ибн-Фаҙлан X быуат башында: «Башҡорттарҙың бер өлөшө ағасҡа табына, ағастың хужаһы барлығына» – ышана, тип яҙып киткәйне. Шулай итеп, башҡорт мифологияһының *Ағас тәңреһе* бөгөн телдә, ышыныуҙарҙа, хөрәфәти хикәйәләрҙә генә тороп ҡалған.

***АҘБАР ЭЙӘҺЕ.*** Диалекттарҙа *арбаҙ эйәһе, албар эйәһе, абзар хужасы, азбар ийәсе, амбар эйәсе, кәртә эйәһе, мал һарайы эйәһе* исемдәре менән йөрөй. Башҡорт мифологияһында аҙбарҙа, мал һарайында йәшәгән эйә. Ул кешегә берәй хайуан, өй хужаһы, күрше-күлән ҡиәфәтендә күренә. Ышаныуҙар буйынса, аҙбар эйәһе – кешегә ярҙам итеүсе яҡшы зат. Ул көтөүҙән йоҡлап ҡалған хужабикәләрҙе, йәш быҙауы, бәрәсе туңа башлаған хужаларҙы күршеләре, туғандары тауышы менән уята, кәртә-ҡураны, ҡош-ҡортто төрлө яман заттарҙан һаҡлай. Аҙбар эйәһенең яратҡан һәм яратмаған малдары була. Яратҡан малын эйә ашата, иркәләй, һаҡлай. Яратмаған малды ул интектерә, арыта, хәлһеҙ-

ләндерә. Әгәр ҙә ошондай малды һатып йәки һуйып ҡуймаһаң, эйә уны интектереп үлтерә.

Аҙбар эйәһе тураһында ышаныуҙар халыҡта әле лә йәшәй. Миҫал өсөн Йылайыр районында яҙып алынған хөрәфәти хикәйәне килтерергә мөмкин.

«Март айы ине. Аҙна буйы күҙ асҡыһыҙ буран булды. Ә минең һыйырым быҙауларға тейеш. Шуға көн дә көтәм. Төндә бер нисә тапҡыр сығып ҡарайым.

Бер төн шулай һыйырымды сығып ҡараным да, ятып торҙом. Үҙем дә һиҙмәй йоҡлап киткәнмен. Бер мәл тәҙрә ҡағыуға уяныл киттем. Утты яндырып сәғәткә ҡараһам төнгө ике икән. «Кем ул?» – тип һораным. – «Тор, нимәнде ҡарап ятаң, быҙауың туңа бит», – тип, күрше ҡатын уята икән. Тышҡа сыҡтым. Ысынлап та һыйыр быҙаулаған, быҙау туңа башлаған. Тиҙ генә индерәйем тиһәм, быҙау өлкән, көс етмәй. Азат өйҙә юҡ ине. Күршеләргә йүгерҙем. Уларға саҡ барып еттем, сөнки юл юҡ, ике араны ҡар баҫҡан. «Ҡайһылай тиҙ баҫҡан юлды, әле генә күрше ҡатын килгәйне бит», – тип уйлап та ҡуйҙым. Күршеләрҙе туҡылдатып саҡ уяттым. Күрше ҡатын ишек асты. «Әле генә килеп мине уятып йөрөй инең, ҡайһылай тиҙ йоҡлап киткәнһең», – тинем тегегә. Күршем аптырап: «Юҡ, уятманым мин һине, был төндә нишләп йөрөйөм мин урамда», – тине. Шунан инде беҙ был кәртә эйәһенең эше икәнен белдек. Кәртә эйәһе бар ул. Бер-бер малың ауырыһа ла, килеп хәбәр итеп тора ул».

*(Р.Ғәлиәкбәрова. Юлдыбай ауылы).*

Аҙбар эйәһе атамаһының килеп сығышы төрки сығанаҡлы *аҙбар* һәм *эйә* һүҙҙәре менән бәйле.

***АЖДАҺА.*** Диалекттарҙа *аздаһа, азда, әждәһә, әжжәгә, аждаһа йылан, азда йылан, әждәһә йылан* исемдәре менән йөрөй. Башҡорт мифологияһында күлдә, һаҙлыҡта, ҡоҙоҡта, тау араларында, мәмерйәләрҙә йәшәгән бүрәнә кеүек йыуан йылан ҡиәфәтендәге мифик зат. Бик һирәк аждаһа үгеҙ, эт, кеше ҡиәфәтендә лә күренә. Ышаныуҙар буйынса, аждаһа аҙғынланып ҡиәфәтен үҙгәртһә, уны болот күтәреп алып китә. Аждаһа күтәрелгәндә ел-дауыл ҡуба, ғәрәсәт була. Аждаһа күтәрелеү тураһында ышаныуҙар әле лә йәшәй. Миҫал өсөн Белорет районында көслө дауылдан һуң яҙып алынған хөрәфәти хикәйәне килтерергә мөмкин.

«Был хәл бесәндә булды. Салт аяҙ көндә бер мәл ҡап-ҡара болот килеп сыҡты, йәшен йәшнәп, күк күкрәп ямғыр яуа баштаны. Ағастар

шауҙай, ҡараңғы. Ҡурҡыныс булып китте. Теге ҡара болот беҙҙең бесәндек аҫтындағы һаҙға килеп етте. Шул саҡ шарт-шорт күк күкрәне, һаҙҙан бер ҡот осҡос йән эйәһе ҡара болот артынан күтәрелә башланы. Ул йән эйәһе үҙе йыуан, үҙе борғолана. Ә ҡойроғо, мәлғүндең, асалы һәнәк һымаҡ. Шул ҡойроғо менән ул йән-яҡҡа һуға, үкерә. Һуҡҡан, борғоланған ерендә ағастар түшәлеп ҡала. Анау тауға ҡарап түшәлеп ята бит ҡайындар, шул мәлғүндең эше инде. Ныҡ ҡурҡтыҡ шул саҡ. Аллаға шөкөр, болот беҙҙең ҡушҡа яҡын килмәне, Көркәк яғына китте. Ауылда «аждаһа күтәрелде» – тип, һөйҙәнеләр шул саҡ.

*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, аждаһаға 40, 60, 100, 200, 300, 500 йыл йәшәгән ҡәҙимге йылан әүерелә. Башҡорт халыҡ ижадында 3, 6, 9, 12, хатта 1000 башлы аждаһалар осрай. Ышаныуҙарҙа, халыҡ ижадының бөтә жанрҙарында ла аждаһа яман зат итеп һүрәтләнә.

Аждаһа һүҙе килеп сығышы яғынан боронғо иран ҡомартҡыһы «Авеста»лағы *Ажидахака* исемле демон атамаһы менән бәйле булырға тейеш.

***АЙ, АЙ ТӘҢРЕ.*** Диалекттарҙа *Ай тәңресе, Төн хужаһы, Төн эйәсе* исемдәре менән йөрөй. Башҡорт мифологияһында күктәге тәңреләрҙең береһе. Ҡайһы бер мифтарҙа Ай тәңре ир-ат, икенселәрендә ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә бирелә. «Урал батыр» эпосында Ай күк һәм ҡоштар тәңреһе Самрауҙың ҡатыны, Айһылыу исемле ҡыҙҙың әсәһе. «Ай менән Зөһрә» һәм башҡа легендаларҙа Ай йәберләнгән ҡыҙҙы ҡотҡарыусы егет итеп һүрәтләнә. Ай тәңреһе менән бәйле башҡорттарҙа бик күп ышаныуҙар, тыйыуҙар йәшәй. Мәҫәлән, ҡыҙ биреү, килен алыу, баланың тәүге сәсен алыу, тырнаҡтарын киҫеү ай башында башҡарылған. Яңы ай күргәндә үҙҙәренә, бала-сағаларына, мал-тыуарына иҫәнлек-һаулыҡ именлек теләгәндәр:

«Ай күрҙем аман менән,
Ауыҙым тулы иман менән.
Итәгем тулы бала менән,
Кәртәм тулы мал менән,
Ошо айҙа вафат булһам,
Үткәр, хоҙайым, иман менән».

Ошо һүҙҙәрҙе башҡорттар әле лә әйтәләр һәм иң изге теләктәр теләйҙәр. Башҡорт ышаныуҙарында Ай төрлө ауырыуҙарҙан ҡотолор-

ға ярҙам итеүсе зат та. Мәҫәлән, һөйәл сыҡҡанда: «Ай, ҡайҙа һинең тәтәйең, бына минең тәтәйем», – тип һөйәлде айға күрһәтһәң, һөйәл бөтә икән.

Бала-сағаларын, йәш-елкенсәкте: «Тулы айға ҡарама, диуана булырһың», – тип тыйғандар. Ай тәңренең һаҡлауына, яҡлауына ышанып, балаларына Айбулат, Айтуған, Айһылыу һ.б. «ай» элементлы исемдәр ҡушҡандар

Ай һүҙе башҡорт телендә *тыуған ай, ай башы, ай битен йыуа, ай күрҙе, ҡояш алды, ай ҡолаҡланыу, ай тотолоу, ай ҡалҡыу, ай алған* кеүек һүҙбәйләнештәрҙә; үрҙә әйткәнсә, Айһылыу, Айбикә, Айбулат, Айсолтан, Айым, Айгөл, Айнур, Айгиз һымаҡ кеше исемдәрендә осрай.

Үрҙә килтерелгән һүҙбәйләнештәр буйынса, Ай башҡорттар өсөн йәнле, изгелекле бер зат. Ул «тыуа», «күрә», «ҡалҡа», «тотола», «ала», «йылмая». Айҙың кешенеке кеүек, «башы», «күҙе», ҡолағы» бар икән.

Ай тәңрегә табыныу төркиҙәрҙең шаманист һәм мани динен тотоусыларына хас булған. Төрөк профессоры Баһаетдин Өгөл яҙыуынса, әгәр борон Күк һәм Ҡояш төркиҙәр өсөн мөһим булһа, мани динен ҡабул иткәс, төп урынды Ай ала. Элек улар күкте тәңре тиһә, мани дине ингәс, Ай тәңрегә табына башлай. Башҡорттарҙың мани динендә булыуы тураһында мәғлүмәт юҡ. Шуға ла уларҙың Ай тәңрегә ышаныуҙары шаманист булған осорҙан ҡалғандыр тип, фараз итеп була.

Ай тәңре атамаһы килеп сығышы яғынан боронғо төркиҙәрҙең Ай тәңреһе исеме менән бәйле. Яҙма ҡомартҡыларҙа ла Ай тәңре (ai täŋri) исеме сағылыш тапҡан.

***АЙ ТОТОЛОУ.*** Диалекттарҙа *ай әрәнйеү, ай ауырыу* кеүек һүҙбәйләнештәр ҙә йөрөй. Ышаныуҙар буйынса, *ай тотолоу* айҙың кеше гөнаһтарынан рәнйеүе, ауырыуы менән бәйле. Шуның өсөн ай тотолһа, балаларҙы, малдарҙы ҡысҡырталар. Ышаныуҙар буйынса, ошоно күреп, ишетеп, гөнаһһыҙ заттарҙы йәлләп, ай күккә кире ҡайта икән. Ҡайһы бер легендалар буйынса, ай тотолоу айҙың яман заттар тарафынан урланыуы менән бәйле. Был осраҡта айҙы яман заттан ҡотҡарыу өсөн күберәк тимер-томор һуғалар, мылтыҡ аталар, доға ҡылалар, йәғни ҡурҡытыу ысулы ҡулланалар.

Ай тотолоу һүҙбәйләнешенең килеп сығышы төрки сығанаҡлы *ай* һәм *тотолоу* һүҙҙәре менән бәйле һәм айҙы йәнләндереп ҡарауҙы сағылдыра.

***АЙНАЛАЙЫМ.*** Диалекттарҙа *айнанайым, әйнәнәйем, әйнәләйем* һүҙҙәре лә йөрөй. Ышаныуҙар буйынса, магик көскә эйә булған һәм һаҡлау, ҡурсалау функцияһын үтәгән һүҙ. Кәмәлек буйы башҡорттарында, әгәр бала тертләп уянһа, оло ҡатындар өрөлөп китеп: «Айналайым», – тип өшкөрткәндәр. Был һүҙ «Йә хоҙайым, ҡурсала, һаҡла!» мәғәнәһендә ҡабул ителгән. «Айналайым» һүҙе һәм ауырыуҙарҙы түңәрәтеп йөрөү башҡа төбәктәрҙә лә таралған булған. Ҡаҙаҡтарҙа ла айналайым һүҙе бар. Ул да өрөлөп китеп әйтелә һәм ҡурсалау көсөнә эйә итеп ҡабул ителә. Килеп сығышы яғынан *айналайым* һүҙе шамандар практикаһындағы *әйләнеү, ураланыу, өрөлөү* менән бәйле булырға тейеш.

***АЙЫУ.*** Диалекттарҙа, халыҡ ижады әҫәрҙәрендә *айыу апа, айыу батыр, айыу абзый, бабай, олатай, айыу ата* исемдәре менән йөрөй. Башҡорт мифологияһында айыу ырыу башы, тотем, ҡурсалаусы, ҡотҡарыусы итеп бирелә. Ул мифтарҙа кешеләрҙән айыуҙарға, айыуҙан кешегә әйләнгән, йәки айыу менән кеше араһындағы енси мөнәсәбәт арҡаһында барлыҡҡа килгән зат. Ышаныуҙар буйынса, айыу – изге зат. Шуның өсөн айыуҙың тырнаҡтарын, тешен, майын бала, өй һаҡлау магияһында ҡулланғандар. Мәҫәлән, бишеккә мотлаҡ айыу тырнағын, тешен элгәндәр. Һунарсылар ҙа биленә айыу, бүре тырнағы тағып йөрөгән. Айыу майын ишектәргә, ҡапҡаларға яман заттар, сихыр үтмәһен тип һөрткәндәр. Малды һаҡлау, үрсетеү ниәте менән кәртә-ҡураға айыу башын күмгәндәр. Уңышлы һунарҙан һуң «Айыу байрамы», «Айыу туйы» тигән йолалар атҡарғандар. Был байрамдарҙа айыу тиреһе ябынып бейегәндәр, тирегә бесән тултырып, уны айыу ҡиәфәтендә баҫтырып ҡуйғандар, айыу һыны эргәһендә көрәш, йыр-бейеү ярыштары үткәреү йолаһы булған.

Башҡорт ышаныуҙарында айыу – изге, яҡшы зат ҡына түгел. Мәҫәлән, «Урал батыр» эпосында, ата һүҙен тыңламаған Шүлгән, ҡан эсеп айыуға әүерелә. Төш юрауҙарҙа ла, айыу күрһәң һүҙ ишетәһең, тиелә.

Килеп сығышы яғынан *айыу* төрки сығанаҡлы *ajïγ* һүҙенә бәйле.

***АҠ.*** Башҡорт мифологияһында *аҡ* изгелек, сафлыҡ, яҡтылыҡ символы.

Башҡорт телендә ҡулланылған аҡһаҡал (хөрмәт ҡаҙанған оло кеше), аҡ уй (изге уй), аҡ өй (ҡунаҡ өйө), аҡ донъя (рәхәт донья), аҡ йылан (йыландар батшаһы), аҡ бабай (ололау һүҙе), аҡбәйел (яҡшы күңелле кеше), аҡпәпәй итеү (баланы иркәләү, һөйөү) һ.б. һүҙбәйләнештәр күрһәтеүенсә, *аҡ* һүҙе ысынлап та, ыңғай, яҡшы тойғолар менән бәйле. Мифологияла ғәҙәттә, *аҡ* һүҙе булған заттар изге, кешегә бәхет килте-

реүсе, уны ҡурсалаусы итеп һүрәтләнә. Мәҫәлән, аҡ йылан алдына яулыҡ һалһаң, йылан уға мөгөҙөн һала. Шул мөгөҙҙө күргән, алған кеше бәхетле була тигән ышаныу әле лә йәшәй. Аҡ менән бәйле бик күп тыйыуҙар ҙа бар. Мәҫәлән, аҡты, йәғни һөт-ҡатыҡты түгергә, сәсергә, тапарға; аҡ йыланды, аҡҡошто үлтерергә ярамай. Төш юрауҙарында аҡ тун кейһәң – һөйөнәһең, аҡ әйбер алһаң – ҡыуанаһың, тигән ышаныуҙар бар.

Шул уҡ ваҡытта башҡорт ышаныуҙарында аҡ менән бәйле шикшөбһәләр ҙә бар. Мәҫәлән, төштә аҡ тауарға төрөнөп, тәҙрә аша осһаң – үләһең; янына аҡ күгәрсендәр осоп килһә – ауырыйһың; аҡ тоҙ күрһәң – гөнаһҡа дусар булаһың; аҡ йылан күрһәң – мосолман дошманың була, – тигән ышаныуҙар бар. Был ышаныуҙар башҡорт мифологияһында аҡ төҫөнөң ҡатмарлы семантикаға эйә булыуына, уның яҡшылыҡ, изгелек символы ғына түгел икәнлегенә ишара яһай. Ахыры, был ышаныуҙар аҡ төҫөнөң үлеләр кейеме булыуы менән бәйлелер һәм башҡортҡа ислам динен ҡабул иткәс кенә килеп ингәндер.

Килеп сығышы яғынан *аҡ* боронғо ҡомартҡыларҙағы төрки aq һүҙе менән бәйле.

***АҠБУҘ, АҠБУҘАТ***. Башҡорт мифологияһында кешегә ярҙам итеүсе, уны ҡурсалаусы ҡанатлы, илаһи толпар. Эпостарҙа Аҡбуҙат «күктә тыуып, күктә үҫкән, һөйләшә алған, ҡылдары тылсымлы көскә эйә булған ат». Ҡайһы бер эпостарҙа Аҡбуҙат һыу аҫты донъяһынан сыҡҡан ат. Ышаныуҙар буйынса, Аҡбуҙат мал ҡото. Уралдағы йылҡыларҙы ла күл төбөнән алып сыҡҡан ат ул. Шүлгән мәмерйәһендә әле лә Аҡбуҙат рухы йәшәй, тиҙәр. Ул кешегә ат йәки аҡ һынлы һыбайлы булып күренә икән. Ышаныуҙар буйынса, Әбйәлил районындағы Боғаҙаҡ күлендә лә Аҡбуҙат йәшәй икән. Ул таңға ғына күлдән сыға һәм кеше күренеү менән кире сума тиҙәр.

*(Ғ.Хисамитдинова. Белорет р-ны, Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Килеп сығышы яғынан Аҡбуҙат һүҙе *аҡ, буҙ* һәм *ат* һүҙҙәре менән бәйле. Әгәр ҙә *аҡ* һүҙе изге мәғәнәһендә ҡулланылһа, *буҙ* һүҙе лә иркен, ирекле йөрөгән ат, ҡош, кеше менән бәйле булырға тейеш. Сағыштырығыҙ: буҙ егет – өйләнмәгән егет, буҙ дөйә – яңғыҙ дөйә, буҙ кеше – ирек һөйөүсән кеше.

***АҠҠОШ***. Башҡорт мифологияһында аҡҡош изге ҡоштарҙан һанала. «Урал батыр» эпосында күк һәм ҡоштар батшаһы Самрауҙың Ҡо-

яштан тыуған ҡыҙы Һомай аҡҡош йә кеше образында бирелә. Эпоста ул Уралдың ҡатыны, ергә ҡот, ырыҫ килтереүсе зат. Урал батыр үлгәс, Һомай мәңгегә аҡҡош булып ҡала, кешеләр янынан китә. Шулай ҙа йылда Уралын һағынып, балаларын-аҡҡоштарын эйәртеп Уралға килә. Кешеләр шул замандарҙан аҡҡоштарҙы ҡәрҙәш, туған итеп ҡабул итә. Шуға, ышаныуҙар буйынса, аҡҡошто атырға, итен ашарға ярамай. Аҡҡошто үлтергән кешенең үҙенә генә түгел, бөтә нәҫеленә ҡарғыш төшә, уның зат-ырыуы ҡорой, юҡҡа сыға. Әгәр ҙә кемдер аҡҡошто танымай, белмәй атһа, уның ите менән аят уҡытырға тейеш, тиҙәр. Аҡҡош атыу менән бәйле ышаныуҙар башҡорттарҙа әле лә йәшәй. Миҫал өсөн Ырымбур өлкәһенең Гай районында яҙып алынған риүәйәтте килтерергә мөмкин: «Беҙҙең Байғаҙаҡ ауылынан бер егет яңылыш аҡҡош атҡан. Аҡҡош икәнлеген күргәс, ныҡ ҡурҡҡан, тиҙәр. «Нимә эшләйем?» – тип ата-әсәһенә алып килгәс, улары ла ҡурҡып киткән, ти. Шунан улар, ололар ҡушыуы буйынса, ошо аҡҡошто бешереп аят уҡытты. Үҙҙәре, хатта нәҫелдәренән булғандар ҙа был аҡҡош итен ашаманы. Аят уҡытҡас, ололар әйтеүенсә, был инде хоҙайға бирелгән аш. Шуға аҡҡошто атҡан егеткә лә, уның нәҫелдәренә лә бер нәмәлә булманы.

*(Х.Тоҡомова, Х.Туйышева, Р.Мәмбәтова. Байғаҙаҡ ауылы).*

Килеп сығышы яғынан аҡҡош төрки сығанаҡлы *аҡ* һәм *ҡош* һүҙҙәре менән бәйле.

***АҠ ЙЫЛАН.*** Башҡорт мифологияһында аҡ төҫтәге мифик *йылан, йыландар батшаһы.* Ышаныуҙар буйынса, аҡ йыланды үлтерергә ярамай. Уны үлтергән кешене йыландар килеп быуып китә, тиҙәр. Аҡ йыланды күргән кеше уның алдына аҡ яулыҡ һалырға тейеш. Сөнки аҡ йылан аҡ әйбергә мөгөҙөн һала икән. Йылан мөгөҙөн тапҡан кеше бик бәхетле була, тиҙәр. Шуға ла башҡорт телендә *йылан мөгөҙөн алыу, йылан мөгөҙө иней* кеүек һүҙбәйләнештәр ҡотайтыу, бәхетле булыу, батыр мәғәнәһендә әле лә ҡулланыла.

Башҡорт мифологияһында аҡ йылан башҡа йыландар кеүек үк ҡатмарлы образдарға ҡарай. Уның бәхет, байлыҡ сығанағы булыуы менән бер рәттән халыҡ ижады әҫәрҙәрендә дошманлыҡ ҡылыусы зат икәнлегенә лә ишара бар. Мәҫәлән, «йыландың ағы ла, ҡараһы ла – йылан» тигән әйтемдә аҡ йыландың да зарары тейеүе ихтимал тигән фекер ята. Аҡ йыланға ошондай ҡараш булыуына түбәндәге йылан арбауы ла ишара яһай:

– Аҡ йылан,
Туҙбаш йылан,

Баҡыр йылан,
Һыу кеүек ағыҙайым
Көл кеүек туҙҙырайым.
*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Ышаныуҙар буйынса, йылан арбаусы саҡҡан йыландың үҙ исемен әйтеп өшкөрмәһә, арбауҙың файҙаһы теймәй. Үрҙә килтерелгән арбауҙа башҡа йыландар менән бергә аҡ йыландың да булыуы, уның кешене сағыуына, уға зыян килтереүенә ишара бар тип, әйтергә була.

Аҡ йылан һүҙе төрки сығанаҡлы аҡ (изге мәғәнәһендә), йылан һүҙҙәренән тора һәм төрки телдәренең бөтәһендә лә тип әйтерлек бар.

***АҠЫҠ.*** Диалекттарҙа *ахыҡ, аһыҡ* атамалары менән йөрөй. Ышаныуҙар буйынса, магик көскә эйә булған таш. Шуға магик дауалауҙа ҡулланыла. Мәҫәлән, йөрәк ауырыуынан йөрәк формаһында эшләнелгән мөһөрлө аҡыҡ ҡулланыла. Күҙгә аҡ төшһә, баш кейеменә, яғаға аҡ юлаҡлы аҡыҡ таҡҡандар. Дим буйы башҡорттары күҙгә аҡ төшһә, аҡ юлаҡлы аҡыҡты, доға уҡып, ҡырҡ бер төйөн менән төйнәп, ауырыуҙың беләгенә тағып ҡуйғандар. Бәләкәй балаларҙы күҙҙән һаҡлау өсөн дә элегерәк баш кейеменә, күлдәгенең түшенә аҡыҡ муйынсаҡ йәки аҡыҡ төймә теккәндәр. Аҡыҡты шулай уҡ йәш килендәрҙең төп биҙәнеү әйбере булған яғаһына (һаҡалға, селтәргә) ла тағыу йолаһы булған. Шул уҡ һаҡлау, ҡурсалау маҡсатынан сығып йәш килендәргә аҡыҡ ҡашлы беләҙек, йөҙөк йөрөтөргә ҡушҡандар.

Килеп сығышы яғынан *аҡыҡ* ғәрәп сығанаҡлы һүҙ. Ҡыҙыл йәки ҡыҙғылтһары аҫыл ташты аңлата.

***АЛАҪЛАУ.*** Диалекттарҙа *төтәҫләү, өтәҫләү, яндырыу, төтәтеү* һүҙҙәре лә ҡулланыла. Ышаныуҙар буйынса, алаҫлау ҡайһы бер ауырыу эйәләрен ҡыуа торған магик ысул. Күҙ тейһә, сарпыу ҡағылһа, ғәҙәттә алаҫлайҙар, йәғни артыш, кейеҙ, алама сепрәк йәки кейем һүрентеләрен яндырып, кешене йәки малды имләйҙәр.

Алаҫлау ҡырғыҙ, алтай, хаҡас халыҡтарына ла хас. Себер төркиҙәренең шамандары был һүҙҙе шаманлыҡ ҡылғанда әле лә ҡуллана. Алаҫ һүҙе иран телдәренән ингән һүҙ һанала. Ул телдәрҙә алаҫ һүҙе «тере ҡуҙ»мәғәнәһендә йөрөй.

***АЛБАҪТЫ.*** Диалекттарҙа *албасты, һары ҡыҙ, сары кыз, һары сәс* исемдәре менән дә йөрөй. Башҡорт мифологияһында албаҫты ялбыр һары сәсле, оҙон имсәкле ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендәге мифик зат.

С.И.Руденко албаҫтының имсәге шул тиклем оҙон, ҙур, уны хатта яурынДан артҡа ташлап була тип яҙып алған XX быуат башында. Албаҫты бик уҫал була. Албаҫты бигерәк тә йәш балаларға, әсәләргә зыян килтереүсән. Йәш баланы албаҫты күкрәге менән баҫып үлтерә икән. Албаҫты баланы ғына түгел олоно ла баҫа. Йоҡлағанда быҫлығыуҙы «албаҫты баҫыу», тиҙәр. «Албаҫты кешегә һары сәсле ҡыҙ булып килә. Күҙе күк матур ғына була. Имсәктәре аның оҙон була. Шул имсәктәре менән кешене баҫып үлтерә. Албаҫты баҫһа, аны сәсенән һөрәп, бер ус сәсен йолҡоп алырға кәрәк. Шунан башҡа килмәй икән».

*(З.Кәшфетдинова. Әбйәлил р-ны, Рәхмәт ауылы).*

Йәш әсәләрҙең албаҫты һөтөн бөтөрә, үпкә-бауырын урлай, уларға күкрәк рәнйеүе килтерә. Ирҙәр енләнеп ауырыһа, элегерәк «албаҫты ойлаған» тигәндәр. Кешегә албаҫты матур ир йәки ҡатын ҡиәфәтендә күренә, яҡынлай. Ул йыш ҡына сексуаль мөнәсәбәткә инергә мәжбүр итә. Албаҫты, бигерәк тә яңғыҙ йәшәгән ирҙәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға ойлаусан. Ҡайһы бер яҡтарҙа – албаҫтының ат яратыуы тураһында һөйләйҙәр. Шуға ла ат өҫтөнә ыҫмала һөртөп, албаҫтыны йәбештереп алыусы ир-егеттәр тураһында легендалар, хөрәфәти хикәйәләр бар. Башҡорт халыҡ ижадында албаҫты ҡыуыу менән бәйле һүҙҙәр һаҡланған.

– Ҡайҙан килдең, шунда кит,
Йыуан имсәктәргә кит,
Йомшаҡ түшәктәргә кит,
Һыуҙың ағышына кит,
Ҡояш байышына кит,
Бында һиңә урын юҡ,
Ҡайҙан килдең, шунда кит.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Албаҫты һүҙенең килеп сығышы ике төрлө аңлатыла. Беренсе ҡараш буйынса, ул төрки сығанаҡлы ал (алғы яҡ) һәм баҫты һүҙҙәренән тора. Икенсе ҡараш буйынса, албаҫты һинд-европа телдәренән ингән һүҙ һәм бик боронғо алиһә исеме.

***АҠ КЕЙЕМЛЕ КЕШЕ.*** Диалекттарҙа шул уҡ мифик затты аҡ салмалы ҡарт, аҡ сәлләле ҡарт, аҡ таяҡлы ҡарт, аҡ сәкмән, аҡ елән, аҡ салма кейгән бабай ҙа тиҙәр. Башҡорт ышаныуҙарында тауыш-тынһыҙ ғына йөрөгән кеше ҡиәфәтендәге мифик зат. Уны төрлө урында күреп була. Ышаныуҙар буйынса, уға өндәшергә, барып тейергә ярамай. Күрһәң, тиҙ

генә уның янынан үтеп китергә кәрәк. Шулай уҡ аҡ кейемле кешегә әйләнеп ҡарарға ла ярамай. Был тыйыуҙарҙы үтәмәгән кешенең ауырыуы ихтимал. Сөнки аҡ кейемле кеше – ул үлгән кешенең рухы, тиҙәр.

Аҡ кейемле кеше, аҡ ҡарт тураһында хөрәфәти хикәйәттәр бик күп. Хикәйәттәрҙе һөйләүселәр был мифик затты күберәк аҙбар, йорт эйәләре йәки үлеләр рухы тип аңлата. Миҫал өсөн Федоровка районында яҙып алынған хикәйәттәрҙән һәм «Башҡортостан» гәзитендә баҫылған материалдарҙан өҙөктәр килтерергә була.

«1937 йылда, малай саҡта, ҡараңғы төшә башлау менән тиҫтерҙәр йәшенмәк уйнарға керешеп китә торғайныҡ. Бер ваҡыт мин йәшенәм тип барған бер стена мөйөшөнә оло сәкмән кейгән, яғаһын торғоҙған, оҙон аҡ таяҡҡа таянған бабай һарай янынан килде лә йоҙроҡ ҡына һыйырлыҡ таш тишегенә инде лә китте. Миндә иһә йәшенеү ҡайғыһы бөттө. Инәйемә һөйләп биргәйнем, «ул ҡайһы ваҡыт күренә шул, ҡурҡмаһаң ярай ҙа», – тине.

1944 йылда түбән яҡтан килешләй шул уҡ бабайҙы, шул уҡ кейемдә тағы күрҙем. Тау башындағы таш ҡаҙан соҡорҙа яңғыҙ ҡара тал үҫә, шуның янында ултыра ине. Мин яҡынлаша башлағас, бабай ултырған еренән торҙо ла йылға буйына төшөп юҡ булды».

*(М.Ташбулатов. Федоровка районы).*

«Бала инем әле. Өйҙәгеләргә:

– Әйҙә, кем минең менән бергә сыға? – тиһәм,

– Малай кеше төндә ҡурҡмай ул, ҡыҙҙар үҙеңдән көләр, юғиһә, – тип кенә яуаплар инеләр.

Шулай, бер сыҡһам, ҡойма буйында аҡ салма, аҡ елән кейгән ҡарт тора. Үҙе минең яҡҡа килә бирә лә кире китә. Ҡараңғы төндә аҡ нәмә асыҡ күренә бит инде, ҡайҙа китер икән был таныш булмаған мулла тип, әҙерәк күҙәтеп тора бирҙем. Ул әлеге урында йөрөнө-йөрөнө лә келәт артына инеп юғалды.

Өләсәйемә һөйләһәм:

– Йорт эйәһе бит ул, улым. Кеше күҙенә төрлө кейемдә күренә. Уға бер ҡасан да өндәшергә, яҡын барырға ярамай, – тине.

Был хәлдән һуң мине, зәхмәт сире бәрелер тип, яңғыҙымды сығарманылар».

*(Х.Яхин. «Башҡортостан» гәзите).*

Аҡ кейемле кеше атамаһы төрки сығанаҡлы *аҡ, кейем* һәм *кеше* һүҙҙәренән тора.

***АҠ КҮГӘРСЕНДӘР.*** Ышаныуҙар буйынса, балаларҙың, яҡшы кешеләрҙең йәне, улар үлгәс, аҡ күгәрсен булып осоп йөрөй. Шул сәбәпле аҡ күгәрсенде үлтерергә, бешереп ашарға ярамай. Был тыйыуҙарҙы боҙһаң, ҡайғы, ауырыу килә тиҙәр.

Аҡ күгәрсен атамаһы төрки сығанаҡлы *аҡ* һәм *күгәрсен* һүҙҙәренән тора.

***АҠ КҮГӘҮЕНДӘР.*** Ышаныуҙар буйынса, зыяратта йәшәгән үлеләр йәне. Улар ғәҙәттә зыяратта, зыярат тирәһендә осоп йөрөй икән. Шуның өсөн зыярат тирәһенән үткәндә ҡысҡырып һөйләшергә, көлөшөргә, тештәрҙе күрһәтергә ярамай. Шулай уҡ бармаҡ менән төртөп күрһәтергә лә ярамай икән. Ошо тыйыуҙарҙы үтәмәһәң, аҡ күгәүендәр һинең артыңдан эйәреп ауылға килә. Был осраҡта һинең ғаиләң дә йәки туған-тумасаң да мәйет була икән.

Аҡ күгәүендәр атамаһының килеп сығышы төрки сығанаҡлы *аҡ* һәм *күгәүен* тигән һүҙҙәр менән бәйле.

***АҠЪЯЛ БАТЫР.*** Башҡорт экиәттәрендә генә һаҡланған образ. Әкиәттәрҙә ул ап-аҡ оҙон сәсле, бик көслө, ғәҙел экиәт батыры. Әкиәттәрҙә ул һыу хужаһы дейеүҙе үлтереп, халыҡты үлемдән ҡотҡара. Ете йыл көн дә ете егетте үлтерткән батшаны аҡылға ултырта. Аҡъял батыр образының килеп сығышы бик боронғо мифологик ҡараштарға нигеҙләнергә тейеш. Атамалағы *аҡ* һүҙе был образдың изгелек, яҡшылыҡ, ә *ял* иһә мифик образдың ат менән бәйле булыуына ишара яһай. Ат культы, ат эйәһе менән бәйле ышаныуҙар башҡорттарҙа бик күп. Мәҫәлән, ышаныуҙар буйынса, Боғаҙаҡ күленән таң һарыһы беленгәс, көндә ап-аҡ ялбыр яллы ат сыға икән. Яҡын-тирәлә кеше-фәлән күренмәһә, был ат ярҙа һап-һары сәсле бер егеткә әүерелә, тиҙәр. Таң атҡас кеше маҙар килеп сыҡһа, ул күлгә кире төшөп китә икән. Был изге ат, шуға уны күргән кеше бәхетле була, тиҙәр. Шүлгән мәмерйәһендә йәшәгән Аҡбуҙат рухы тураһындағы легендала ла аҡ төҫлө ат культы сағылыш тапҡан. Аҡбуҙат рухы ла йә ат, йә аҡ һынлы һыбайлы булып күренә икән кешеләргә.

Килеп сығышы яғынан Аҡъял атамаһы төрки сығанаҡлы *аҡ* һәм *ял* һүҙҙәренә барып тоташа.

***АЛЛА.*** *Аллаһы тәғәлә, алла бабай, хоҙай* исемдәре менән дә йөрөй. Башҡорт мифологияһында донъяны, кешене яратҡан, улар менән идара иткән юғары зат.

Ышаныуҙар буйынса, алла күктә йәшәй. Әммә шуға ҡарамаҫтан ерҙә һәр нәмәне, һәр кемде күрә, белә, улар менән идара итә. Хатта

баштан сәс тә алла ҡушыуы буйынса ғына төшә, тиҙәр ололар. Алла уны танығандарға, табынғандарға, күңелдәре пак кешеләргә, изгелек юлында булғандарға яҡшылыҡ ҡыла. Ул уларҙы яҡлай, һаҡлай. Алла шул тиклем киң күңелле, хатта ҡасандыр енәйәт ҡылып, бөгөн ғәфү үтенеүселәрҙе лә ярлыҡай. Шул уҡ ваҡытта яуыздарға, иманһыҙҙарға алла ҡаты яза ла бирә, тиҙәр. Донъяла яуызлыҡ, бысраҡлыҡ күбәйеп китһә, алла ер тетрәүҙәр, һыу баҫыуҙар кеүек ғәрәсәттәр ебәрә икән. Алла мифик зат булараҡ башҡорттарға ислам дине менән килеп ингән. Шуның өсөн алла менән бәйле мосолман мифологияһына хас булған бөтә ышаныуҙар, тыйыуҙар башҡорттарҙа ла бар. Шул уҡ ваҡытта алла образына башҡорттар исламға тиклем булған тәңрелек диненең Бөйөк тәңреһенә хас булған сифаттарҙы ла өҫтәгән.

Башҡорт телендә Алла исеме менән *аллаһә әкбәр, алла бирһә, алла бойорһа, аллаға тапшырыу, алла бәндәһе, алла рәхмәтенә китеү, алла хаҡына кеүек һүҙбәйләнештәр, Аллабирҙе, Аллағол, Аллағыуат, Аллаяр, Алламорат* һ.б. исемдәр, «*аллаға – шөкөр, муллаға – фытыр*» кеүек мәҡәл һәм әйтемдәр бар.

***АЛМАШТЫРЫУ.*** Башҡорт телендә *ен алмаштырыу, шайтан алмаштырыу, бәре алмаштырыу* кеүек һүҙбәйләнештәр бар.

Ышаныуҙар буйынса, сабыйҙы ҡырҡ көнгә тиклем яңғыҙын ҡалдырһаң, уны ен алмаштыра, йәғни ен кеше балаһы урынына үҙенекен һалып китә. Ен (шайтан) балаһы булғас, алмаштырылған бала йәмһеҙ, ҡотһоҙ була икән. Уның шулай уҡ эсе ҙур, аяҡ-ҡулы нәҙек, күҙ алмалары бер туҡтауһыҙ тәгәрәп тә тора, тиҙәр. Алмаштырылған бала аҡылға ла зәғиф була икән. Ололар әле лә аҡылға бер көйө, даун ауырыуы менән ауырыған балаларҙы ен алмаштырған бала тиҙәр. Алмаштырылған балалар тураһында хөрәфәти хикәйәләр бик күп. Миҫал өсөн Белорет районында яҙып алынған хикәйәне килтерергә була. «Элек беҙҙең ауылда аяҡ-ҡулы еп һымаҡ, эсе көбөләй бер бала була торғайны. Шулай булһа ла үҙе йөрөй ине. Ул бала һыуыҡта ла яланаяҡ, яланбаш йөрөнө. Күҙҙәре аның таҫырайып тора ине. Ҡасан ҡарама гел икмәк ашап йөрөр ине. Әпсәһе: «Бирән, ҡороғор, туймаҫ булдың бит», – тип әрләй торғайны. Ун өс йәшкә тиклем йөрөнө ул. Аҙаҡ үлде. Ана шул баланы ауылда «бәре балаһы», «бәре алмаштырған» – ти торғайнылар.

*(F.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, ен үҙ балаһын кире алыуы ла ихтимал. Быының өсөн ауырыу баланы юл буйына сығарып, һуҡҡылап, илатып алырға кәрәк икән. Имеш, ен, илаған балаһын йәлләп кире алып китә икән.

*Алмаштырыу* төрки сығанаҡлы башҡорт һүҙе.

*АЛП.* Диалекттарҙа, халыҡ ижадында *алып, алап, Алып батыр, Алпар, Алпамыша* исемдәре менән дә йөрөй. Башҡорт телендә алпанлау, алпан-толпан, алпы-толпо, алпы-һалпы кеүек һүҙҙәр; Алпарына күрә толпары; Алп ананан тыуыр, арғымаҡ бейәнән тыуыр кеүек әйтемдәр составында *алп* һүҙе һәм уның варианттары осрай.

Башҡорт мифологияһында Алп бик ҙур кәүҙәле, көслө, мөһабәт изге зат. Алптың бармаҡтары беләктәй, беләктәре бүрәнәләй, яурыны яландай, кәүҙәһе имәндәй икән. Уның аяҡтары ла бик ҙур, тиҙәр. Хатта сабатаһынан ҡаҡкан тупраҡтан тауҙар, түбәләр барлыҡҡа килә, аяҡ эҙҙәренән күлдәр хасил була. Кәүҙәһе, аяҡтары ҙур булғанға Алп лаплоп итеп, кәүҙәһен саҡ күтәреп йөрөй икән. Шуға ла лап-лоп, һөрөнә биреп йөрөгән кешене Урал аръяғы башҡорттары Алпамыша тиҙәр. Ауыр баҫып, ян-яҡҡа ауа биреп йөрөгән кешене лә башҡорт диалектарында *алпы-толпо, алпан-толпан, алпы-һалпы* йөрөй, тиҙәр.

Алп, Алпамыша образдары башҡорт экиәттәренә лә ингән. Әкиәттәрҙә ул ҙур кәүҙәле, көслө итеп кенә түгел, аҡыллы, ғәҙел итеп тә һүрәтләнә. Ул экиәттәрҙә ил гиҙә, яҡшы эштәр ҡыла, яуызға яза бирә, ҡағылған-һуғылғанға ярҙам итә.

Алп, Алып, Алпамыша төрки халыҡтарының ижадында, телдәрендә киң таралған. Шуға килеп сығышы яғынан был төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа мәргән, батыр, ҡаһарман мәғәнәләрендә йөрөгән *alp* һүҙе лә был фекерҙе иҫбатлай.

*АНТ.* Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә ант һүҙе «кәтғи, тантаналы һүҙ менән нығытылған вәғәҙә» тип аңлатыла.

Ышаныуҙар буйынса, антты боҙорға ярамай. Боҙһаң ант башҡа етә, тиҙәр. Ул боҙолған анттың ҡоһорон күреүҙе аңлата. Антын боҙған кеше үлә, икән. Әгәр кеше күҙе менән ант итһә (ошондай һүҙҙәр әйтеп: күҙем сыҡһын, ант!), уның күҙе сыға, тиҙәр. Бала-сағаһы, атаәсәһе менән дә ант итеү бар. Мәҫәлән, *балам менән ант итәм; валлаһи-билләһи, әсәм менән ант итәм*! Ышаныуҙар буйынса, әгәр кеше бала-сағаһы, ата-әсәһе менән ант итһә, улары үлә, икән. Ололар араһында ант боҙоу менән бәйле хөрәфәти хикәйәләр ҙе әле лә яҙып алып була. Миҫал өсөн Учалы районында яҙып алынған материалды килтерергә була.

«Әүәле беҙҙә, ҡәйнәм һөйҙәүенсә, бер кеше булған. Ул гел: «Валлаһи-билләһи, ана ҡояш, бына икмәк, күҙем сыҡһын, ант» – тип йөрөгән.

һулыу һайын күҙе менән ант иткән. Шул кешенең утынға барғанда күҙенә ботаҡ инеп киткән, күҙе сыҡҡан. Ҡәйнәм: «Боҙолған анттың ҡоһоро тейә, бушҡа ант итмәгеҙ, ант иткәс, аны тоторға кәрәк», – тей торғайны».

*(Г.Аҕзамова. Учалы р-ны, Батал ауылы).*

Башҡорт телендә *ант* һүҙе менән анты-манты ер йотһон, ант башҡа етеү, ант итеү; ант, ана ҡояш; күҙем сыҡһын, ант; валлаһи-билләһи, ант; ант эсеү, антты боҙоу, антты тотоу кеүек һүҙбәйләнештәр бар. Был һүҙбәйләнештәр һәм ант менән бәйле ышаныуҙар башҡорттарҙа ҡасандыр һүҙ магияһы, һүҙ культы булыуына ишара яһай (ҡара: *һүҙ* тигән статьяны).

Ант төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш, боронғо төрки ҡомартҡыларҙа вәғәҙә, тоғролоҡ мәғәнәһендә осрай.

***АҢДЫУ.*** Башҡа диалекттарҙа *һаҡлау, көтөү, һағалау, тәнәтеү* һүҙҙәре йөрөй.

Ышаныуҙар буйынса, баланы ҡырҡы тулғанса аңдырға, йәғни һаҡларға кәрәк. Бының өсөн, беренсенән, бер үҙен генә өйҙә ҡалдырып сығырға ярамай. Сыҡҡан осраҡта баланың бишегенә бысаҡ, ҡайсы йәки башҡа тимер әйбер һалырға кәрәк. Ҡырҡ көн үтмәйенсә төндә утты һүндерергә ярамай. Мунсала йыуындырғанда баланы эләүкәгә һалып ҡуйырға ярамай. Шуға ҡулдан ҡулға йөрөтөр өсөн уны ике кеше алып барырға тейеш. Баланы мунсала аңдығанда һүҙ магияһы ла ҡулланыла. Сағыштырығыҙ:

Һап-һап-һап!
Мунса ташы,
Бәрәс башы,
Төлкө башы,
Яҡшы ата балаһы
Төлкө тундың яғаһы
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә-Фатима ҡулы
Һап-һап-һап!

Һаҡлау маҡсатынан балаға эт йәки көсөк күлдәге лә тегеп кейҙергәндәр. Ышаныуҙар буйынса, «эт күлдәге» кейгән балаға ен-шайтандар яҡын килмәй икән. Күҙ уғынан һаҡлау, ен-пәрейҙәрҙән ҡурсалау ниәте менән баланың ҡулына ҡыҙыл сепрәк, ебәк еп, маңлайына ҡором, баш кейеменә йәки яғаһына ҡортбаш таҡҡандар. Шулай итеп

төрлө ысулдар менән ен-шайтанды, ауырыу эйәләрен балаға яҡын ебәрмәҫкә тырышҡандар.

Ырымбур башҡорттары мәйет көтөүҙе лә *аңдыу* тиҙәр. Ышаныуҙар буйынса, мәйетте аңдымаһаң, йәғни көтмәһәң, уның эсенә ен-шайтан инеп ҡала икән. Ен-шайтан ингән үлек убырға әйләнә, тиҙәр. Аңдығанда ике-өс кеше мәйет эргәһендә ултыра, Ҡөрьән сүрәләрен уҡый. Төндә өйҙә электр уты йәки шәм янып торорға тейеш. Шулай итеп мәйет аңдыу ҙа ен-шайтандан ҡурсалау, һаҡлауҙы аңлата.

Аңдыу төрки сығанаҡлы *аң* (ҡырағай йәнлек, кейек аулау мәғәнәһендә) һүҙе менән бәйле.

***АРБАУ.*** Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә *арбау* «сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп үҙеңә буйһондороу» тип аңлатыла.

Ышаныуҙар буйынса, *арбау, йылан арбау* йәки *йылан теле* тип аталған йола башҡорттарҙа киң таралған булған. Шуға бик көслө йылан арбаусылар йәшәгән. Уларҙан яҙып алынған материалдар буйынса, төрлө йылан арбауҙары бар. Миҫал өсөн аңлатмалы һүҙлек фондында һаҡланған арбау тураһындағы материалды килтерергә мөмкин.

«Сей йүкәнән йылан төҫлө итеп өстән йәки биштән бәй үрәләр. Шуны йылан саҡҡан ергә бәйләйҙәр. Артабан ыуын ауыҙ менән һурып алып төкөрәләр. Шунан йүкә бәйҙе, иҫке баҡыр аҡсаны сағылған ергә тейҙерә-тейҙерә түбәндәге арбау һүҙен әйтәләр:

– Аҡ йылан,  
Туҙбаш йылан,  
Баҡыр йылан,  
Һыу кеүек ағыҙайым,  
Көл кеүек туҙҙырайым.  
*(Аңлатмалы һүҙлек картотекаһы).*

Эт, йылан арбауҙарынан тыш теш ҡорто арбауы бар. Миҫал өсөн «Йола фольклоры» томында бирелгән арбауҙарҙың береһен килтерергә мөмкин.

Алтын ҡойроҡ – атағыҙ,  
Айры ҡойроҡ – инәгеҙ,  
Төш, ҡортом, төш, ҡортом,  
Шул солоҡҡа күс ҡортом.  
Алтын башлы атағыҙ,  
Уҡа башлы инәгеҙ,

Кемгә зәхмәт һалған ҡорт,
Кемгә рәхәт һалған ҡорт,
Өс йөҙ алтмыш тамырға,
Сихәт һалған сәңке ҡорт,
Сихәтең менән ҡун, ҡортом!
Ҡун, ҡортом, ҡун, ҡортом!
Ҡун, ҡортом, күс, ҡортом!
Төш ҡортом, төш ҡортом!

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Арбау һүҙе менән башҡорт телендә фразеологик һүҙбәйләнештәр, мәҡәл-әйтемдәр, ырымдар ҙа бар. Мәҫәлән: *тәмле тел йылан арбаған; арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай; эт арбау доғаһы; туҙбаш йылан тешләһә, арбап була, ә билендәле тешләһә, яман була; йылан арбау, эт арбау, теш ҡортон арбау* һ.б.

Килеп сығышы яғынан арбау төрки сығанаҡлы һүҙ. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа ла arva, arvaš, arvïš, arvïšcï һүҙҙәре арбау, арбаусы, арбау доғаһы мәғәнәһендә ҡулланыла.

***АРПА.*** Ышаныуҙар буйынса, һәр ауырыуҙың эйәһе бар. Арпаның, йәғни керпек төбөнә сыға торған эренле шешектең дә, эйәһе бар икән. Арпа ауырыуы эйәһен башҡорттар һары сәсле бәләкәй генә һуҡыр әбей ҡиәфәтендә күҙ алдына килтергән. Эйәле ауырыу булараҡ арпаны тик им-том ысулы менән генә бөтөрөп була икән. Башҡорттарҙа төрлө имләү ысулдары булған. Ғәҙәттә арпаны өс, ете, туғыҙ бөртөк арпа, итәк, иҙеү осо, урта бармаҡ менән төртөп имләйҙәр. Имләгәндә түбәндәге йәки башҡа һамаҡтарҙы әйтәләр.

– Нимә имнәйең
– Арпа имнәйем (3 тапҡ.).
Арпа, бәлеш, мә күкеш (3 тапҡ.).
Ай ҡайта, көн ҡайта,
Килгән ҡунаҡ та ҡайта,
Һин дә ҡайт!

***

Арпа сыҡҡан күҙеңә,
Арпа мәлән-мәмәлән,
Арпа мәлеш, мә күкеш,
Елдән килһәң, елгә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,

Ҡайҙан килһәң, шунда кит.
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә-Фатима ҡулы,
Име-төмө шул булһын!

Төртөү менән бер рәттән өшкөрөү ысулы ла ҡулланылған. Мәҫәлән, Ҡариҙел районында арпа сыҡҡан кешенең күлдәк иҙеүен, яғаһын алдан артҡа әйләндереп, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтеп өшкөрәләр:

Тфү, тфү, тфү!
Ҡайҙан килсәң, шунда кит!
Көннән килсәң, көнгә кит!
Айҙан килсәң, айға кит!
Елдән килсәң, елгә кит!
Сыуҙан килсәң, сыуға кит!
Тфү, тфү, тфү!

*(Н.Ғәлиева. Иҫке Боғаҙы ауылы).*

Төртөү, өшкөрөү ысулдарынан тыш күҙ алдында бармаҡ, йоҙроҡ, йәки ботаҡ менән сәғәт йөрөшөнә ҡаршы йөрөтөп имләү ысулы ла ҡулланылған. Был имләүҙе ҡулланғанда түбәндәге һүҙҙәрҙе бер нисә тапҡыр ҡабатлайҙар.

Име-томы шул булһын,
Кәбәк кеүек киптерәм,
Туҙан кеүек туҙҙырам,
Һары майҙай иретәм,
Арпа-бәлеш, мәмәлеш!
Ай ҡайтты, көн ҡайтты,
Яман арпа һин дә ҡайт!

Башҡа ысулдар менән бер рәттән арпа ауырыуы эйәһен эткә, ҡошҡортҡа күсереү ҙә бар. Мәҫәлән, Илеш районында ҡырҡ бер бөртөк арпа менән күҙгә сыҡҡан арпаны төрткөләйҙәр ҙә, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтеп, эткә ырғыталар:

Кит, кит, кит, арпа,
Минән эткә кит арпа,
Минең күзгә сыҡкансы,
Эт күтенә сыҡ арпа!

*(Б.Халиҡова. Ҡәҙер ауылы).*

Арпа ярмаһынан тыш йылы икмәкте лә күҙ арпаһына тейҙереп алып, эткә ырғытыу алымы осрай.

Күсереү, ҡыуыу ысулдарынан тыш арпа эйәһен әрләп, кәмһетеп сығарыу ҙа киң таралған. Мәҫәлән, башҡорт халыҡ ижадында «Арпа! Фатиманың күҙенә сыҡма, эт күтенә сыҡ», – тип һамаҡлаһаң, арпа эттән ерәнеп бөтә икән, тиелгән. Ышаныуҙар буйынса, шулай уҡ «айыу күтенә», «бүре күтенә», «мә күкеш», «артаҡ», «эт тиҙәге», «эт терһәге» һ.б. имләгәндә яман һүҙҙәрҙе әйтһәң, арпа ғәрләнеп ауырыуҙы ташлап китә икән.

Арпа имләгәндә тағы ҡара епле энә, ҡара ҡарағат япрағы, игеҙ бала тапҡан ҡатындың иҙеүе, яҫтыҡ (мендәр) осо ла ҡулланыла. Мәҫәлән, ҡара күҙле кешегә арпа сыҡһа, уны мунсала ҡара ҡарағат япрағы боҫона тоталар.

Башҡорт телендә арпа һүҙе менән *арпа сығыу, арпа әпсене, арпа-мәлек, арпа имләү* кеүек һүҙбәйләнештәр бар.

Килеп сығышы яғынан *арпа* боронғо төрки ҡомартҡыларҙағы агра һүҙенә барып тоташа.

**АРТАҠ.** Ышаныуҙар буйынса, балаларҙы ҡурҡыта торған яман мифик зат. Артаҡ үҙе йөнлө, үҙе имәнес ҙур, ә күҙҙәре аҡыры, аяҡтары артҡа ҡарап торған зат тиҙәр. Уның ҡулы бик оҙон, бармаҡтары алтау икән.

Артаҡ һүҙе боронғо төрки ҡомартҡыларҙа яуыз, боҙоҡ, уҫал, тын ҡыҫыусы мәғәнәһендә ҡулланыла. Шуның өсөн артаҡ исемле мифик заттың исеме лә төрки сығанаҡлы artaq (яуыз, боҙоҡ) һүҙе менән бәйле булырға тейеш.

***АРТЫШ.*** Ышаныуҙар буйынса, артыш ағасы магик көскә эйә. Унан бөтә яман көстәр ҙә ҡурҡа, ҡаса икән. Шуға өйҙә йәш бала, әсә булһа, артыш төтәтеү йолаһы бар. Өй тынысһыҙ булһа, мәйет йыуғанда, уны сығарғанда ла, артыш төтәтәләр. Ишек, тәҙрә баштарына, мөйөштәргә артыш элеү әле лә осрай.

Боронораҡ бала бишеген дә артыштан яһағандар. Бишектең сиртмәһен ботаҡтары күп булған сатлы артыштан эшләргә тырышҡандар. Ышаныуҙар буйынса, бындай бишеккә яман заттар, сихыр-боҙомдар, күҙ уғы яҡын килмәй. Шул уҡ ваҡытта сатлы артыштан эшләнгән бишек сиртмәһе ғаиләгә күп бала, ә өйҙәге бөтә ҡатын-ҡыҙҙарға түлле булыуҙы теләп тора икән. Артыштың магик көсөнә ышаныу башҡорттарҙа шул тиклем көслө булған, хатта баланың киләсәген дә артыш ярҙамында ыңғай итергә тырышҡандар. Мәҫәлән, Илеш районында яҙылған бала бәүетеү һамағы ҡыҙ балаға парлы булыуҙы теләй.

– Сикертмәле артыштыр,
Егеттәргә ҡауыштыр –

*(Ш.Нурисламова. Баҙытамаҡ ауылы).*

Артыш һүҙе килеп сығышы яғынан боронғо төрки artuč ‘артыш’ һәм arït ‘таҙартыу’ һүҙҙәре менән бәйле булырға тейеш.

*АТ.* Башҡорт мифологияһында ат образы айырым бер урын алып тора. Ул кешенең иң яҡын дуҫы, кәңәшсеһе, ярҙамсыһы, ҡурсалаусыһы. Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә Ат кеше нәҫеленә нигеҙ һалыусы ла. Мәҫәлән «Әҙәм тарпаны» тигән легендала Туҡ буйында йәшәгән *баштай* ырыуы тарпан тайы менән әҙәм затынан таралған. «Буҙансы батыр» әкиәтендәге батырҙың әсәһе лә бейә була. Шулай итеп ат башҡорт мифологияһында тотем, ырыу башы, ҡурсалаусы, ҡотҡарыусы, ярҙам итеүсе. Ул башҡортҡа күл төбөнән мал сығара, батыр тыуҙыра, һуғыштарҙа, алыштарҙа кәңәш бирә; үлһә, яраланһа – ҡотҡара. Шуғалыр ҙа борон-борондан ат изге һаналған; уның эйәһе барлығына Ибн-Фаҙлан заманынан уҡ башҡорттар ышанған.

Ышаныуҙар буйынса, аттың үҙе генә түгел уның ҡылы, тире, һөтө, хатта эйәр-өпсөнө лә магик көскә эйә. Мәҫәлән, ҡырҙа йоҡлаған ваҡытта баш осона ҡамыт, эргә-тирәңә сыбыртҡы һалһаң, ат тиренән ҡурҡып янына ен-шайтандар килмәй, тиҙәр.

*(Ш.Сафин. Учалы р-ны, Аһылай ауылы).*

Ат тирен, тиҙәген, боҫон ауырыу эйәләрен ҡыуыу өсөн дә ҡулланғандар. Мәҫәлән, шешкән, күгәргән, ҡаймыҡҡан ергә ат тиҙәген бәйләп ҡуйыу, ауыртҡан ергә тирен һөртөү, ауырыу баланы аттың боҫона тотоу кеүек «йүнәлтеү» алымдары 60–70 йылдарҙа ла ҡулланылған.

*(F.К.Хисамитдинов. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Ат дағаһын, ҡыу башын элеп ҡуйыу йолаһы бар. Аттан төшөп ҡалған дағаны тупһаға ҡаҡһаң, өйгә тел-теш, ен-шайтан инмәй икән. Малтыуар, ҡорт, ҡош-ҡорт үрсеһен, ҡазаланмаһын тип ҡыу ат башын кәртәҡураға, умартаға элеп ҡуйыу йолаһы әле лә һаҡланған.

Башҡорт телендә ат һүҙе менән: *ат кеүек эшләү, ат башындай, ат ҡолонлатыу, атҡа менгәндәй булыу, ат күҙендәй; ат саба тип бет саба; ат аунаған ерҙә төк ҡала* һ.б. фразеологизмдар, мәҡәл-әйтемдәр бар. Ат һүҙе килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ.

***АУЫҘ ОСОНОУ.*** Диалекттарҙа *ауыҙлыҡ булыу, ауыҙлыҡ, ауыҙ бешмә* кеүек һүҙҙәр ҙә йөрөй осрай.

Ышаныуҙар буйынса, ауыҙға яман заттар тейһә (үпһә, ҡағылһа, һуҡһа) йәки улар ауыҙ иткән аш-һыуҙы, ҡағылған һауыт-һабаны ауыҙға тейҙерһәң, *ауыҙ осона,* йәғни ауыҙға бөрсөк-бөрсөк сабыртма сыға. Был ауырыуҙы ғәҙәттә ат ауыҙлығын тешләтеп имләйҙәр.

Башҡорттарҙа *ауыҙ осоноуға* ҡаршы профилактик саралар системаһы ла булған. Мәҫәлән, башҡорттар ит ашағандан һуң мотлаҡ ауыҙ-морондо сайҡатырға ҡушалар. Сайҡатмаһаң, ен-шайтан ауыҙыңды ялай икән. Бигерәк тә ауыҙ сайҡатмайынса урамға сығырға тыялар. Шуның өсөн ит ашы ашағандан һуң элегерәк еҙ тас һәм ҡомған менән рәтләп ҡул һәм ауыҙ-морон сайҙырыу йолаһы булған.

Шулай уҡ башҡорттарҙа аш-һыуҙы, тоҙҙо асыҡ ҡалдырырға ярамай. Ышаныуҙар буйынса, асыҡ ҡалған тоҙға, аш-һыуға шайтан төкөрә. Шуны ашаған кешенең ауыҙы осона, тиҙәр.

*Ауыҙ осоноу* һүҙбәйләнешендәге осоноу һүҙе боронғо төрки сығанаҡтарҙа осраған učjuq, učïq исемле ауырыу эйәһен аңлатҡан һүҙҙәр менән бәйле булырға тейеш. (ҡара: *осоҡ*).

***АУЫҘЫҢДАН ЕЛ АЛҺЫН.*** Ышаныуҙар буйынса, ошо һүҙҙәр ярҙамында ҡарғыштың, тел-тештең, нахаҡ һүҙҙәрҙең тәьҫирен туҡтатып була. Был ҡарғыш ҡайтарыусы һүҙбәйләнештең килеп сығышы башҡорттарҙа киң таралған һүҙ магияһына инаныу менән бәйле. (ҡара: һүҙ).

***БАБАЙ.*** Диалектарҙа быуай, папай варианттары ла бар. Ышаныуҙар буйынса, бәләкәй балаларҙы ҡурҡыта торған мифик зат. Уны ғәҙәттә ялбыр сәсле, алама кейемле, бәләкәй күҙле, таяҡҡа таянған ҡарт ҡиәфәтендә күҙ алдына килтерәләр. Ышаныуҙар буйынса, бабай балаларҙың үтә ҡотороуын, шаярыуын, илауын яратмай. Шуға ла балалар артыҡ шаяра, илай башлаһа: «Ана, бабай килә! Илама, бабай әпкитә!» – тип тыялар.

Күбәләк башҡорттарының ышаныуҙары буйынса, бабай – ул өй эйәһе. Уға, йәғни бабайға, өйҙән оҙаҡҡа киткәндә икмәк-тоҙ ҡалдырып китергә кәрәк. Шулай уҡ өйҙө таҙа, тыныс тотоу ҙа мотлаҡ. Балаларҙы илатып, шаяртып, өйгә индерелгән бәрәс-һәрәстәрҙе, быҙауҙы баҡыртып ултырыуҙы ла яратмай икән ул. Өйө таҙа, тыныс, бала-сағаһы тәртипле кешеләрҙе бабай ярата, уға ярҙам итә, өйөн, бала-сағаһын һаҡлай тиҙәр. Яңы өйгә күскәндә берәй тоҡто асып: «Әйҙә,

бабай, ултыр, яңы өйгә күсәбеҙ!» – тиҙәр. Яңы өйҙә тоҡто асып: «Бына инде беҙҙең өй, һаҡла, бабай», – тиҙәр.

Бабай һүҙе төрки сығанаҡлы *баба*, йәғни *атай* һүҙе менән бәйле. Бабай менән бәйле мифология олата-бабалар культына барып тоташа. Телдә *Донъя бабайы, Ҡыш бабай, Нужа бабай* кеүек һүҙбәйләнештәр ҙә осрай.

***БАҒЫМСЫ.*** Диалекттарҙа, халыҡ ижадында бағыусы, бағынсы, бағым бағыусы, баҡсы тип тә йөрөтөлә. Бағымсының күрәҙәлек итеүсеһен күрәҙәсе, шайтан-күрәҙә, әүлиә; йылан, ҡорт арбау менән булышҡанын – арбаусы; им-том итеүсеһен – им-томсы; мулла; ырымлауҙар менән шөғөлләнгәнен – ырымсы; һынсы; ноҡот һалғанын – ноҡотсо тип тә йөрөткәндәр. Шулай итеп, бағымсы күрәҙәлек, им-том, арбау, ырым менән булышҡан. Ул кешенең үткәнен һәм киләсәген, ауырыусырхауҙарын, хатта уй-ниәттәрен дә белгән. Шуға күрәҙәлек ҡылған бағымсыға төрлө тарафтарҙан килгәндәр. Бағымсы төрлө саралар менән: ноҡот һалып, утҡа тоҙ, үлән ташлап, еп тартып, һыуға ҡарап, ағын һыуға юнышҡы һалып һ.б. күрәҙәлек иткән. Улар кеше яҙмышында ниндәй үҙгәрештәр була, уй-хыялдары тормошҡа ашамы-юҡмы, мал-тыуары, ҡош-ҡортто үрсерме-юҡмы, юғалған малы, әйбере, ғәйеп булған туған-тумасаһы табылырмы-юҡмы – барыһын да әйтеп биргән. Мәҫәлән, Баймаҡ районында йәшәгән Мөжәүер хәҙрәт юғалған кешеләрҙең иҫәнме, түгелме, хатта ҡайҙа йөрөүен дә әйтеп биргән.

*(Р.Закирова. Сибай ҡалаһы).*

Күрәҙәлек менән бер рәттән бағымсы-баҡсы арбау, им-том менән дә булышҡан. Мәҫәлән, Белорет районында йәшәгән Илһамова Зәйтүнәнең атаһы баҡсы-арбаусы булған. Һөйләүҙәре буйынса, ул арбаған йыландар йә ҡатып ҡалған, йә эстәре шартлап үлгән. Ул йылан телен яҡшы белгән, шуға йыландар менән һөйләшеп, аралашып та йәшәгән.

*(З.Илһамова. Инйәр ҡасабаһы).*

Ҡайһы бер бағымсылар, үрҙә әйткәнсә, им-том менән булышҡан. Улар ҡот ҡойоп ҡот ҡайтарған, татран ҡыуған, арпа, йыланғараҡ, өсйән, ҡыҙылса һ.б. ауырыуҙарҙы имләгән. Миҫал өсөн, Баймаҡ районында яҙып алынған материалды килтерергә була. «Им-томсо балаға күҙ тейһә, ыҫлай торғайны. Ул ете төрлө әйбер: артыш, дары, шырпы көкөртө, баланың ата-әсәһенең елкә сәсе, күмер, еп киҫәге, эт йәки бесәй

йөнө ала торғайны. Шунан ҡояш байып барғанда һоҫҡоға утлы күмер алып шуға әҙләп кенә сәс, йөн, көкөрт, артыш һ.б. һала-һала баланың янында ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, уратып йөрөй торғайны:

Һыуҙың ағышына кит,
Көндөң байышына кит,
Йомшаҡ түшәктәргә кит,
Йомшаҡ яҫтыҡтарға кит.
Ҡарайт, мәлеғон,
Ҡарайт, мәлеғон,
Ҡайт үҙең, ҡайт.

*(Ф.Аскарова. Баймаҡ р-ны, Һәмән ауылы).*

Килеп сығышы яғынан *бағыусы, баҡсы* төрки сығанаҡлы бағыу (ҡарау, һынау, күрәҙәлек итеү, им-том итеү) һүҙе менән бәйле. Боронғо ҡомартҡыларҙа *баҡсы* һүҙе уҡытыусы, остаз, табип мәғәнәһендә лә ҡулланылған.

***БАЙ.*** Башҡорт телендә бай һүҙе үҙенең төп мәғәнәһенән тыш *өлөш, яҙмыш* мәғәнәһендә ҡулланыла. Сағыштырығыҙ, *бай һөйәк* (өлөш һөйәге), *бай һөйәк өләшеү* (өлөш һөйәге таратыу), *алдың байыңды* (алдың өлөшөңдө), *байын ҡайтарыу* (ҡоһорон ҡайтарыу), *бай хаҡ, байарлау* (бағышлау). *Бай* һүҙе шулай уҡ тылсымлы көскә эйә булған, күберәк яңғыҙ үҫкән ағастар атмаһында ла ҡулланыла. Мәҫәлән, *бай тирәк, бай ҡайын, бай сауыл.* «Ырғыҙ»романында «бай» һүҙе һуңғы һүҙ мәғәнәһендә ҡулланылған. Быларҙан тыш *бай* элементы байғош (өкөнөң бер төрө йәки меҫкен кеше) һүҙендә лә осрай. Билдәле булыуынса, өкө – ул яҙмыш ҡошо.

Шул уҡ тамыр күк есемдәре менән ҡулланылған *байыу* (ҡояш байыу, сулпан байыны, ай байыны) һүҙҙәрендә лә йөрөй. Ышаныуҙар буйынса, башҡорттарҙа ҡояш батты тип әйтергә ярамай, мотлаҡ ҡояш байыны тиергә кәрәк. Ҡояш батты, ҡояш сыҡты тип әйтһәң, ҡояш ҡарғай, имеш, тигән ышаныуҙар әле лә йәшәй. Шулай итеп *байыу* һүҙе лә ниндәйҙер тылсым, магия менән бәйле булырға тейеш. Өҫтәп шуларҙы әйтергә була. Беренсенән, боронғо төрки ҡомартҡыларҙа тәңре мәғәнәһендә *Bajat* тигән һүҙ осрай. Икенсенән, яҡут мифологияһында *Бай Баянай* исемле урман, ҡош-ҡорт һәм һунарсылар тәңреһе булыуы билдәле. Ошоларҙан сығып *бай* һүҙенең башҡорттарҙа ла ҡасандыр берәй тәңре атамаһы булыуын фараз итеп була. Ысынлап та, *бай* һүҙенең өлөш, яҙмыш ҡына түгел, хатта мул, етеш, ир, хужа мәғәнәләре лә быны дәлилләй кеүек.

Килеп сығышы менән *бай* төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш.

***БАЙРАМСЫЛАУ.*** Диалекттарҙа *эйсәләү, эйселәү* һүҙҙәре ҡулланыла. Ураҙа, Ҡорбан ғәйетендә балаларҙың байрам менән ҡотлап, ураҙа һәм ҡорбандың ҡабул булыуын теләп өйҙән өйгә йөрөүҙәре байрамсылау тип атала.

Ышаныуҙар буйынса, мотлаҡ байрамсылауҙа ҡатнашҡан балаларҙы ҡабул итергә, байрамға әҙерләнгән кәнфит, печенье һ.б. тәм-томдан уларға бирергә кәрәк, тиҙәр. Шуға ла эле лә һәр өй байрамсылауға әҙерләнә: магазиндан тәм-том ала, бешеренә. Байрамсылауға балалар ҙа әҙерләнә. Улар ғөсөлләнә, яңы кейемдәр кейә. Өйҙән-өйгә йөрөгәндә «Ураҙағыҙ (ураҙа ғәйетендә) ҡабул булһын!», ә Ҡорбан ғәйетендә – «Ҡорбанығыҙ ҡабул булһын!» – тиҙәр. Хужабикәләр «Амин!» – тип баласағаға тәм-том бирә. Ауылды урап сыҡҡас, йыйылған тәм-том менән ғәйет сәйе эсеү йолаһы бар.

Килеп сығышы менән *байрамсылау* фарсы сығанаҡлы *байрам* һүҙе менән бәйле.

***БАЛЫҠ.*** Башҡорттарҙа балыҡ, балыҡ тотоу менән бәйле бик күп ышаныуҙар бар. Мәҫәлән, Инйәр буйы балыҡсылары тәүге балыҡты ҡулдан ысҡындырғас, башына өс тапҡыр сиртә һәм «үҙең кеүек бишге тап», – тип кәрзингә һала. Ҡариҙел районында ла тәүге ҡармаҡты:

Тфү, тфү, балыҡ ҡап
Яр башында ялтырап ят! – тип ырғыталар.
*(Н.Ғәлиева. Иҫке Бағаҙы ауылы).*

Башҡорт халыҡ ижадында балыҡ тотоу менән бәйле алғыштар ҙа бирелгән. Мәҫәлән,

Ҡотло булһын мурҙаң,
Балыҡ төшһөн ҙурҙан!
Йылтыраһын йылымың,
Ҡалтыраһын йылымың.
(БХИ. Йола фольклоры. I т.)

Балыҡ магик медицинала ла ҡулланыла. Мәҫәлән, һары менән ауырыған кеше еҙ таҫҡа ҡорбан балыҡ һалып, шуға ҡарап ултырырға тейеш. Бөтмәһә ошо процедураны ете тапҡыр ҡабатлайҙар икән.

Балыҡтың магик көскә эйә булыуына әкиәт тә ишара яһай. Мәҫәлән, балыҡтың ҡанын ялаған ике бүртә арғымаҡ ҡырас яллы, текә ҡолаҡлы, ҡалҡыу тояҡлы, киң күкрәкле, бейек мундалы, көлтә ҡой-

роҡло аҡбуҙ толпарға; балыҡ ҡанын һәм һөлдә һөйәген ашаған ике эт ҙур бурҙайҙарға әйләнгән.

Балыҡ һүҙе менән башҡорт телендә ҡорбан балыҡ тигән атаманың булыуы ла балыҡтың ҡасандыр ҡорбан итеп килтерелеүенә ишара яһай. Ә инде башҡорттар составында балыҡсы тигән ҡәбилә, сабаҡ, йәйен, суртан, алабуға исемле аралар барлығы балыҡтың тотем, табыныу обьекты булыуы тураһында һөйләй. Быны Ибн-Фаҙлан яҙмаларындағы «башҡорттарҙың бер өлөшө балыҡҡа табына» кеүек юлдар ҙа иҫбатлай.

Балыҡ һүҙе менән башҡорт телендә *балыҡ кеүек, бер балыҡ башын сәйнәү, балыҡ башынан серей, ҡорбан балыҡ, балыҡ һурпаһы эсеү* һ.б. һүҙбәйләнештәр, әйтемдәр бар.

Килеп сығышы менән *балыҡ* төрки сығанаҡлы һүҙ.

***БАПАҠ.*** Башҡорт мифологияһында балаларҙы ҡурҡыта торған мифик зат. Башҡортостандың башҡа төбәктәрендә шундай уҡ затты *ҡапаҡ, ҡып-ҡып, боҡай, хаж, сейгүҙ, мәтүға, сипсекүтән, бишмыйыҡ* тип тә атайҙар.

Ышаныуҙар буйынса, *бапаҡ* бик ҙур ауыҙлы, йәмһеҙ, ҡурҡыныс бер йән эйәһе. Бәлки, шуғалыр ҙа көнъяҡ башҡорттары бөтә йәмһеҙ, ҡурҡыныс бөжәктәрҙе лә бапаҡ тиҙәр. Бапаҡ һүҙе менән башҡорт телендә *бапаҡтау* (ҡурҡытыу) *бапаҡ кеүек, бапаҡ ашай, бапаҡ килә, бапаҡ-сапаҡ* кеүек һүҙбәйләнештәр бар. Төрки телдәренең һүҙлектәрендә *бапаҡ* һүҙе мифик зат атамаһы булараҡ осрамай. Тик ҡырғыҙ телендә генә бысраҡ мәғәнәһендә *бапак-сапак* тигән һүҙ ҡулланыла. Шуның өсөн *бапаҡ* башҡорт йә булмаһа ҡыпсаҡ сығанаҡлы һүҙ булыуы ихтимал.

Фонетик яҡтан *бапаҡ* һүҙе боронғо ирандарҙың Аҡа-Мапаҡ тигән демонының исемен хәтерләтә.

Б ~ М сиратлашыуы башҡорт теле өсөн тәбиғи. Сағыштырығыҙ: бына-мына, боҙ-моҙ, бән-мин һ.б. Ошоларҙы иҫәпкә алһаҡ, *бапаҡ* һүҙен Авесталағы Аҡа-Мапаҡ исеме менән яҡынлаштырып була.

***БАҪЛЫҒЫУ.*** Диалекттарҙа *баҫтығыу, бастығыу, быҫтығыу, һаташыу, саташыу* һүҙҙәре лә йөрөй. Ышаныуҙар буйынса, төндә кешене албаҫты баҫһа, уның тыны ҡыҫыла, яман төштәр күрә, уяна алмай баҫлыға. Албаҫтынан тыш ауырыу эйәләре лә кешене баҫлыҡтыра, икән. Шуға ла кеше ауырығанда йыш һаташа, баҫлыға, тиҙәр.

Кеше баҫлыҡҡанда, уны яйлап ҡына уятырға, баш осона Ҡөрьән йәки бетеү һалырға кәрәк. Әгәр ҙә баҫлығыу дауам итһә, йоҡлаған урынды алыштырырға кәрәк, тиҙәр. Был да ярҙам итмәһә, өйгә Ҡөрьән

уҡытырға ҡушалар. Бынан тыш баҫлыҡҡан кешене өшкөрөү, ауырыуҙарын, албаҫтыны ҡыуыу ҙа ҡулланыла.

Баҫлығыу һүҙе нигеҙендә төрки сығанаҡлы баҫ (баҫыу) тамыры ята. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа *бастыҡмаҡ* тигән һүҙ ауырыу, ауырыу йоғоу мәғәнәһендә ҡулланыла.

***БЕҘМОРОН.*** Ышаныуҙар буйынса, беҙморон ҙур кәүҙәле, үксәһе алға ҡарап торған мифик зат. «Беҙморондар кеше кеүек ике енестән була. Улар кеше кеүек һөйләшә лә, йөрөгәндә ҡарҙа эҙҙәре лә ҡала, тиҙәр. Ғәҙәттә улар тауҙа, мәмерйәләрҙә йәшәй. Әммә ҡайһы бер заман ауылдарға ла киләләр икән.

Ауылда улар буш өйҙәргә эйәләшә. Әгәр был өйгә кемдер килеп йәшәй башлаһа, беҙморондар асыулана, кешене ҡыуып сығарырға тырыша: өй тынысһыҙ була, бала-саға, мал-тыуар үлә. Кеше өйҙө ташлап китергә, йәки нигеҙ алыштырырға мәжбүр була.

Беҙморондар бик күп ашай, тиҙәр. Шуға беҙморон килгән кәртәлә мал ябыҡ була, йыш үлә».

*(Ә.Аллаяров. Мәләүез р-ны, Һыртлан ауылы).*

Беҙморон һүҙе төрки сығанаҡлы *беҙ* һәм *морон* һүҙҙәренән тора.

***БЕТЕҮ.*** Ышаныуҙар буйынса, һаҡлау көсөнә эйә булған өс мөйөшлө предмет. Ул һаҡлау доғаһынан тора. Шул доғаны күк йәки ҡара сепрәк менән өскөллэп, көплэп эшләйҙәр һәм муйынға йәки кейемгә тағып йөрөйҙәр. Ышаныуҙар буйынса, бетеү ауырыуҙарҙан, яман заттарҙан, күҙҙән һаҡлай. Шуға уны ғәҙәттә балаларҙың ҡултыҡ аҫтына, баш кейеменә, яғаларына тағалар.

*Бетеү* һүҙе башҡорт диалекттарында *ҡорама* мәғәнәһендә лә йөрөй. Мәҫәлән, стенаға элә торған *ҡорама ҡорғанды* Дим буйҙарында бетеү, тиҙәр.

Башҡорт телендә *бетеүләү, бетеүсә, бетеү биҙәк, бетеү юрған* тигән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр бар.

Бала юрғанын бетеүләп, йәғни өскөллэп ҡороу элек башҡорттарҙа киң таралған булған. Бындай юрғанды бетеүле юрған, тип йөрөткәндәр. Ышаныуҙар буйынса, бетеүле юрған да һаҡлау көсөнә эйә булған. Ошондай уҡ көскә өсмөйөш ҡорамаларҙан тегелгән бала күлдәге лә эйә икән.

Өс мөйөшлө биҙәкте диалекттарҙа *бетеү биҙәк, бетеүсә* тип йөрөткәндәр. Хатта өс мөйөшләп ҡырҡып бешерелгән бауырһаҡты Инйәр

буйы башҡорттары *бетеусә,* тиҙәр. Шулай итеп, *бетеү* һүҙе башҡорт теленең диалекттарында яҙыу менән генә түгел, *өс мөйөшлө* әйбер менән дә бәйле. Бетеү һүҙе килеп сығышы менән боронғо төрки ҡомартҡыларҙа киң таралған *битиг* «яҙыу, китап» һүҙенә барып тоташа. Боронғо төрки осоро ғалимы М.Ҡашғари һүҙлегендә *битиг* һүҙе яман рухтарға ҡаршы ҡулланылған әпсенле амулет, тип бирелгән, йәғни башҡорттарҙың бетеүенә тура килә. Ошоларҙан сығып бетеүҙе боронғо төркиҙәр осоро менән бәйле икәнлеген фараз итеп була.

***БИҘГӘК.*** Ышаныуҙар буйынса, бер өшөтөп, бер ҡыҙҙырып ауырытҡан йоғошло ауырыуҙың эйәһе. Биҙгәкте икенсе төрлө тапма ла, тиҙәр. Уны ғәҙәттә ҡалтырап торған кеше ҡиәфәтендә күҙ алдына килтерәләр. Ул кешене тотһа, кеше ҡалтырап ауырый, икән. Биҙгәкте тик им-том менән генә йүнәлтеп була, тиҙәр. Шуға ла халыҡта бик күп имләү ысулдары һаҡланған. Мәҫәлән, ырымбур башҡорттары матур бала кеүек ҡурсаҡ яһай. Уға төрлө төҫтәге таҫмалар, сепрәктәр бәйләй. Шуны биҙгәк тотҡан кешенең ҡуйынына һалалар ҙа, аҙаҡ алып урамға сығарып ташлап китәләр. Башҡа төбәктәрҙә ҡурсаҡты ауырыуҙың баш осонан әйләндереп алалар. Ҡурсаҡ менән имләгәндә: «Бына һиңә йән, йән урынына йән, баш урынына баш. Инде бынан сығып кит. Ҡурсаҡҡа күс, ҡурсаҡты тот!» – тип әпсенләйҙәр.

*(Х.Туйышева. Ырымбур өлкәһе, Байғаҙаҡ ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, биҙгәк (тапма) ошо ҡурсаҡ менән китә, икән.

Урман башҡорттары биҙгәк тотҡан кешене айыу, бүре тиреләренә ураған. Ышаныуҙар буйынса, биҙгәк айыу-бүренән ҡурҡып ҡасып китә, икән.

Биҙгәк тотҡанда «мейескә яғам!» – тип ҡурҡытыу, «тәнгә ҡан, ҡанға йән, йәнгә – аң», – тип тай ҡанын эсереү, ҡолаҡ төбөндә мылтыҡ атыу, һалҡын һыу һибеү ҙә таралған.

Биҙгәк һүҙе боронғо төрки ҡомартҡыларҙа осраған веz (ҡалтырау) һүҙе менән бәйле.

***БИРТЕК.*** Диалекттарҙа *биртес, биләңке* һүҙҙәре лә ҡулланыла. Ышаныуҙар буйынса, *биртек бил ауырыуының эйәһе* – ул кешегә ауыр күтәргәндә, ҡоторған эт тешләгәндә эйәләй, икән. Был ауырыуҙан ҡотолоу өсөн 3, 7, 40 өйҙән *биртек ашы, биртек аҙығы* йыйып ашағандар. Биртек ашын 2–3 кеше йыйған. Йыйыусыларҙың береһе баш, береһе кинйә бала булыуҙы Урал аръяғы башҡорттары кәрәк тип һанаған. Т.Морат яҙмаларында йыйыусыларҙың береһе йетем, икенсеһе зәғиф булыр-

ға тейеш тигән юлдар бар. Биртек йыйыусылар ишекте ҡыҫып ҡына, арты менән һауытын һоноп, биртек һораған. Биртек һорағанда махсус һамаҡтар ҙа ҡулланылған. Миҫал өсөн түбәндә бер нисә биртек әпсене килтерелә.

Ҡайным улы ҡатыҡҡан,
Ҡатыҡ һорай мин килдем.
Бейем улы биртенгән,
Биртек һорай мин килдем.
Ауыл башы Мөхәррәм,
Ултырғансы биртенгән.
*(Бөрйән р-ны, фольк. экс. матер. 1960 йыл).*

Билем, билем биртенгән,
Биртек уты бирегеҙ!
Ҡайным улы ҡартайған,
Ҡаты-ҡото бирегеҙ!...
*(Ж.Кейекбаев. Туғандар һәм таныштар).*

Улым биле ҡатыҡҡан,
Ҡатыҡ һорап йөрөйөм.
Кил(е)нем биле биртеккән,
Биртек һорап йөрөйөм,
Һөт булһа ла ҡойоғоҙ,
Һыу булһа ла ҡойоғоҙ,
Ней булһа ла һалығыҙ.
*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Йыйылған ашты ауырыуға ашаталар; һөтө-ҡатығы менән биртенгән ерен ыуалар. Ышаныуҙар буйынса, биртек ашын ашағандан һуң ауырыу йүнәлә икән.

Башҡорт телендә *биртек һорау, биртек ашы, биртек аҙығы, биртек име, биртек йыйыу, биртек уты, биртек ите тигән һүҙбәйләнештәр; биртелгәнгә биртенмә, биртенгәндән белек китер* кеүек мәҡәл-әйтемдәр бар.

*Биртек* һүҙе боронғо төрки ҡомартҡыларҙа осраған *вечт* 'имгәнеү, яраланыу, боҙолоу' тамыры менән бәйле булырға тейеш.

***БИРӘН.*** Диалектарҙа *биран, билән, миран, бирән зәхмәте* варианттары ла бар. Ышаныуҙар буйынса, *бирән* тире аҫтына һары һыу

йыйылып шешендерә торған *ауырыу эйәһе.* Туймаҫ, күп ашаған кешене лә *бирән, бирән ҡорһаҡ,* тиҙәр. Ошонан сығып *бирән эйәһен* ашамһаҡ, туймаҫ, ҙур ҡорһаҡлы зат итеп күҙ алдына килтереп була.

Бирән эйәһен ғәҙәттә артыш эсереп ҡыуалар. Шуның өсөн бирән булһа, артыш селеген табып, уны ҡайнатып эсереү мотлаҡ. *Бирән зәхмәте* тере кешегә генә түгел үлегә лә ҡуна икән. Был осраҡта мәйеттең эсе күбеп ята, тиҙәр. Шуға бирән зәхмәте мәйеткә инмәһен өсөн уның өҫтөнә бысаҡ, ҡайсы, ҡөръән һалып ҡуялар.

*(Р.Мәмбәтова. Ырымбур р-ны, Байғаҙаҡ ауылы).*

Башҡорт телендә *бирән зәхмәте, биран ҡорһаҡ, бирән булыу, ғәйет бирән* кеүек һүҙбәйләнештәр; *бур байымаҫ, бирән туймаҫ* һымаҡ мәҡәл-әйтемдәр бар.

Бирән һүҙе диалекттарҙа осраған, шул уҡ мәғәнәлә йөрөгән *билән, биләңке* һүҙҙәре менән бер тамырҙан булырға тейеш.

***БИСУРА.*** Ышаныуҙар буйынса, кеше сүрәтендә йөрөгән мифик зат. Кешегә ул һары сәсле ҡыҙ, әбей, матур ҡатын-ҡыҙ, һирәк егет булып күренә икән. Сағыштырығыҙ:

«Мин йоҡлап киткәнмен. Иптәштәрем, ҡараңғыла абайламай, алға киткән. Уянып китһәм, минең үгеҙ юлдан ситкә сығып, ашап йөрөй. Шәп итеп ҡыуа башланым. Юл Шайтанлы һаҙ тигән ерҙән үтә. Шунда еткәс, үгеҙ шып туҡтаны. Аптырап алға ҡараһам, ике ҡыҙ ҡултыҡлашып китеп бара. Үреп төшөрөлгән һап-һары сәстәре ай яҡтыһында ялтлап китә. «Урыҫ ауылы артта ҡалды, беҙҙекенә лә байтаҡ әле, ете төн уртаһында нишләп йөрөйҙәр икән?» – тип уйланым да үтеп китәйем тип, үгеҙгә һуҡтым. Уныһы ҡуҙғалмай тик тора. Аптырағас: «Һайт, дорогу», – тип ҡысҡырып ебергәйнем, ҡыҙҙар юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Үгеҙ ауылға еткәнсе юртып ҡайтты».

Икенсе хәл 1964 йылда булды. Ауылыбыҙҙы урап бәләкәй йылға аға. Түбән остағы кисеүҙе үтеп, бер аҙ килгәс, ул бейек тау ҡырлап аға башлай. Тау ҡайынлыҡ менән ҡапланған. Йылғаның бер яғында ҡомлоҡ, икенсе яғында талдар үҫә. Бер һүҙ менән әйткәндә, аулаҡ урын, мал да йөрөмәй. Шунда мейескә кирбес һуғабыҙ, кипкәндәрен өйөп ҡуябыҙ. Август айы булғас, кисләтеп кенә эштән ҡайтабыҙ.

Бер көн шулай эңерҙә, күҙ бәйләнгән саҡта һибәләп ямғыр яуа башланы. Кирбесте ябайым тип япмаға тотоноуым булды, бәләкәй генә тал өйкөмөнән башына аҡ яулыҡ сөйөп бәйләгән ҡатын килеп сыҡты. Ҡара күлдәгенең итәк остары киҫеп-киҫеп ҡуйылған кеүек тигеҙһеҙ, аяҡтары ап-аҡ. Ул йылғаның һай еренән суп-суп атлап барҙы ла, тау буйын-

дағы тәрән соҡор яғына китеп юғалды. Был ваҡытта кем йөрөй икән, тип бер аҙ көттөм дә ҡайтып киттем. Атайыма һөйләгәйнем ул: «Бынан һуң эңерҙә һыу буйына төшкәндә йә мунсаға ингәндә тауышланып йөрөгөҙ, доға уҡығыҙ, йә булмаһа йыр йырлағыҙ», – тип өйрәтте.

*(Ш.Дәүләтбаева. «Башҡортостан» гәзите).*

Ышаныуҙар буйынса, бисура осрап ҡына ҡалмай, ул эйәләшә, оялай икән. Бигерәк тә яңғыҙ ирҙәргә, ҡатындарға бисура эйәләүсән. Миҫал өсөн Мөждәбә тигән кеше тураһында хөрәфәти хикәйә килтерергә була. «Нариман ағай менән Мөждәбә ағай бер йылы һарынаға барғандар. Сәй ҡайнатырға һыуға төшһә Мөждәбә ағай, бер һап-һары оҙон сәсте, өлкән имсәкте ҡыҙ ултыра, тей һыу буйында. «Һай был ҡыҙ, нимәштәп ултыра бында!» – тип көлгән дә ебәргән Мөждәбә ағай. Шунан теге ҡыҙ ел-дауыл булып, осоп килеп, ҡосаҡтаған да алған Мөждәбә ағайҙы. Ә үҙе: «Нариманға әйтмә!» – тей икән. Мөждәбә ағай оҙаҡ ауырыны. Кеше араһында ултырғанда ла бисураһы килеп семтеп, көн дә бер күлдәк кейеп апсығып йөрөгән. Үҙе шулай һөйҙәгән. Бисура килә лә «Мин һине яратам» – тип әйтә тей. Яратҡасың, ашарға әпкил, тим. «Минең ҡулымдан ашаһаң үлерһең» – тей, икән теге бисура. Һуғыш башланғас, Мөждәбә ағайҙы һуғышҡа алдылар. Әлеге бисураһы бергә киткән тегенең. Андала гел килеп йөрөгән икән. Аҙаҡ ништәптер килмәй баштаған. «Бер һуғышта илап тороп ҡалды», – тип һөйҙәгән Мөждәбә ағай үҙе.

*(Г.Арзамова. Батал ауылы).*

Башҡорт телендә *бисура эйәләгән, бисура оялаған, бисура ҡарсыҡ, бисура балаһы* кеүек һүҙбәйләнештәр; *ишек төбөндә бисура, бисура билен быуып ултыра тигән йомаҡ; бисура менән пәрей дуҫ* һымаҡ мәҡәл-әйтемдәр бар. Бисураның исемен әйтергә ярамай тиҙәр. Шуға уны *эйәрсән, теге* тип тә әйтәләр.

*Бисура* һүҙе төрки сығанаҡлы һүҙ. Шул уҡ ваҡытта бисура үҙләштерелгән һүҙ тигән ҡараш та бар.

***БИШМЫЙЫҠ.*** Ышаныуҙар буйынса, балаларҙы ҡурҡыта торған яман мифик зат. Бишмыйыҡты башҡорттар кис йөрөй торған оҙон һаҡаллы, оҙон биш мыйыҡлы, йыуан таяҡлы ҡарт итеп күҙ алдына килтерә. Бишмыйыҡ ғәҙәттә кис йөрөй, тәҙрәнән ҡарай, туҡылдата, йоҡламаған балаларҙы урлай, икән. Шуға ла йоҡламаған балаларҙы: «Ана, бишмыйыҡ, бишмыйыҡ йөрөй, бишмыйыҡ әпкитә», – тип ҡурҡыталар.

Килеп сығышы яғынан бишмыйыҡ *биш* һәм *мыйыҡ* һүҙҙәре менән бәйле.

***БОҠАЙ.*** Диалекттарҙа буҡай, бүкәй һүҙҙәре лә осрай. Ышаныуҙар буйынса, бәләкәй балаларҙы ҡурҡыта торған мифик зат. Боҡай ҡыҙыл күҙле, ялбыр сәсле, йыуан аяҡлы бер үгеҙ кеүек зат. Ул ҡараңғыла балаларҙы урлай икән. Шуға «боҡай килә, буҡай ашай, бүкәй алып китә, боҡай ала, ана боҡай», – кеүек һүҙҙәр менән кистәрен балаларҙы ҡурҡыталар.

*(Л. Урманова. Баймаҡ р-ны, Әбделкәрим ауылы).*

Боҡай һүҙе бәлки, боронғо ҡомартҡыларҙа осраған bоүа/buүа «үгеҙ» мәғәнәһендәге һүҙ менән бәйлелер.

***БОҘОМ.*** Ышаныуҙар буйынса, сыхырсы *боҙом* ебәрһә, кеше ауырый, ваҡытында кире ҡайтармаһаң, хатта үлә лә. Бер сәбәпһеҙ ауырып үлгән кешене «*боҙом* менән *боҙолған* ине» – тиҙәр.

Башҡорттар араһында боҙом менән булышыусылар бик әҙ осрай. Шөғөлләнгәндәре лә сыуаш, мари боҙомсоларынан ҡалыша, тиҙәр. Башҡорт *боҙомсолары* ғәҙәттә, мәйет һыуы, ҡәбер тупрағы, сәс, кешенең кейем- һалымын, энә һ.б. ҡуллана.

Ҡариҙел районында яҙып алынған материалда *боҙом* эшләнә торған кешенең ишек алдына һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ҡәбер тупрағы һибеү сағылыш тапҡан. Шул тупраҡ аша атлап үткән хужаның башы ауырта, тыны ҡыҫыла, йөрәге ауырта, ҡан баҫымы күтәрелә икән. Ваҡытында был боҙомдо ҡайтартмаһаң, кеше үлә, тиҙәр.

*(Н.Fәлиева. Бағаҙы ауылы).*

Күгәрсен районында боҙола торған кешенең ишегенә энә ҡаҙау, аяҡ эҙенән тупраҡ алып зыяратҡа алып барып ташлау ысулдары яҙып алынды.

*(Р.Латипова. Түбәнге Биккужа ауылы).*

Мәләүез районында яҙып алынған материалда боҙом ҡайтарып булмаған ауырыуҙарҙан һанала. Был боҙом шунан ғибәрәт. Һыу баҡаһын (тәлмәрйен) дүрткә бүләләр. Шуның бер өлөшөн ергә күмәләр, икенсеһен ҡәбергә ташлайҙар, өсөнсөһөн һыуға ташлайҙар, дүртенсеһен киптереп, онтап боҙола торған кешенең аяҡ аҫтына һалалар. Был боҙомдо бер нәмә менән дә бөтөрөп булмай, тиҙәр. Тупраҡ та, ҡәбер балсығы ла, һыу ҙа был осраҡта дауа бирмәй икән.

*(Т. Ҡолсобаева. Һәргәй ауылы).*

Башҡорттарҙа боҙом ҡайтарыу ысулдары ла киң таралған. Боҙом ҡайтарыу өсөн ғәҙәттә ут, һыу, мунса ташы, ҡояш нуры, тупраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, Учалы районында боҙом эләккән кеше, таң һарыһында сығып, ҡалҡып килгән ҡояшҡа теклəп ҡарап торорға тейеш. Ышаныуҙар буйынса, ҡояштың беренсе нуры кешенән боҙомдо үтеп ала икән.

*(Г.Ағзамова. Батал ауылы).*

Боҙом ҡайтарыу өсөн сихырлап йәшерелгән әйберҙе табыу мотлаҡ һанала. Шуның өсөн боҙом ҡайтарғанда тәүҙә сихырланған әйберҙе табалар, шунан уны утта яндыралар. Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Йылайыр, Хәйбулла райондарында сихырланған әйберҙәрҙең яҫтыҡта, түшәктә, кейем яғаһында булыуы тураһында һөйләйҙәр. Сихырланған әйберҙә ғәҙәттә энә, йөн, сәс, тырнаҡ, көл, ҡан, тупраҡ, тәлмәрйен ағзаһы була икән. Шул әйберҙәр йоморо ғына итеп йомарланған була, тиҙәр. Тапҡас, шуны урамға сығарып үртәргә кәрәк. Үртәгәндә тегеләр шарт-шорт итеп яна, баҡа кеүек нимәһелер тармаҡланып ырғып китә, тиҙәр.

*Боҙом* төрки сығанаҡлы *боҙоу* һүҙенән яһалған. Телдә *боҙом ебәреү, боҙом ҡайтарыу, боҙом доғаһы, боҙом ырымы* тигән һүҙбәйләнештәр бар.

***БОРАҠ.*** Ышаныуҙар буйынса, ожмах аты. Тау менгәндә, төшкәндә аяҡтары оҙонайып киткән, менеп йөрөүгә уңайлы булған мифик ат. Ышаныуҙар буйынса, аттың ҡанаттары ла бар, икән. Был мифик зат башҡорт мифологияһына ислам дине, Ҡөрьән менән килеп ингән. Ислам мифологияһында ал-Бурак Мөхәмәт пәйғәмбәрҙең Мәккәнән Иерусалимға килгән аты. Уны мосолмандар аҡ төҫтәге ҡанатлы, кеше сырайлы ат, ишәк итеп күҙ алдына килтерә.

Бораҡ атамаһын барлыҡҡа килтергән Мөхәмәт пәйғәмбәрҙең ал-Бурак атының исеме ғәрәп телендәге «яҡтырыу» мәғәнәһендәге *бураҡ* һүҙенә барып тоташа.

***БҮРЕ.*** Башҡорт мифологияһында киң таралған образ. Ышаныуҙар буйынса, бүре башҡорт халҡын булдырыусы, уға юл күрһәтеүсе, һаҡлаусы, яҡлаусы зат. Башҡорт легендаларында ла бүре менән кешенән тыуған баланан теге йәки был ырыу тарала. Икенсе бер легендала яу ваҡытында бөтә ырыу ҡырыла, тик бер бала ғына иҫән ҡала. Шул баланы инә бүре имеҙеп, үҙ балаһы кеүек итеп үҫтерә. Артабан шул баланан башҡорттар таралып китә. Өсөнсө легендала иһә баш-

ҡорттар күскән саҡта аҙаша, юл юғалта. Шул ваҡыт бер күк бүре килеп сыға һәм юл күрһәтеп алып китә. Оҙаҡ барғандан һуң улар бик матур бер ергә килеп сыға. Был башҡорттарҙың әле төпләнеп йәшәгән Уралы була. Шулай итеп бүре башҡорттарҙы барлыҡҡа килтерә, үҫтерә, уларға тыуған ил табырға ярҙам итә.

Бүре менән бәйле башҡа ышаныуҙар ҙа бар. Мәҫәлән, бүре тырнағы, теше, йөнө бала бишегенә эленә. Бала ҙурайғас улар уның кейеменә тегеп ҡуйыла. Ышаныуҙар буйынса, был осраҡта балаға яман заттар, ауырыу-сырхау килмәй. Шул уҡ әйберҙәрҙе һунарсылар ҙа йөрөтә. Ышаныуҙар буйынса, һунар уңышлы була, икән. Боронғо башҡорттар балалары үлеп торһа, яңы тыуған балаға бүре йәки эт имеҙгән, бүре элементлы Бүребай, Бүрехан, Күк бүре кеүек исемдәр ҡушҡан. Баланы тәүге мунсаға алып барғанда әйтелгән һамаҡта ла («айыуҙай ағай бул, бүреләй бабай бул!») бүрегә һаҡлау, ғүмерле итеү функцияһы һалынған. Ен-шайтандан һаҡланыу, ауырыу-сырхауҙан арыныу өсөн бүре ирененән эшләнгән үткәрмә ҡулланғандар. Ышаныуҙар буйынса, йәш баланы ҡойондорғас, мотлаҡ бүре үткәрмәһе аша үткәрергә кәрәк. Был осраҡта бала ауырымай, бәхетле, ырыҫлы була, тиҙәр. Бүре үткәрмәһе аша бала тапмаған, йә бала тыуҙыра алмай интеккән, йә һуңғылығы сыҡмаған ҡатынды ла үткәргәндәр.

Баланың тәне ҡутырлағанда бүре ыуы тип бүре бейәләй менән ыуғандар.

Бүре булып, бүре толоп кейеп туй һорарға ла килгәндәр. Һуңғыраҡ бүре толоптар бөткәс, уның урынына «бүре булып ҡурҡытам», – тип, туй һорағанда һарыҡ тиреһенән тегелгән толопто әйләндереп кейгәндәр. Был йоланың ҡалдыҡтары әле лә һаҡланған.

*(М. Ҡунафина. Рәхмәт ауылы).*

Элек-электән халыҡ медицинаһында үпкә ауырыуына бүре үтен ҡулланғандар. Бала ҡатып илаһа, ҡатындың балаһы төшһә бүре йөнө менән ыҫлағандар.

Ат, һыйыр, ҙур әйбер юғалғанда бүре тарамышын үртәгәндәр.

Ышаныуҙар буйынса, тарамыш үртәгәндә бур тартышып-тартышып үлә икән. Тарамыш үртәгәндә махсус доға ла әйтелгән. Түбәндә халыҡ ижадынан бер һамаҡ килтерелә.

Бүре, бүре, бүрекәй,
Бәлә килде башыма.
Үҙең килсе ҡашыма,
Күҙем тулған йәшемә.

Бүре, бүре, бүрекәй!
Атым урғы ҡулында.
Ҡороп ҡатһын юлында,
Шул ҡарғышым уйымда.
Бүре, бүре, бүрекәй!
Табып бирсе урғыны,
Харап итмә тоғроно –
Бар теләгем шул ине.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Әйтергә кәрәк, башҡорттарҙа ғәҙәттә эш тарамыш яндырыуға барып етмәгән. Тәүҙә ауыл буйлап тарамыш яндырыу тураһында һүҙ таратҡандар. Бик ауыр яза икәнлеген белеп, бур ғәҙәттә урланған әйберҙе килтереп биргән булған.

Кәртә-ҡураға яман заттар килмәһен, мал-тыуарға теймәһен тип, бүре ҡойроғон, йөнөн элеп ҡуйыу, ә бүре башын ҡапҡа алдына күмеп ҡуйыу ҙа осрай башҡорттарҙа. Көтөүҙә бүре малдарға теймәһен тип, тәүге көн көтөүсегә йоморта биреү йолаһы ла бар.

Башҡорттарҙа бүре менән бәйле тыйыуҙар ҙа осрай. Мәҫәлән, «бүре» һүҙен әйтһәң, бүре килә, малға тейә тип, ҡурҡҡандар. Шуға ла «бүре» һүҙен әйтергә ярамаған. Уның урынына эт-ҡош, ҡарышҡыр, ҡашҡар һүҙҙәрен ҡулланғандар.

Бүре һүҙе менән башҡорт телендә *бүре ауыҙ, бүре ауыҙынан үткәреү, бүре бауыр, бүре йыҡҡыр, бүре алғыр, бүре ашағыр, бүре башы ашарҙай, бүре баш, бүре ыуы, бүре тырнағы, бүре олоу, бүре емеше, бүре табан, күк бүре; бүренең ауыҙы ашаһа ла, ашамаһа ла ҡан; яллы бүре; айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар* кеүек һүҙбәйләнештәр, мәҡәл һәм әйтемдәр бар. Бүре килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ. Ул М.Ҡашғари һүҙлегендә Böri формаһында сағылыш тапҡан.

***БҮҪЕР.*** Диалекттарҙа бүһер, бүсер, биһер варианттары ҡулланыла.

Ышаныуҙар буйынса, бүҫер йәнләнмәҫ борон, йәғни өс айға тиклем, ҡорт башы кеүек кенә була икән. Уны шуға *сабый бүҫер,* тиҙәр. Сабый бүҫерҙе хәҙрәттән өшкөртөп алған таш менән түрткөләп бөтөрөп була икән. Шул доғалы таш менән бүҫер доғаһын уҡып түрткөләһәң, бүҫер башҡа йәнләнмәй, тиҙәр. Өс айҙан һуң бүҫер йәнләнә. Был осраҡта ул баланың эсендә йөрөй башлай. Ул кендек, сандыр, күкрәк пәрҙәһе, баш һәм арҡа мейеләренә лә барып етә. Ҡайһы ерҙә йөрөй, шул ер ауырта икән.

Йәнләнгән бүҫерҙе башҡорттар баҡа кеүек тарбаҡ-тарбаҡ бер йән эйәһе итеп күҙ алдына килтерә. Бүҫер төҫө буйынса өс төрлө була: һары, ҡара һәм аҡ бүҫер. Сағыштырығыҙ:

Ҡара бүһер,
Аҡ бүһер,
Унда ятма
Бында ят,
Кил, сыҡ!
*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Һары бүҫер, ҡара бүҫер,
Ҡара башлы һары бүҫер.
Һары бүҫер, сос бүҫер,
Эстән тышҡа күс бүҫер, күс бүҫер!
*(М.Яҡупова. Стәрлебаш р-ны, Ибраҡай ауылы).*

Йөрөгән, ауырттырған ере буйынса бүҫерҙе *кендек бүҫеренә, сандыр бүҫеренә, күкрәк пәрҙәһе бүҫеренә, арҡа мейеһе бүҫеренә, баш мейеһе бүҫеренә* бүләләр.

Им-том иткәндә иң тәүҙә бүҫерҙе йөрөтөүҙән туҡтаталар. Бының өсөн туң майға тәмәке ҡушып иҙәләр ҙә сепрәккә һалып, кендекте бәйләп ҡуялар. Шулай уҡ туң майҙы ҡоротҡа иҙеп эсеү ҙә ҡулланыла. Ышаныуҙар буйынса, туң май бүҫерҙе ҡаплай һәм ул эстә йөрөй алмай икән.

Бүҫерҙе йөрөтөүҙән туҡтатҡас, уны имләп, махсус доғалар әйтеп эстән сығарырға тырышалар. Бүҫерҙе балаға өс ай булмаҫ борон имләргә кәрәк. Сөнки бүҫер аҙаҡ аҙа, үрҙә әйткәнсә, йәнләнә, тиҙәр. Бүҫерҙе ғәҙәттә «сабып», «талап», хәҙрәттән өшкөртөп алынған таш, яҙыу, бала атаһының ойоҡбашы, минлек осо менән төрткөләп имләйҙәр. Хәйбулла яҡтарында бүҫергә ҡор ташы ҡырып ашатыу ҙа киң таралған. Башҡорт телендә йөрөгән һүҙбәйләнештәрҙә бүҫерҙе ҡыуып (бүҫер ҡыуыу), тотоп (бүҫер тотоу), өшкөрөп (бүҫер өшкөрөү), ырымлап (бүҫер ырымлау), имләп (бүҫер имләү) бөтөрөүгә ишара бар. Башҡорттарҙа бик күп бүҫер бөтөрөү ысулдары бар. Түбәндә шуларҙың бер нисәһе килтерелә.

«Бүһергә доға яҙып та эсәләр. Химический ҡәләм беләп дәфтәргә доғаһын яҙалар боронғоса. Ана Шәрифйән ҡарттан мин Фәниәгә яҙҙырып эсерттем бүһерҙе булғанға. Шул яҙыуҙы шәшке аҫтына ғына һалаң да, һыу ғойоп иҙеп кенә эсерәң балаға. Шунан бермә бер бөтә шу бүһер».
*(М.Мансурова. Әбйәлил р-ны, Рәхмәт ауылы).*

«Ауылдарҙан килеп бүһер имләтә торғайнылар олатайыма. Аның бүһер ташы була торғайны. Ул аны тау битләүендә булған мәмерйә өңөнән ала ине. Анда беҙ ҙә, бала-сағалар, бара торғайныҡ. Беҙ өңөлгән ерен барып бармаҡ менән тырнаҡлаштырып, һыйпап ҡарай торғайныҡ. Ул ҡомлауыраҡ әскелт бер таш ине. Шу ташты олатайым ҡырып алып, әллә ниндәй доғаларын уҡып ашата ине бүһерле кешеләргә. Бүһер бөтә торғайны. Нимә булғандыр инде, таштан бөткәнме, доғананмы. Анығын белмәйем».

*(З.Аҡбалина. Хәйбулла р-ны, Аҡъяр ауылы).*

«Әүәле бала бүһерҙе буһа Зәһира инәйем «талай» торғайны. Баланы йүргәккә генә төрөп уға тоттора инек. Зәһира инәйем шу йүргәк аша ауыҙы менән баланың эсенә тейеп-тейеп ала торғайны. «Талаған» саҡта ул эт кеүек ырылдап та ала ине. Әллә ниндәй доғалар ҙа уҡый торғайны. Иҫтә юҡ инде».

*(Ғ.Хисамитдинова. Белорет р-ны, Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Бүҫер һүҙе менән башҡорт телендә *бүҫер ҡалҡыу, бүҫер талау, бүҫер имләү, бүҫер доғалығы* һ.б. һүҙбәйләнештәр бар.

Бүҫер һүҙе төрки сығанаҡлы һүҙ. Уның барлыҡҡа килеүе *бүҫер, бүҫелеү* ҡылымдары менән бәйле.

***БЫЖЫ.*** Ышаныуҙар буйынса, бала ныҡ ҡурҡһа, уға быжы була, йәғни ул аяҡтан ҡала, атлай алмай башлай. Быжы булған баланы ғәҙәттә магик ысулдар менән дауалайҙар. Стәрлебаш районында яҙып алынған материал буйынса, быжы булған баланы икмәк көрәгенә бәйләп мейескә өс мәртәбә тығып алырға кәрәк. Мейескә тыҡҡанда өс тапҡыр: «Ни булған? – Быжы булған!» – тигән һүҙҙәр ҙә әйтелә, икән.

*(Ф.Булатова. Стәрлебаш р-ны, Ибраҡай ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, Быжы эйәһе мейестән, өтөүҙән ҡурҡып, баланан сығып ҡаса икән. Быжы сығып ҡасҡас та, бала атлай башлай, тиҙәр.

Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә атламаған баланың түбәһендә йылы икмәк һындырыу ысулы ла осрай. Был имләү ысулы буйынса һындырылған йылы икмәктең бер өлөшөн кендек әбейенә, икенсеһен эткә биреү, мотлаҡ. Икмәк һындырғанда түбәндәге һүҙҙәрҙе лә әйтәләр:

– Йүгереп, йүгереп етә алһын
Йүгеректәрҙе үтә алһын,

Атлыларҙы ла уҙһын,
Ғүмере оҙон булһын,
Һайыҫҡандан һаҡ булһын.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Башҡорт ышаныуҙарында ғәҙәттә һайыҫҡан ауырыу эйәһе итеп һүрәтләнә. Ошонан сығып өҫтә килтерелгән һүҙҙәрҙә шәп, йүгерек, ғүмерле булыуҙы теләү менән бер рәттән ауырыу эйәһенән һаҡ булыу теләге лә һалынған тип, әйтергә була.

Быжы һүҙе *быжыу* «йомшарыу» ҡылымы менән бәйле булырға тейеш.

***БЫСАҠ.*** Башҡорт мифологияһында сихри көскә эйә булған предмет. Уның менән бәйле бик күп ышаныуҙар, йолалар, ырымдар, юрауҙар халыҡта әле лә йәшәй. Мәҫәлән, йәш баланы яңғыҙын ҡалдырғанда, эргәһенә бысаҡ һалалар. Кеше үлгәс, убырға әйләнмәһен тип, уның өҫтөнә лә бысаҡ һалыу йолаһы бар. Ҡойон яҡынлашһа «Бысаҡ, бысаҡ!» – тип ҡысҡырырға йәки ҡойонға бысаҡ ташларға кәрәк, тиҙәр. Ололар шулай уҡ бысаҡ менән уйнарға, сәнсеп ашарға, һелтәргә ҡушмайҙар. Башҡорт телендә бысаҡҡа *бысаҡ килеү, бысаҡ ҡаҙалғыр, бысаҡ телле, быуынһыҙ ергә бысаҡ һалыу, йөрәккә бысаҡ булып ҡаҙалыу, асыу – бысаҡ, аҡыл дуҫ; үтмәҫ бысаҡ ҡул киҫер; үткер һүҙ йәнгә хас, үткер бысаҡ ҡанға* хас кеүек һүҙбәйләнештәр, мәҡәл-әйтемдәр ҡулланыла. *Бысаҡ йөҙө, бысаҡ бите, бысаҡ һырты* кеүек һүҙбәйләнештәрҙә башҡорттарҙың донъяға ҡарашы сағылыш тапҡан. Был ҡараш буйынса, бысаҡтың да кешенеке кеүек йөҙө, бите, һырты бар. Шулай итеп тел материалы ла бысаҡтың ябай ғына предмет түгеллегенә ишара яһай.

Бысаҡ һүҙе килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ.

***БЫУМА.*** Башҡорт ышаныуҙарында быума эпилепсия ауырыуының эйәһе. Ул ғәҙәттә кешене тота, тиҙәр. Халыҡ араһында быума тотоу урынына *үҙенеке тотҡан, үҙенеке тота* тигән һүҙбәйләнештәр киң таралған. Бының нигеҙендә ауырыуҙың исемен әйтергә ярамай тигән ышаныу ята. Быума тотҡанда, кеше тыны быуылып, ҡапыл ҡолап китә. Уның ауыҙ-моронондан күбек килә. Ул тартыша, тыпырсына башлай. Бер аҙ ваҡыт үткәс, быума ебәрә икән.

Ышаныуҙар буйынса, быуманы им-том менән генә бөтөрөп була. Башҡорттарҙың төрлө этнографик төркөмдәренән йыйылған матери-

алдар күрһәтеүенсә, халыкта әле лә бер нисә имләү ысулы һаҡлана. Мәҫәлән, Стәрлебаш районында яҙып алынған материалда быуманы ҡыҫып, ғәрләндереп ҡыуып сығарыу һүрәтләнә.

«Быуманы мин күрҙем. Беҙҙең ауылда бер бала ауырый ине. Бер көн мин уларға ниңәлер керҙем. Күршеләр сәй эсеп ултыра. Бала уйнап йөрөй. Бер ваҡыт бала шарлап йығылып китте. Ҡараһам баланың әсәһе тегенең трусиктарын, күлмәктәрен һыпырып алды ла, баланың битенә япты. Шунан теге әйберләрҙе ишеккә ҡыҫып-ҡыҫып, һыйыр тиҙәге аҫтына тығып ҡуйҙы. Ниңә күмгәнен белмәйем. Мин ул ҡатындың өс тапҡыр ҡыҫҡылап алыуын, ҡыҫҡанда эстән нимәлер уҡығанын, һөйләнгәнен генә күрҙем».

*(М.Яҡупова. Ибраҡай ауылы).*

Белорет районында быума менән ауырыған баланың әйберҙәрен ағын һыуға ташлау, унан һуң мылтыҡ атыу тураһында һөйләйҙәр.

*(Ғ. Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Илеш районында яҙылған материалдарҙа «быуманы» һыйыр тиҙәгенә ҡыуыу, ҡыуғанда әйтелгән һүҙҙәр сағылыш тапҡан. Сағыштырығыҙ:

Ҡара болот киләҙер,
Ҡара болот киләҙер,
Ҡара болот астынан,
Ҡара сыйыр киләҙер.
Мөгөҙө күккә тейгән,
Желене ергә тейгән!
Бер имсәктән ҡан килә,
Бер имсәктән май килә,
Шуны аша, шуны тот!
Име-томы шул былсын.

*(М.Ғабдуллина. Дөмәй ауылы).*

Башҡорт телендә *быума тотоу, быума булыу, быума йүтәл* кеүек һүҙбәйләнештәр бар. Килеп сығышы яғынан *быума быуыу, быуылыу* ҡылымдары менән бәйле булырға тейеш.

***БОРСАҠ, БОҘ.*** Башҡорт мифологияһында сихри һәм серле күренеш. Шуның өсөн боҙ яуһа, ишек алдына бисмилаһи-р рахмани-р рәхим

әйтеп тимер әйбер сығарып ташлайҙар. Сағыштырығыҙ: «Боҙ яуҫа, ишек алдына тимер ҫоҫҡомо, тимер киҫәүме, ана шундай тотона торған әйбер ырғытаҫың. Шу ишеткәнеңде эшләгән булаҫың инде».

*(М.Сәлимйәнова. Шишмә р-ны, Биккол ауылы).*

Учалы районында: «Боҙ яуһа, тәүге бала сығып боҙ ашаһа, урамға ҡыҫҡыс, шабала сығарып ташлаһаң, боҙ туҡтай»,– тиҙәр.

*(М.Абдуллина. Юлдаш ауылы).*

Күбәләк башҡорттарында борсаҡ яуһа, ҡыҙ балаға өс бөртөк борсаҡ ҡаптырһаң йәки кәртә аша һепертке ташлаһаң, борсаҡ тиҙ туҡтай, тиҙәр.

*(М.Мансурова. Әбйәлил р-ны, Рәхмәт ауылы).*

Боҙ яуғанда урамға тол ҡатын сығып өс бөртөк боҙ ҡабып инһә лә, ул туҡтай икән.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Боҙ бөртөгөнөң ҙур магик көскә эйә булыуына башҡорт легендаларында ла миҫалдар бар. Мәҫәлән, бер генә бөртөк боҙ ашаған ҡатын легендала баһадир тыуҙыра.

*(БХИ. Йола фольклоры. II т.).*

Боҙ, борсаҡ һүҙҙәре менән телдә *борсаҡ яуыу, борсаҡ һуғыу, боҙ яуыу, боҙ алыу* кеүек һүҙбәйләнештәр бар.

Боҙ, борсаҡ һүҙҙәре *боҙ, ҡар, борсаҡ* мәғәнәһендә йөрөгән, тик фонетик яҡтан ғына з~р сиратлашыуы менән генә айырылған төрки сығанаҡлы боз~бор тамырына барып тоташа.

***БӨРКӘНСЕК.*** ҡара: ***йөҙлөк.***

***БӘЛӘ.*** Ышаныуҙар буйынса, эткә, ҡоҙғонға, сиңерткәгә, күгәүенгә һ.б. төрлө ҡиәфәткә инә алған яман зат. Бәләнең ҡамыты була икән. Шул ҡамыт кеше муйынына тағылһа, кеше бәләгә тарый, тиҙәр. Әкиәттә бәлә кешегә эт ҡиәфәтендә осрай. Оҡшаған кешеһе менән осраша ала.

Бәлә, ышаныуҙар буйынса, балыҡ тиһәң балыҡ түгел, йылан тиһәң йылан түгел, күҙе еҙ тас дәүмәлле, аяҡлы бер мифик зат.

Бәлә һүҙе менән телдә бик күп фразеологик берәмектәр, мәҡәл һәм әйтемдәр осрай: *аяҡлы бәлә, бәлә ҡамыты, бәләнән баш аяҡ, мең бәлә менән, бәлә аяҡ аҫтында, эт бәләһе.*

Килеп сығышы яғынан *бәлә* ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

***БӘРЕЙ.*** Диалекттарҙа бире, бәре, пәре, пәрей, мосолман пәрейе, мосолман бәреләре кеүек атамалар менән дә йөрөй. Башҡорт мифологияһында бәрейҙәр ғаилә ҡороп, ырыу менән йәшәйҙәр. Уларҙың кешенеке кеүек туйҙары (бәрей туйы), балалары (бәре балаһы) була. Балалары йәмһеҙ булғанға уны кеше балаһына алмаштырыу осраҡтары ла бар. Аҡылға зәғиф, ауырыу баланы башҡорттар бәре, ен алмаштырған бала тиҙәр. Бәрейҙәр башҡорттарҙың үҙҙәре кеүек йәйләүгә лә күсә икән. Улар күскән саҡта һыйырҙары мөңрәй, кәзәләре баҡыра, бала-сағаһы илаша икән. Үҙҙәре лә, малы ла, йорт-тирмәләре лә бәрейҙәрҙең күҙгә күренмәй, эҙҙәре лә ҡалмай, тиҙәр.

Бәрейҙәр ғәҙәттә кешегә күренмәҫкә, осрамаҫҡа тырыша. Осраганда улар ир, ҡатын-ҡыҙ, бик һирәк кәзә йәки башҡа хайуан ҡиәфәтенә инә. Бәрей осраған кеше ғәҙәттә ауырый, хатта үлеүе лә ихтимал икән. Мәҫәлән, Салауат районынан И.Зарипов яҙыуынса, ауырып ятҡан ауылдашы Нәғимулла ағай түбәндәгеләрҙе һөйләгән: «Жиге-ер йылғаһын сығып, ярҙан күтәрелгәйнем, ҡараһам, унбиш-егерме метр самаһы алда ике ҡатын-ҡыҙ китеп бара. Икеһе лә йәш кенә, матур итеп кейенгәндәр, ҡиәфәттәренә ҡарағанда, мәрйәләр. Уларҙы уҙып 200–300 метр киттемме-юҡмы бер көйө юртып килгән атым йығылды ла ҡуйҙы. Сананан төшөп уны күтәрергә тырышып ҡарағайным, морононан ҡан килә башланы.

Әлеге ҡыҙҙар минең менән тиңләшкәс, тегеләргә руссалап: «Атты күтәрергә ярҙам итегеҙ әле», – тинем. Улар: «Беҙ ҡандан ҡурҡабыҙ, атыңа яҡын бармайбыҙ», – тип уҙып китте. Ә үҙҙәре, ниндәй ирмәк күргәндәрҙер инде, шарҡылдап көлә.

Аптырағас атты туғарғайным, ул бер ни булмағандай ырғып килеп торҙо, морононан килгән ҡан да туҡтаны. Тиҙ генә егеп ултырып киттем.

Мәрйәләр уҙып китеүгә күп ваҡыт үтмәһә лә, алда бер кем дә күренмәне. Икенсе яҡҡа киткәндәрҙең тиер инең, сана юлынан башҡа юл, эҙ ҙә юҡ. Шул мөғжизәгә иҫем китте, йәштәш. Әлегә тиклем юҡ-бар хөрәфәткә һис ышанмай торғайным, хәҙер ышандым инде», – тине ағай көрһөнөп.

Нәғимулла ағайҙы табиптар ҙа ҡараны, оло ағайҙар кәңәше буйынса белемсе мәрйәләрҙе лә саҡырҙылар, ләкин файҙаһы теймәне, дүрт көн тигәндә ул яҡты донъя менән хушлашты».

Ышаныуҙар буйынса, ҡайһы бер кешеләр бәрейҙәр менән яҡынлаша, енси мөнәсәбәткә инә, ғаилә ҡора. Ошондай ышаныуҙар менән бире заты, биреләр араһы кеүек зат-ырыу атамаларының килеп сығышы аңлатыла.

«Түрмән үҙе алып ҡайтҡан Бире ҡыҙы менән оҙаҡ ҡына ғүмер итә. Шул ҡатындан 9 ул тыуа. Тимер ауылында йәшәгән кешеләр ана шул Бире нәсәбенән йәйелгәндәр. Шуға Тимерҙә йәшәүселәрҙе бирелəр тип йөрөтәләр».

*(БХИ. Риүәйәттәр, легендалар. II т.)*

Башҡорттарҙа ҡайһы бер бәрейҙәр исемдәре лә һаҡланған. Мәҫәлән, Кетмер, Мәксәлминә, Бәрнүш, Дөбөрнүш, Кәпшә-тайтүш, Йәмлиха тигән бәрей исемдәре Асҡын, Илеш райондарында яҙып алынған. Бәрей һүҙе үҙе лә, бәрейҙәр исемдәре лә килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙҙәр түгел. Әгәр бәрей/пәрей һүҙе фонетик яҡтан Авесталағы Пайрика демоны исеменән яҡын булһа, Кетмер, Йәмлиха һ.б. бәрей исемдәре ғәрәп сығанаҡлы һүҙҙәргә барып тоташа.

***ГӘРӘБӘ.*** Башҡорт мифологияһында сихри көскә эйә булған бер матдә. Ул аҫыл таштар рәтендә биҙәнеү, һаҡланыу әйбере булараҡ ҡулланыла. Ышаныуҙар буйынса, гәрәбә магик көскә эйә. Мәҫәлән, һары ауырыуы менән интеккән кешегә гәрәбә имергә, уны ҡырып ашарға, муйынға тағырға ҡушалар. Ышаныуҙар буйынса, гәрәбә һары ауырыуын ҡурҡытып ҡыуа икән.

*(М.Абдуллина, Ф.Хисамитдинова, М.Яҡупова).*

Һары ауырыуынан тыш гәрәбә йөрәккә һары һағыш ултырғанда ҡулланыла.

*(Ф.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Гәрәбә профилактик сара булараҡ та ҡулланыла. Күҙ теймәһен, һары булмаһын тип элек-электән ысын гәрәбә муйынсаҡ таҡҡандар.

Ғәрәбә килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

***ВАБА. ВАБА АУЫРЫУЫ ЭЙӘҺЕ.*** Башҡорт мифологияһында ваба ауырыуы эйәһе кеше ҡиәфәтендә йөрөгән мифик зат. Ул өйҙән-өйгә йөрөй икән. Ҡулында таяғы була, тиҙәр. Бармағы ҡулында берәү генә була. Ҡайһы саҡта ул мулла образына инеп тә йөрөй икән. Ауырыу эйәһе, йәғни бөтә өй ағзаларының эсе китә, аяҡ-ҡулдары ҡороша, тәне тартыша, ҡоҫа, кеше бик тиҙ үлә. Вабаны индермәҫ өсөн ҡапҡаларҙы бикләйҙәр, ҡапҡаға, ишеккә дегет һөртәләр. Сөнки ваба эйәһе дегеттән, артыштан, әремдән ҡурҡа икән. Ваба башланһа өйҙә артыш, әрем яндырырға кәрәк. Ауырыуҙы ла әрем, артыш һыуы менән ҡойондорорға ҡушалар. Элегерәк ауылдарҙы уратып һөрөп тә сыҡҡан булғандар.

Ваба һүҙе килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

***FАЗРАИЛ.*** Диалекттарҙа Ябраил тигән исем менән дә йөрөй. Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән образ. Уның төп функцияһы – ваҡыты еткән кешенең йәнен алыу. Шулай итеп, Ғазраил – үлем фәрештәһе.

Ышаныуҙар буйынса, ул ҙур кәүҙәле, оҙон аяҡлы күҙгә күренмәгән зат. Уның 4 йөҙө, 4 мең ҡанаты бар. Бөтә тәне күҙ һәм телдәрҙән тора. Уларҙың һаны ер йөҙөндә йәшәгән кешеләр һанына тиң икән. Берәй кешенең ваҡыты етһә, Аллаһы тәғәлә тәхете эргәһендәге ағастан шул кешенең исеме яҙылған япраҡ төшә, тиҙәр. Япрағы төшкән кешенең йөҙөнән нуры ла китә. Уға үлем төҫө инә икән. Ышаныуҙар буйынса, 40 көн эсендә шул кешенең йәне алынырға тейеш. Аллаға ышанған кешенең йәне тәненән еңел генә айырыла икән. Ундай кешеләр ғәҙәттә еңел үлә. Ышанмаған кешеләрҙең йәнен Ғазраил фәрештә күкрәгенән тартып ала икән. Шуға ундай кешеләр бик ауыр үлә тиҙәр. Түбәндә Учалы районынан яҙып алынған материал килтерелә: «Ғазраил фирештә кешене барыбер мал кеүек боғаҙҙай. Беҙ шуның өсөн бөтөн әйберҙе йыуабыҙ. Бөтә ергә ҡан сәсрәй икән. Беҙ мәйет эргәһендә тубыҡтан ҡан кисеп йөрөйбөҙ тей. Күренмәй генә икән ул ҡан кешегә. Бәғзе кеше еңел генә үтә. Андайҙы беҙҙә: «Алла бәндәһе», – тейҙәр. Ҡайһы бер кеше үлә алмай оҙаҡ аҙаптана. Андай кеше һаҡында беҙҙә: «Бахырҙың гөнаһтары күп икән», – тип аят уҡыйҙар. Аят йән биреүҙе еңелдәтә. Еңел киткәне лә, аҙаптанғаны ла анда барғас яуап бирә. Гөнаһтарың күп буһа, тамуҡҡа, әҙ буһа, ожмахҡа әләгәң тейҙәр».

*(М.Абдуллина. Юлдаш ауылы.)*

Ғазраил килеп сығышы яғынан Библиялағы Гавриил фәрештә менән бәйле. Әммә был зат боронғо башҡорттарҙың үлем тәңреһе менән дә бәйле булырға, уның функцияһын тулыһынса үҙенә алырға тейеш.

***FӘЙШӘ-ФАТИМА.*** Диалекттарҙа Ғәйшә-Батима, Ғәйшә-Батман исемдәре менән дә йөрөй. Башҡорт мифологияһына ислам дине менән килеп ингән. Ғәйшә ул Мөхәмәт бәйғәмбәрҙең ҡатынының, ә Фатима – ҡыҙының исеме.

Башҡорт эпсендәрендә, теләк-ырымдарында Ғәйшә-Фатима исеме Ғәйшә-Фатима ҡулы, Ғәйшә-Фатима име, Ғәйшә-Фатима теле тигән һүҙбәйләнештәрҙә осрай. Был ике исем шулай итеп гел бергә йөрөй һәм, ышаныуҙар буйынса, ҙур магик көскә эйә. Мәҫәлән, башҡорттар баланы мунсала сабындырғанда уға бәхет, һаулыҡ, ғүмер, тәүфиҡ теләп, төрлө яман заттарҙан ҡурсалап, ошондай һамаҡ әйткәндәр:

Һап - һап - һап!
Мунса ташы, бүрәнә башы,
Әбейҙе «әбей» тип әйт,
Бабайҙы «бабай» тип әйт!
Айыу балаһы,
Бүре балаһы,
Татлы таба бул,
Алабуға бул,
Һыуҙан таҙа бул,
Һөләктәй бала бул,
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатима ҡулы
Һап - һап - һап!

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Сарпыу ҡайтарыу эпсенендә лә Ғәйшә-Фатима телгә алына. Сағыштырығыҙ:

– Нимә тейгән?
– Сарпыу тейгән.
Нимә имдәйең?
– Сарпыу имдәйем.
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9,
Бер – бөтһөн,
Ике, өс – осһон, китһен,
Дүрт, биш – биҙһен, китһен,
Алты, ете – елгә, ҡуҙға,
Һигеҙ, туғыҙ – тупраҡҡа
Имдәп, ҡайтмаһаң,
Миңә оят,
Тфү, тфү,
Минең телем түгел,
Ғәйшә-Батима теле.
Тфү, тфү!
Име-томо шу буһын!

*(Г.Ағзамова. Учалы районы, Батал ауылы.).*

Тимерәү имләгәндә лә ҡаҙан йәки сөгөн ҡоромон ҡырып һөртәләр ҙә тимерәүгә ошондай эпсен әйтәләр:

Бисмилаһи-р - рахмани-р - рәхим,
Бында сыҡма, тышҡа сыҡ!
Имең-томоң шул булһын!

Минең имем түгел,
Ғәйшә-Фатималар име.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.)*

Күренеүенсә, Ғәйшә, Фатималар башҡорт ышаныуҙарында оло тылсымлы көскә эйә. Уларға им-томсолар, ырыу-юрау менән булышҡан баҡсылар ҙа мөрәжәғәт иткән. Мосолман илдәрендә боронғо талисман – ус һүрәте «Фатима ҡулы» тип йөрөтөлә һәм дауалауҙа ҡулланыла. Ғәйшә, Фатималар исеме бала һаҡлау һамаҡтарында ла телгә алына. Ошоларҙан сығып, Ғәйшә-Фатималар им-томсолар, баҡсылар тарафынан изгеләштерелгән образ тип, әйтеп була. Үрҙә күрһәтелгәнсә, был образдар ислам дине менән килеп ингән. Әммә ваҡыт үтеү менән улар башҡорттарҙың исламға тиклем булған ышаныуҙарына яҡынлаша.

Билдәле булыуынса, боронғо төркиҙәрҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙы, балаларҙы, ҡатын-ҡыҙ им-томсоларҙы бағыусы, ҡурсалаусы зат – Умай тәңре булған. Әлбиттә, боронғо шамандар, баҡсыларҙа уға мөрәжәғәт иткән. Ислам дине килеп ингәс, Умай онотола башлай. Уның исеме лә һирәк ҡулланыла торған исемдәр разрядына күсә. Бәлки ошо осорҙарҙа ышаныуҙарҙа Ғәйшә-Фатима образы барлыҡҡа киләлер. Башҡорт телендә, уның диалекттарында Ғәйшә-Фатима ҡулы, Ғәйшә-Фатима име, Ғәйшә-Фатима теле, Ғәйшә-Батима һулышы, Ғәйшә-Батималар ҡулы, Ғәйшә-Фатималар тигән һүҙбәйләнештәр әле лә ҡулланыла.

Килеп сығышы яғынан Ғәйшә, Фатима исемдәре ғәрәп сығанаҡлы һүҙҙәр.

*ДАҒА.* Ышаныуҙар буйынса, даға сихри көскә эйә булған предмет. Уны башҡорттар бәлә-ҡазанан һаҡлай торған әйбер, тиҙәр. Шуға ла халыҡта элек-электән тупһаға, һикәлтәгә даға ҡағыу йолаһы булған. Уның ырымы шулай: кешенең яман уйы, яман һүҙе дағаға эләгеп ҡала, өйгә инмәй икән. Даға ен-шайтандан да һаҡлай. Әммә тупһаға һаҡлау өсөн ҡағыла торған даға мотлаҡ ат тояғынан төшөп ҡалған даға булырға тейеш тиҙәр. Дағаны ҡаҡҡан саҡта бисмилла менән бергә түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтеү ҙә мотлаҡ.

– Шайтан килмәһен өсөн,
Хәрәм күрмәһен өсөн,
Тел-теш баҫмаһын өсөн,
Бәрәкәт ҡасмаһын өсөн!

*(«Башҡортостан», 17 июнь, 1999 й.).*

Даға төрки сығанаҡлы һүҙ.

*ДЕЙЕҮ.* Диалекттарҙа деү бәрәһе, дейеү пәрейе, дәүфәре, диүәрей, деүбире, дөйөү, дөйөү пәрейе исемдәре менән дә йөрөй.

Башҡорт мифологияһында өс, алты, ете, туғыҙ, ун ике башлы дейеүҙәр осрай. Улар ғәҙәттә имәнес ҙур, йөнтәҫ, бәләкәй күҙле, оҙон ҡолаҡлы итеп һүрәтләнә. «Ҡуҙыйкүрпәс» эпосында дейеү тураһында «Ғәләмәт ҙур, үҙе ҡот осҡос, ытырғаныс бер януар», – тиелә. «Урал батыр» эпосында ла дейеүҙәр батшаһы Әзрәкә имәнес ҙур кәүҙәле, ут бөркөп тороусы, кешене тыны менән тартып алыусы итеп һүрәтләнә. Урал батыр үлтергәс:

– Әзрәкә йәнһеҙ йығылған,
Имәнес ҙур кәүҙәһе
Һыуҙы уртаға бүлгән;
Халыҡҡа менеп торорға,
Йәйерәп хәл йыйырға
Ҙур бер Яман тау булған.

Дейеү, дейеү батшаһының исеме Әзрәкәне башҡорт теле материалында аңлатып булмай. Фәндә дейеүҙе иран мифологияһы һәм телдәре менән бәйләү ҡабул ителгән. Әммә ҡыпсаҡ телдәрендә ҙур, оло, өлкән мәғәнәһендә осраған дәү/дав/дев/тәү, дөө һүҙҙәре башҡорт телендәге дейеү һүҙенең, бигерәк тә унең диалект варианттарының килеп сығышын боронғо ҡыпсаҡ мифологияһы менән дә бәйләргә мөмкинселек бирә. Был фекерҙе «Слово о полку Игореве» әҫәрендә осраған, ҡыпсаҡтарға урыҫ ғәскәрҙәре килеүен хәбәр иткән Див исемле ҡош булыуы ла дәлилләй, шикелле.

*ДӘЖЖӘЛ.* Диалекттарҙа дәржәл, дәжәл, тәжәл, тәжжәл тигән варианттары ла осрай. Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән образ. Ышаныуҙар буйынса, ахыры заман еткәс, матур музыкаға эйәртеп кешене алдап алып китә торған зат. Миҫал өсөн Белорет һәм Илеш райондарында яҙып алынған материлдарҙы килтерергә була.

**Тәжәл ҡалҡыу**

Ахыры заман етәр булһа, Тәжәл ҡалҡа тей. Тәжәлдең тауышы, музыкаһы матур була. Шуныға аның артынан кеше эйәреп китә икән. Эйәреп китмәҫ өсөн, аның тауышын ишетмәҫ өсөн тирмән тарталар. Шу тирмән тарткан кеше генә ҡала тей. Ату шу тауышты эҙҙәп, таваны туҙғанса, арып һәле бөткәнсә китә тей кеше. Ә ул тауыш ишетелһә лә, бер нәмә лә күренмәй икән.

*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

**Ахыры заман**

Ахыры заман житкәс тау-ташлар тигезләнә, урманнар бетә, жир менән күк бер-берсенә бәреләә. Шул заман Дәржжәл тигән әйбер сыға. Ул төрлө музыка тауышларына биеп жирне ашап килә. Аның артынан бөтә халык китә. Дәржжәл жир өстендә бер әйбер калдырмай ашап бетереп килә, кызыл балсык кына кала икән. Шуның өчен кешене балсыкка күмәләр, тейләр ийе ололар.

*(Р.Саяпов, Н.Саяпова. Илеш р-ны).*

Ышаныуҙарҙа Дәжжәлдең көнсығыштан ҙур бер ишәктә килеп сығыуы, артынан эйәргән халыҡ менән 40 көн йәки 40 йыл идара итеүе лә һүрәтләнә.

Дәжжәл килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙ. Мифик зат атамаһынан тыш был һүҙ диалекттарҙа *уҫал, ғәйрәтле, хәтәр, яман кеше* мәғәнәһендә лә йөрөй.

***ЕҘМОРОН.*** Башҡорт ышаныуҙарында еҙ моронло, еҙ тырнаҡлы ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендәге мифик зат. Ҡайһы бер осраҡта Еҙморон йәнлек, ҡош ҡиәфәтенә лә инә ала. Бик әсе көслө тауышы менән был мифик зат тирә-йүндәге барлыҡ йән-эйәләрен үлтерә, ҡурҡыта.

Еҙморон һүҙе төрки еҙ һәм морон һүҙҙәренән тора.

***ЕК, ЕК ЭЙӘҺЕ.*** Ышаныуҙар буйынса, ерәнгес, ҡурҡыныс бер мифик зат. Башҡорт телендә *ек күреү, екһенеү, ек күремесе* кеүек һүҙбәйләнештәрендә осрай. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа *jек* һүҙе «*яман мифик зат*», jек ickak һүҙе «ектәр һәм убырҙар» мәғәнәһендә ҡулланылған. Был заттың ауырыу эйәһе булыуы ихтимал сөнки, ҡомартҡыларҙа ауырыу, ауырлыҡ мәғәнәһендә jig һүҙе лә осрай.

Татар телендә *җик* ағас, урман эйәһе исеме тип бирелә. Кавказ халыҡтарында ла Жиг-гуаша исемле ағас-урманды һаҡлаусы тәңре. Башҡорт эпостарында, экиәттәрендә Ек Мәргән исемле батыр бар. Ул урманда үҫкән бала. Шуға исемендә Ек һүҙенең булыуы ла, ихтимал. Ошоларҙы иҫәпкә алһаҡ, Ек, Ек эйәһе – ағас, урман эйәһе булыуы мөмкин.

***ЕЛ, ЕЛ КҮҢЕЛЕ.*** Башҡорт мифологияһында Ел сихри көскә эйә булған мифик зат. Ел эйәһе, ышаныуҙар буйынса, һуғылһа, ҡағылһа, ғәҙәттә кеше ауырый. Ел – ир-егет. Шуның өсөн елдән тыуған бала тигәндә, ирһеҙ ҡатындың бала табыуы күҙ уңында тота. Быума ауырыу-

ын *ел күңеле* тейеү менән бәйләйҙәр. Башҡа яҡтарҙа быума булһа *яман ел ҡағылған,* тиҙәр. Ҡарғауҙарҙа ла ел образы ҡулланыла. *Ауыҙыңдан ел алһын,* – тигән һүҙҙәр ярҙамында ҡарғыштан, яман теләктәрҙән, нахаҡ рәнйетеүҙән ҡотолорға тырышалар.

*Елдән килгән – елгә оса,* – тигән мәҡәл дә елгә ҡарата кире ҡараш булыуын күрһәтә.

Бик күп халыҡтарҙа кеүек үк башҡорттарҙа ла *ете юл саты,* йәғни төрлө яҡтан ел иҫкән урын, яман һанала. Шуға ундай урындарҙа өй, кәртә-ҡура һалырға, ятып йоҡларға, еләк-емеш йыйырға, утын-бесән әҙерләргә ярамай тиҙәр. Ошо тыйыуҙарҙы үтәмәгән кеше *елдән тейгән* ауырыу менән ауырый икән. Елдән тейгән ауырыуҙарҙы ауырыу эйәһен ҡыуыу ысулы менән имләйҙәр. Ҡыуғанда түбәндәге магик һүҙҙәр ҙә ҡулланыла:

1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 – тупраҡҡа,
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, – елгә,
1, 2, 3, 4, 5 – бөтһөн, китһен,
1, 2, 3 – осһон, китһен,
1 – бер ҙә ҡалмаһын!
*(Н.Исмәғилева. Мәләүез р-ны, Һыртлан ауылы).*

Ел һүҙе менән башҡорт телендә *ел ашау, елгә осоу, елдән килеү, ел алғандай, елдән булған, ауҙыңдан ел алһын, ел йотоу, ел ҡағылыу, ел ҡыуыу* һ.б. һүҙбәйләнештәр бар. Улар елдең башҡорт мифологияһында йәнләндереп ҡабул ителеүен күрһәтә. Ел ашай, йота, һуғыла һ.б. Уның күңеле, ауыҙы, үпкәһе бар. Ел һүҙе боронғо ҡомартҡыларҙа тәңре исеме, яман зат-демон, ауырыу эйәһе мәғәнәһендә ҡулланылған.

Башҡорт әкиәттәрендә лә Ел – көслө егет образында бирелә. Ибн-Фаҙлан яҙмаларында ла Елдең хужаһы, эйәһе барлығы тураһында мәғлүмәт бар. Ошоларҙан сығып башҡорт мифологияһында ҡасандыр *Ел тәңре* булыуын, артабан уның башҡа тәңреләр кеүек яман заттар рәтенә инеүе тураһында фараз итеп була.

Ел һүҙе килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ЕН, ЕН-ПӘРЕЙ.*** Диалекттарҙа жен, ен-пәрей, жин, йен варианттары ла бар. Башҡорт мифологияһына ен ислам дине менән килеп ингән, шул уҡ ваҡытта исламға тиклем тамырҙары ла бар. Ышаныуҙар буйынса, хоҙай тарафынан булдырылған өс заттың (кеше, фәрештә, ен) береһе. Ендәр төтөнһөҙ уттан яралған икән. Шуға улар һауа йәки ут тәнле. Ендәр төрлө ҡиәфәткә инә ала. Ғәҙәттә, кеше ҡиәфәтендә осрай,

тиҙәр. Йыш ҡатын-ҡыҙ, ир-ат, һирәк бесәй, йылан, бәрәс һ.б. сүрәттә күренә икән. Мәҫәлән, Учалы, Ҡырмыҫҡалы, Шишмә райондарында яҙып алынған материалдарҙан ендәрҙең кеше кеүек булыуын, йәшәүен күреп була. Сағыштырығыҙ: Жен күргән кешеләр элек була торғайны. «Күрҙем тип һөйҙәгәндәр әле лә бар». «Дөйә етәктәп Батал яғынан килеп төштө бер жен», – тип атайым да һөйҙәгәйне.

*(Ш.Сафин. Учалы р-ны, Аһылай ауылы).*

Өләсәйемә ун өс йәш булған. Ҡояш байығанда ул мал аҙбарына сығырға теләй. Ишекте асыуға оҙон күлдәк кейгән ялбыр ҡатын өйгә инеп китә, түргә уҙа. Өләсәйем хуштан яҙып йығыла, өс ай буйына башын да күтәрә алмай сирләй. Берҙән-бер көндө уның күҙенә ауырып үлгән иптәш ҡыҙының һике аҫтына инеп китеүе һәм һикене дер һелкетеүе күренә. Ошонан һуң өләсәйемдең хәле тағы ла насарая. Ата-әсәһе мулла саҡыртып өшкөртөргә мәжбүр була. Шунан һуң ғына ул һауыға. Теге ялбыр ҡатын ен булған икән.

*(Ә.Хәйретдинова. «Башҡортостан». 1999 йыл).*

Шулай итеп ендәр йыш ҡына ир һәм ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә күҙгә күренә. Шул уҡ ваҡытта ендәр бесәй, йылан, бәрәс һ.б. сүрәткә инеүе лә ихтимал.

Ышаныуҙар буйынса, ендәр кешеләр кеүек ғаилә ҡороп, бала-сағалы булып, мал-тыуар тотоп йәшәй. Белорет районында йәшәүсе Хәйҙәр Искәндәров яҙыуы буйынса, уларҙың хатта машиналары ла бар икән. Сағыштырығыҙ:

Миңә ун ике йәш булғандыр. Атайым ауылдан өс саҡрым ерҙә бәрәңге ултырта торғайны. Көҙ бәрәңгене сығарып өлгөрмәнек, ҡар яуҙы. Ҡырҡ сантиметр ҡалынлығында булғандыр. Атайым, инәйем, апайҙарым менән ҡар аҫтынан бәрәңге алабыҙ. Сәғәт көндөҙгө ике-өстәр тирәһендә көслө тауыш килә башланы. Был тауыш беҙҙән 100–150 метр алыҫлыҡтағы урман аша ауыл яғына үтте. Машина гөрһөлдәүе, йыр, музыка, кешеләрҙең ҡыҫҡырып һөйләшеүе, бәпәй илауы, балалар тауышы, ат кешнәүе, һыйыр баҡырыуы, эт өрөүе, арба шығырҙауы кеүек һәр береһе айырым асыҡ ишетелгән һанап сыҡҡыһыҙ өндәрҙән тора ине ул. Бөтәбеҙ ҙә аяғүрә баҫып тыңлап оҙаттыҡ. Атайым: «Ендәр күсенде»,– тине. Ҡайтышлай юлдарҙы байҡағайныҡ, берниндәй ҙә эҙ күрмәнек.

*(Х.Искәндәров. «Башҡортостан». 1999 йыл).*

Ендәрҙең исемдәре лә була, тиҙәр. Әбйәлил районында яҙып алынған хөрәфәти хикәйәлә Әнәс тигән исем телгә алына. Сағыштырығыҙ:

Өскөл ауылында Һөйөндөк ҡарттың әбейе Ғәйшә тигән ҡатын ендәнеп ауырыны, саташып. Беҙ Өскөлдә ураҡ урып ята инек Һәрхиә апайҙарҙа. Шуларға ҡаршы ғына ине теге Һөйөндөк ҡарттарҙың өйө. Тегенең әбейе гел: «Әнәс, килеп алып кит мине» – тип шарылдай торғайны. Әсәйем: «Әнәс ен исеме»,– тей ине. Теге ҡатын тәки үлде шул ауырыуы менән.

*(М.Мансурова. Рәхмәт ауылы).*

Ендәр өйгә, кешегә эйәләшә, балаларын алмаштыра, төндә тәҙрәнән ҡараһаң төртә, оҡшатмаһа, һуға; яратҡан балаһын ҡытыҡлап, семтеп уйната. Сағыштырығыҙ: «Малайыбыҙ илай ҙа илай. Инйәргә больницаға китергә булдыҡ. Электричкаға килдек, көтәбеҙ, кеше күп, электричка һаман юҡ. Өшөнөк тә остановка эргәһендәге кешеләргә индек. Ингәйнек аҡырып илаған бала тымып йоҡланы ла ҡуйҙы. Электричкаға һуңланыҡ. Өйгә ҡайттыҡ. Бала иламай тыныс ҡына көлөп тик ята. Әбей: «Күмәк кешеләр араһында аҙашып ҡалған теге ен», – тей. «Тиҙҙән ҡайта ул өйгә», – тей. Бер биш-алты көн бала иламаны. Аҙаҡ тағы илай башланы. Мулла саҡырып енде ҡыумайынса туҡтаманы бала. Әбей әйтә: «Ен – ҡатын-ҡыҙ затынан», – тей. Шуға ул ир-баланы яратып, ҡытыҡлап, семтеп илата, уҙенсә уйната, икән. Ен ҡәйнәмдең дә ике улын илатып үлтергән. «Өй тынысһыҙ, ен быуып китте ике малайымды», – тей торғайны ҡәйнәм. Ә бына Илүзәгә, ҡәйнәмдең ҡыҙҙарына теймәгән теге ен. Ҡатын-ҡыҙ булғас, ҡыҙҙар кәрәкмәй икән уға.

*(З.Илһамова. Инйәр ҡасабаһы).*

Ен эйәләшкән өйҙөң дүрт мөйөшөнә мылтыҡ атып, өйгә ат индереп, артыш яндырып, ауырыуҙы өшкөрөп кенә ендәрҙе ҡыуып була.

Башҡорт ышаныуҙары буйынса, ен эйәләгәндә генә түгел, хатта ен ҡағылғанда, һуғылғанда ла ауырыйҙар. Ғәҙәттә психик ауырыу менән ауырығанда ен һуғылып ауырый, тиҙәр. Мәләүез районында (Һыртлан ауылы) яҙып алынған мәғлүмәт буйынса, ен һуғылып ауырыған кешегә мулла саҡырғандар. Мулла өйҙә тәүҙә сыбыртҡы шартлата башлаған. Дүрт мөйөшөнә мылтыҡтан атҡандар. Шунан өйгә ҡара кәзә бәрәстәре индерергә, ауырыуҙы иҙәнгә һалырға ҡушҡан. Ауырыу ятҡас, бәрәстәрҙе ҡыуып өҫтөнә мендерә, уларҙан тапата икән был. Үҙе әйтмешләй, шулай итеп енде ҡыуып сығара был мулла.

Параличтың сәбәбен дә башҡорттар ен һуғыуҙан күргән. Шуға ла уны элек өшкөрөп, ҡыуып ебәрергә тырышҡандар.

Ирен осоноуының сәбәбен дә халыҡ ен төкөргән аш-һыу ашапэсеүҙән йәки ирен-морондо ен ялауҙан, тешләүҙән күргән. Ен ҡырҡ көнө

тулмаған балалар өсөн дә ҡурҡыныс, сөнки, ышаныуҙар буйынса, баланы алмаштырыуы ихтимал. Рахит булған, аҡылы зәғиф, башы-күҙе уйнап торған балаларҙы башҡорттар ен алыштырған, ен алмаштырған бала тиҙәр.

Бәғзе яҡтарҙа ҡойондо ла ен уйыны, ен бейеүе, ен туйы, тиҙәр. Ҡойон ене һыңар ҡул, һыңар аяҡ, һыңар күҙ була икән. Ҡойон ененә ғәҙәттә әрләшеп, ҡарғап бысаҡ йәки ҡайсы ташлайҙар. Ышаныуҙар буйынса, бысаҡ тейһә, ендәр сыр-сыу итеп ҡала, ә бысаҡта ҡан эҙҙәре күренә, тиҙәр.

Ендәр, ышаныуҙар буйынса ике төркөмгә бүленә икән. Бәғзеләре Мөхәмәт пәйғәмбәргә эйәреп яҡшылыҡ ҡылған, ислам тараҡан, икенселәре – Иблискә буйһонған, яманлыҡ ҡылған заттар.

Башҡорт телендә ен туйы, ен алыштырыу, ен аралау, ен ботағы, ене тотоу, ене кеүек күреү, енен сәсеү, ене һөймәү, ене һуғылыу, ен кеүек, ен күсе, ен ҡағылыу, ен ҡасырыу, ен ойлау, ен һуғыу, ен эйәләү; ен алғыры; яҡшы ҡатын йән кеүек, насар ҡатын ен кеүек тигән һүҙбәйләнештәр, ҡарғыштар, мәҡәлдәр бар.

Килеп сығышы яғынан *ен* фарсы сығанаҡлы һүҙ.

***ЕР, ЕР ТӘҢРЕҺЕ, ЕР АЛЛАҺЫ, ЕР-ҺЫУ.*** Башҡорт халыҡ ижадында, ышаныуҙарҙа Ер-Әсә, Ер-һыу аллаһы, Ер инәһе, Ер эйәһе, Ер атасы, Ер инәсе, Ер анасы, Ер-Ҡортҡа, Ер хужаһы тигән атамалар ҙа осрай.

Башҡорт мифологияһында Ер тәңре ғәҙәттә ҡатын-ҡыҙ образында бирелә. Мәҫәлән «Толбуйҙар» тигән легендала ер хужаһы Тулауа оҙон сәсле бер йөнтәҫ, йәмһеҙ, үҙе ялангас, ике имсәге ике яҡҡа һалынып торған әбей итеп һүрәтләнә. Ер эйәһе Күк атаның ҡатыны, бөтә тереклекте булдырыусы зат. Ер тәңрегә иркәләп шуға ла Ер-әсә тип өндәшәләр. Ер-әсә кешене үлгәс тә ташламай, ул уны үҙ ҡуйынына ала икән. Ер-әсә бигерәк тә етем-еһерҙе ярата, тиҙәр. Шуға ла башҡортта: «Етем-еһерҙе илатма, Ер илар, Ер ҡарғар», – тиҙәр. Ололар Ер-әсәне үпкәләтмәҫкә, асыуландырмаҫка ҡуша. Шуға ергә бысаҡ сәнсеп уйнауҙы, теләһә ҡайҙа утын яғыуҙы, ерҙең ҡыртышын алыуҙы, ергә бысраҡ ташлауҙы ололар эле ләтыя.

Ерҙең изге көсөнә ышаныу төрлө ауырыуҙарҙы магик ысулдар менән дауалауҙарҙа ла сағыла. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙар, бөйөр ауырыуҙарын, аяҡ шешен *ергә һалыу* ысулы менән имләй. Был магик ысул шуның менән ғибәрәт: ауырыуҙың бер нисә бөртөк сәсен, тырнағын, кейем һүрентеләрен, көл, күмер, тимер һыныҕы, икмәк валсығы алып бер һауытҡа

һалалар һәм төндә ергә күмәләр. Тире ауырыуҙарын бөтөрөр өсөн таңда ерҙәге ысыҡҡа тәгәрәйҙәр.

Шул уҡ ваҡытта ерҙән кешегә ерҙән ауырыу ҙа күсә тип уйлағандар. Шуға йығылһаң тиҙ генә тороп «Һиңә – ауырлыҡ, миңә – еңеллек», – тип, төкөрөп, артыңа ҡарамай был ерҙән китергә кәрәк. Әгәр ҙә был процедураны үтәмәһәң, «ерҙән ауырыу тейә. Шул ауырыуҙы «ерҙән тейенгән ауырыу» тиҙәр. Ышаныу буйынса, былдай ауырыуҙарҙы тик «ергә һалыу» ысулы менән генә әмәлләп була. «Ергә һалыу» ғәҙәттә әфсен-һамаҡ менән бергә аткарылған. Мәҫәлән, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарында түбәндәге әфсен һүҙе ҡулланылған:

Һыуҙан сыҡҡан һары һаҡал,
Ерҙән сыҡҡан еҙ һаҡал,
Мине тотма, шуны тот.
Ай ҡайтты, көн ҡайтты,
Әйҙә инде һин дә ҡайт.
Иртә тиһәң, ирекмәк,
Кис тиһәң, киситмәк,
Һыуҙан килһәң, һыуға ҡайт,
Ерҙән килһәң, ергә ҡайт,
Ҡайҙан килдең, шунда ҡайт.

Ергә һалыуҙың варианты осоҡлау көнъяҡ-көнсығыш башҡорттарында түбәндәге әфсен-һамаҡ менән бергә башҡарыла:

Ер инәһе ерән һаҡал,
Һыу инәһе һыуған һаҡал,
Мине тотма, шуны тот,
Ер кендеге бары бер.

*(З.Кәшфетдинова. Рәхмәт ауылы).*

Зәхмәтте имләгәндә лә Ер эйәһенә мөрәжәғәт итеү скағыла:

Ер атасы, Ер инәсе,
Тотҡан булсаң, ебәр,
Син шундай матур,
Син шундай сибәр.

*(Ғ.Муллағолова. Ҡариҙел р-ны, Муллаҡай ауылы).*

Үрҙә килтерелгән әфсен-һамаҡтарҙың тәүгеһендә «ерҙән сыҡҡан еҙ һаҡаллы» ауырыу ебәреүсе затка мөрәжәғәт ителә. Икенсе әфсендә «ерән һаҡаллы ер инәһе» тураһында һүҙ бара. Һаҡал, мыйыҡ ғәҙәттә

ир-ат менән бәйле атрибуттар. Шуға был заттың ир-егет итеп ҡабул ителеүен фараз итергә булыр ине, әгәр икенсе әфсен-һамағында *ер инәһе* тигән һүҙбәйләнеш булмаһа.

Шулай итеп, башҡорт ышаныуҙарында Ер тәңреһе ниндәйҙер дуаль бер образ булып килеп баҫа. Ахыры, ул шул тиклем боронғо тәңреләрҙең береһе, хатта унда матриархат та, патриархат та сағылыш тапҡан. Был әфсендәрҙә тағы бер бик мөһим деталь күҙгә салына. «Ер инәһе» йәки «ерҙән сыҡҡан еҙ һаҡал» әфсен-һамаҡтарҙа «Һыу инәһе» һәм «һыуҙан сыҡҡан һары һаҡал» менән һәр ваҡыт бергә килә. Ер менән һыуҙың айырылғыһыҙ бергә булыуы эпоста ла сағылыш тапҡан.:

Ер-һыу йөрәк тибешем,
Ер-һыу минең төп ишем,
Атайымдың төҫө ул,
Йөрәгемдең хисе ул,
Зиһенемдең көсө ул.
Ер-һыу кеше ише ул.

Башҡорттар ышаныуҙарында ер менән һыуҙың айырылғыһыҙ булыуы уның боронғо төркі мифология менән бәйле булыуын күрһәтә. Ҡомартҡыларҙағы Ер-сүб тәңре менән башҡорттоң ер-һыуы араһында туранан тура бәйләнеш бар.

Ер һүҙе башҡорт телендә *ер йотоу, ер ашағыр, ер уяныу, ер тыуҙырыу, быуаҙ ер, һимеҙ ер, ер аяғы, ер башы, ер кендеге, ер бауыры, ер буйы, ер ҡуйыны, ер эсе, ерҙең ҡарыны киң, ереккәнде ер ярата, ер балаһы, ер бит (оятһыҙ), ергә ҡайтыу, ер бул, ер убыу, ер упҡыры, ер йотһон, ер кинәнгере* кеүек фразеологик һүҙбәйләнештәрҙә һәм мәҡәлдәрҙә осрай. Был һүҙбәйләнештәр һәм мәҡәлдәр барлыҡҡа килгән заманда башҡорттар ерҙе кеше йәки башҡа бер йән эйәһе кеүек ҡабул итеүҙәре тураһында һөйләй. Шуның өсөн дә ерҙең *«башы», «аяғы», «эсе», «бауыры», «ҡуйыны», «кендеге», «ҡарыны», «буйы»* бар. *Ер* кеше кеүек «уяна», «йоҡлай», «йота», «кинәнә», «ярата», «тыуҙыра», «тарта».

Ер тәңреһенең атамаһы килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ. Ер тәңреһе үҙе боронғо төркиҙәрҙең Ер-Суб тәңреһе менән тығыҙ бәйле.

***ЕР КЕНДЕГЕ.*** Башҡорт мифологияһында һәр нәмәнең кендеге (үҙәге) булыуы, уның магик көскә эйә булыуы тураһында ышаныуҙар бар.

Шуның өсөн дә кеше кендеге генә түгел, ер кендеге лә бар икән. Башҡорт ышаныуҙарында ерҙең кендеге тип Шүлгән мәмерйәһен, Бе-

лорет районындағы Йәйташты, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла яҡтарында Арҡайымды әйтәләр. Венгрияла 1997 йылда бер экстрасенс үҙен шаман тип һанаған ҡатын да Шүлгән мәмерйәһе ерҙең кендеге тигәйне.

Ерҙең кендеге тигән урындар магик көскә эйә тиҙәр. Шуға унда төрлө ауырыуҙарҙан, бәхетһеҙлектәрҙән ҡотолоу өсөн кеше йөрөй. Белорет районындағы Йәйташҡа барып ташты майлап, һуҡҡылап, ямғыр яуҙырғандар йәки киреһенсә туҡтатҡандар. Арҡайымға, Шүлгәнгә әле лә төрлө ауырыуҙар, балаһыҙ ҡатындар, ҡото-бәхете киткәндәр йөрөй. Унда үҙҙәренә һәм бала-сағаларына иҫәнлек-һаулыҡ, бәхет-ырыҫ, балаһыҙҙар бала теләйҙәр. Ер кендегенең ысығы файҙалы тип таңда ысыҡҡа тәгәрәйҙәр, һыуы менән ҡойоналар, изге ерендә ятып йоҡлайҙар. Ер кендеге магик дауалау менән бәйле эпсендәрҙәлә телгә алына.

Ер инәһе ерән һаҡал,
Һыу инәһе һыуған һаҡал.
Мине тотма, шуны тот,
Ер кендеге бары бер.

*(З.Кәшфетдинова. Рәхмәт ауылы).*

***ЕТЕ.*** Башҡорт мифологияһында магик көскә эйә булған изге һан. Кеше тормошонда ете һаны тыуғандан алып үлгәнгә тиклем, хатта үлгәс тә ҙур роль уйнай. Мәҫәлән, ышаныуҙар буйынса, сөннәт балаға *етенсе көндә ете йәшкә* ҡәҙәр эшләнергә тейеш. Кеше үлгәс етеһен уҡытҡандар. Етеһенә *ете йәймә* бешереү булған. Ете һаны менән ауырыуҙарҙы имләү йолалары киң таралған. Мәҫәлән, осҡолоҡ булғанда ете йотом һыу йотorға кәрәк, тиҙәр. Күҙ ауырыһа, *ете төн* уртаһында *етегән* шишмәнән йыйылған һыу менән *ете көн* күҙенде йыуырға кәрәк. Икенсе яҡтарҙа күҙ ауырыһа, йылан тиреһенә текләп ҡарап *ете мәртәбә* эфсен әйткәндәр. Биртек менән интеккәндә *ете өйҙөң* ишеген ҡағып, аҙыҡ йыйып ашатҡандар. Тиф, осоҡ һ.б. ауырыуҙарҙы *ете юл* сатына ҡыуғандар. Ерҙән тейенгән ауырыуҙарҙы ла *ете төрлө әйбер* ташлап имләгәндәр. Арпа, өҙләк һ.б. ауырыуҙарҙы имләгәндә лә *етегә* тиклем һанау ысулы ҡулланылған. Сөйәл эпсенендә лә *ете диңгеҙ, ете утрау, ете түмәр* телгә алына. Башҡорт экиәттәрендә лә *ете* һаны киң ҡулланыла. Мәҫәлән, Алпамыша экиәтендә Алп батыр ҡыҙ менән *ете көн, ете төн* көрәшә. Мәҡәл һәм әйтемдәрҙә, фразеологик берәмектәрҙә ете һаны шулай уҡ киң таралған. Сағыштырығыҙ: *ете тир сығыу, ете юл сатаы, ете ҡат ер аҫты, ете ҡат күк өҫтө, ете ата, ете быуын, ете ят, ете ятып бер төшөнә инмәү* һ.б.

Килеп сығышы яғынан *ете* төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ЗӘМЗӘМ ҺЫУЫ.*** Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән. Ышаныуҙар буйынса, магик көскә эйә булған, ауырыу-сырхауҙарҙы бөтөргән изге, шифалы һыу. Был һыуҙы эсһә, ышаныуҙар буйынса, астан үлеп барған – терелә, әлһерәп йығылған – ҡалҡа, ауырыу баҫҡан – йүнәлә икән.

Башҡорт телендә *зәмзәм һыуы, зәмзәм ямғыры* тигән һүҙбәйләнештәр бар.

Килеп сығышы яғынан зәмзәм һыуының атамаһы ғәрәп һүҙе һәм Мәккәләге Ҡәғбә эргәһендәге изге ҡоҙоҡтоң исеме менән бәйле.

***ЗӨЛПӘКӘЙ.*** Башҡорт мифологияһында балалар ҡурҡыта торған мифик заттарҙың береһе. Уны ялбыр сәсле, йөнтәҫ бер әбей ҡиәфәтендә күҙ алдына килтереү таралған. «Зөлпәкәй әбей килә, Зөлпәкәй әпкитә, Зөлпәкәй ишетеп ҡалмаһын, илаһаң, Зөлпәкәйгә бирәм», – тигән һүҙҙәр әле лә һаҡланған.

Холҡо менән Зөлпәкәй ендәргә оҡшаған. Ул да баланы семтеп уйнарға ярата. Семтеп, өрөп уйнатҡанда бала үлеп тә ҡуйыуы ихтимал, тиҙәр.

Килеп сығышы яғынан Зөлпәкәй һүҙе төрки сығанаҡлы ел, елпеү һүҙҙәре менән бәйле булырға тейеш.

***ЗЫЯРАТ ЭЙӘҺЕ.*** Диалекттарҙа зыярат ене, зыярат хужаһы, зыярат уты, зыярат һаҡсыһы тигән атамалар ҙа осрай. Ышаныуҙар буйынса, зыярат эйәһе зыяратта яманлыҡ ҡылған кешеләргә яза бирә. Шуға зыяратта йоҡларға, ҡысҡырып һөйләшергә, төкөрөргә, ашарға, эсергә, таштарҙы, ҡәберҙәрҙе тапарға, урларға, эсендә бесән сабырға, ерләк йыйырға, оло һәм кесе ярау итергә ярамай. Әгәр ошо һәм башҡа тыйыуҙарҙы боҙһаң, тән тартыша, аяҡтан ҡалаһың һәм оҙаҡ та ятмай үләһең. Зыярат эйәһе ҡәберлекте убырҙан һәм башҡа яман заттарҙан да һаҡлай.

Зыярат эйәһенең атамаһы ғәрәп сығанаҡлы *зыярат* һәм төрки һүҙе *эйәнән* тора.

***ЗӘХМӘТ.*** Ышаныуҙар буйынса, ен-шайтандар килтергән ауырыу эйәһенең исеме. Башҡорт телендә зәхмәт ҡағылған, зәхмәт тейеү, ерҙең зәхмәте, үләт зәхмәте, бирән зәхмәте, зәхмәт һуҡҡыр, зәхмәтле бала, зәхмәтле урын тигән һүҙбәйләнештәрҙә ҡулланыла.

Килеп сығышы яғынан был һүҙ – ғәрәп һүҙе һәм «ауырыу эйәһе», «яман эйә» мәғәнәһендә ҡулланыла. Зәхмәт эйәһе ғәҙәттә кешегә күренмәй. Бик һирәк себен сүрәтендә осрай. Зәхмәт ғәҙәттә, зәхмәтле ергә йығылыуҙан, зәхмәтле кешенең еле ҡағылыуҙан, сабып килгән ат-

тың еленән, мәйет һыуы түккән, мал һуйған ерҙән, ҡыҙыл эңерҙә килеп ингән кешенән тейә. Ышаныуҙарҙа Ел зәхмәте, Һыу зәхмәте, Ер зәхмәте осрай. Башҡорт ышаныуҙарында зәхмәт менән бәйле *зәхмәт һыпырыуы* тигән төшөнсә бар. Зәхмәт һыпырыуы тураһында Стәрлебаш районында ошондай материал яҙып алынды:

«Төшөмдә таныш бер әбей ошайтып-ошайтып һыпырҙы билемдән. Ике, өс көн дә йөрөмәнем хушһыҙ булып ҡойолдом. Беренсе баламды тапҡайным, икенсеһе шулай ҡойолдо. Шул бала төшөүҙе зәхмәт һыпырған тиҙәр беҙҙә».

*(М.Яҡупова. Ибраҡай ауылы).*

Башҡорт магик медицинаһында зәхмәт тейгән ауырыуҙы йүнәлтеү өсөн төрлө саралар бар. Мәҫәлән, Ҡариҙел районында зәхмәтте имләгәндә ҡояш байыған ишек алдында берәй таҙа, кеше бик йөрөмәгән ергә ҡаҙаҡ ҡағалар һәм күлдәк иҙеүе аша шуға тоҙ һибеп, түбәндәге әфсен һамағын әйтәләр:

Ер атасы, ер инәсе,  
Тотҡан булсаң, ебәр,  
Син шундай матур,  
Син шундай сибәр,  
Мин сиңә ашын бирермен,  
Мин сиңә балын бирермен,  
Син миңә саулыҡ бир,  
Син миңә йомшаҡлыҡ бир!

*(Ғ.Муллаярова. Муллаҡай ауылы, Н.Ғәлиева. Иҫке Бағаҙы ауылы).*

Шишмә районы Суҡраҡлы ауылында зәхмәт сиренән кешенең буйына үлсәп еп алалар, шуны энәгә урап, ергә күмеп имләйҙәр.

Башҡорт халыҡ ижадында ла ер зәхмәтен имләү сараһы сағылыш тапҡан: «Ҡояш байыған, ер зәхмәте ята. Шул ваҡыт йығылһаң, ер зәхмәте ҡағыла. Уның сирен бер дауа менән дә алдырып булмай. Бала сирләмәһен өсөн шул урынға баланы «бес» иттерәләр, көл һалалар. Ошо ваҡыт әйтемләп торалар:

– Ер анаһы ерән һаҡал,  
Һыу анаһы көрән һаҡал,  
Мине тотма, шуны тот!  
Мине тотма, шуны тот!

Шунан шым ғына алға китәһең, боролорға ярамай. Бер аҙ ул һинең артыңдан ҡыштырҙап-ҡыштырҙап килә. Өйгә ҡайтып еткәнсе,

һөйләшмәҫкә, хатта тамаҡ та ҡырмаҫка кәрәк. Ергә көл һалғанда, «бисмилла» тип әйтергә ярамай. Юғиһә, сир үҙеңә кире йоға.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Үрҙә күрһәтелгән ысулдарҙан тыш зәхмәттән доғалар уҡып, өшкөрөп, ишек тотҡаһын сайҡап эсереп, өтәҫләп йүнәлтәләр.

Зәхмәт ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

*ЗӘҢГЕ.* Башҡорт мифологияһында ауырыу эйәһе атамаһы. Уның башҡорт телендә, диалекттарҙа зәңгә, Зәңгә бабай, зәңнә, зәңлә, сеңгә, сеңнә, сингә, сеңнә, сингә, зәңгәлә, зәмбәлә, дәңгәлә, тупалама тигән варианттары бар. Ышаныуҙар буйынса, яҙ, көндәр йылығас, зәңгә ауырыуы көсәйеп китә икән. Ул ғәҙәттә кешенең тешенә, аяғына йәбешә, тиҙәр. Был ауырыуға рациональ һәм магик дауалау ысулдары ҡулланыла. Сағыштырығыҙ: «Алтымбайҙың яҙ аяғы һыҙҙаны. Нимәгә һыҙҙағанын да белмәйбеҙ инде. Бер Сафура тигән инәй килеп ҡараны ла: «Был зәңгәлә белән ыҙалап ята», – тине. «Торна шалҡаны тап», – тине. Әсәйем әллә ҡайҙан торна шалҡанын әпкилеп, таш менән иҙҙе шуны, терканан үткәргән һымаҡ итеп. Шул нәмә менән Алтынбайҙың аяғын ыуҙы. Иҙгәндә, ыуғанда, әллә нәмәһен уҡый ҙа ине. Шулайтып уҡый-уҡый ыуып, аҡҡан һыуына аяғын баҫтырып ултыртып ҡуйғайны, йүнәлеп китте. Шунан аҙаҡ шул һыҙҙаманы. Бер аҙна аяҡһыҙ ятҡан ҡустым һин дә мин аттаны ла китте.

*(Ғ.Хисамитдинова. Белорет р-ны, Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Зәңге ауырыуын булдырмаҫ өсөн халыҡта төрлө ырымдар ҙа йәшәй. Мәҫәлән, тәүге еләк-емеш, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, йыуа ашағанда: «Иҫке ауыҙ, яңы аш, зәңгә сире минән ҡас» тигән һүҙҙәр әйтеп иһаһайлап кешәнәү халыҡта әле лә йәшәй. Зәңгә ауырыуын булдырмаҫ өсөн шулай уҡ май айында, кәкүк саҡырған саҡта, өс йомортҡа ашайҙар йәки йомортҡа турап кесерткән һурпаһын эсәләр.

Зәңгә һүҙе һәм уның фонетик варианттары цинга һүҙенә барып тоташа.

*ИБЛИС.* Башҡорт мифологияһына ислам дине менән килеп ингән образ. Уны китаптарҙа аш-шайтан да тиҙәр.

Ышаныуҙар буйынса, кешене бөтә яманлыҡтарға Иблис ҡоторта икән. Илеш районынан алынған материалда Иблис, уның тәбиғәте ту-

раһында бына нимә тиеләә: «Кешегә Иблис эйәреп йөрөй тиләр. Аламалыҡҡа ҡоторта икән, мәхлүк. Аны Аллаһы тәғәлә ожмахтан ҡыуған тип һөйләйҙәр».

*(Х.Мөхәмәтова. Сүлте ауылы).*

Ысынлап та Ҡөрьән буйынса, Иблис тәүҙә фәрештә булған. Башҡа фәрештәләр менән бергә Алла янында ожмахта йәшәгән. Аллаһы тәғәлә Әҙәмде барлыҡҡа килтергәс, бөтә фәрештәләргә лә уның алдында баш эйергә ҡушҡан. Алла әмерен Иблис фәрештәнән башҡаһы бөтәһе лә үтәй. Иблис кенә «Мине, Хоҙайым уттан, ә уны балсыҡтан яһағанһың. Нисек итеп мин уның алдында баш эйәйем!» – тип Алла һүҙен тыңламай. Бының өсөн уны Алла ожмахтан ҡыуа. Шул замандан алып ул ерҙә: бысраҡ урындарҙа, мунсала, зыяраттарҙа, баҙҙарҙа йәшәй икән. Ҡыуылыуына үс итеп Әҙәм балаларын юлдан, имандан яҙҙыра, аҙҙыра, гөнаһтарға этәй. Иблис ҡотҡоһо арҡаһында Әҙәм менән Һауа ла күктән ергә ҡыуыла. Быларҙың барыһы өсөн дә Иблисте яза көтә. Ахыры заман еткәс ул бөтә гөнаһлы кешеләр менән бергә йәһәннәмгә ебәреләсәк. Әммә ахыры заман еткәнсә ул шарап эсеп, ҡорбан ашап, бейеп, йырлап, кешеләрҙе юлдан, имандан яҙҙырып, ен-шайтандар тыуҙырып йәшәп ятасаҡ.

Башҡорт телендә иблис һүҙе күсмә мәғәнәлә лә ҡулланыла. Алдаҡсы, насар, мут кешене лә Иблис тиҙәр.

Килеп сығышы яғынан Иблис ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

***ИСЕМ.*** Ышаныуҙар буйынса, кешенең дүрт йәне була. Исем – шуларҙың береһе. Ышаныуҙар буйынса, бала тыуғас та, уға йүргәк исеме ҡушырға кәрәк. Исем ҡушмаһаң, баланы шайтан алмаштыра тиҙәр. Йүргәк исеменән һуң оҙаҡҡа һуҙмай аҙан әйтеп балаға *ысын исем* ҡушалар кәрәк. Ышаныуҙар буйынса, йәш бала хатта исем һорап илай ҙа икән. Шуға аҙанһыҙ бала илаһа, исем һорап илай тиҙәр. Исем ышаныуҙар буйынса, баланы һаҡлай, тәбиғәтен, киләсәген билдәләй. Мәҫәлән, Таштимер, Булат, Йәноҙаҡ, Бүребай, Этбикә кеүек исемдәр бала ауырымаһын, үлмәһен тип ҡушылған, йәғни һаҡлау функцияһын үтәгән. Гүзәл, Аҡһылыу, Гөлназ һ.б. исемдәр ҡыҙҙар матур, наҙлы булһын тип ҡушыла. Ышаныуҙар буйынса, исем кешенең яҙмышын да билдәләй икән. Шул сәбәпле күп ғаиләләрҙә балаларына бай, бөйөк, бәхетле булһын тип Байгилде, Солтан, Бәхет, Ырыҫҡол тигән исемдәр ҡушылған. Исем хатта баланың һаулығына ла тәьҫир итә ала тип уйлағандар. Шуға миң сыҡһа, кешегә «миңле» исем бирелгән. Ғаиләлә балалар күп булһа, исем

ярҙамында тыуымды туҡтатырға тырышҡандар. Мәҫәлән, Туҡтағол, Туҡтабикә, Кинйәғол, Кинйәһылыу, Кинйәбикә тигән исемдәр башҡа бала булдырмауҙы теләп ҡушылған. Хатта теге доньяға ла баланы исемһеҙ ебәрмәгәндәр. Тыуғас та үлгән балалар Абдулла, Фатима тип исемләп ерләгән. Исем менән ен-шайтанды алдарға ла тырышҡандар. Мәҫәлән, Сулпан, Сәрүәр, Ямал, Кинйәсолтан, Йыһан, Ишсолтан, Алтын кеүек исемле балаларҙы шайтан алмаштыра алмай икән. Сөнки ул «Был бала ҡыҙмы, малаймы?» – тип аптырап йөрөгән арала таң ата ла ҡуя икән һәм баланың ата-әсәһе бала янына килә икән. Аҙанлы бала илаһа, исемен яратмай, исемен ҡабул итмәй, тип, яңы исем ҡушыу йолаһы ла булған.

Ҡайһы бер исемдәрҙе шайтан исеме тип ҡушырға тыйғандар. Мәҫәлән, ҡайһы бер төбәктәрҙә Бикә, Әнәс шайтан исемдәре һаналған. Уларҙы ҡушыу әле лә тыйыла.

Исем һүҙе менән башҡорт телендә бик күп мәҡәл һәм әйтемдәр, фразеологик берәмектәр бар. Сағыштырығыҙ: исем ҡушыу, исем яңыртыу, исем итеп, исеме оло, исем күтәреү, исеме сығыу, исем һатыу, исемең юғалыу, яҡшы исем малдан артыҡ; саҡырғандың исеме оло; арыҫлан үлһә – тиреһе ҡала, кеше үлһә – исеме ҡала. һ.б. башҡорттарҙың мифологик ҡараштары сағылыш тапҡан.

Исем ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

***ИМӘЛТӘ.*** Ышаныуҙар буйынса, балаға күҙ теймәһен, ауырыһа им булһын, ғаиләлә бала үлеп торһа, яңы тыуған бала йәшәһен, торһон, тип; килен алғанда, ҡыҙ биргәндә йәштәр бәхетле, ырыҫлы булһын, тип, өйҙән өйгә йөрөп сепрәк киҫәктәре йыйырға кәрәк. Уларҙан ҡорап тегелгән әйбер имәлтәне була. Уны ғәҙәттә имәлтә таяғына тағалар. Имәлтәне бәғзе төбәктәрҙә ҡырҡ, бәғзеләрендә ете өйҙән йыйғандар. Функцияһы менән имәлтә ҡот, бетеү, өләш һүҙҙәренә тура килә.

Башҡорт телендә имәлтә күлдәк, имәлтә кәпәс, имәлтә юрған, имәлтә бишмәт, имәлтә йыйыу, имәлтә биреү, имәлтә таяғы тигән һүҙбәйләнештәр бар. Үрҙә килтерелгән һүҙбәйләнештәр имәлтәнең һаҡлау, ҡурсалау, өләшлә итеү функцияһына эйә икәнлеген күрһәтә.

Килеп сығышы яғынан имәлтә төрки сығанаҡлы *һүҙ* һәм ***им, имләү, имсе*** һүҙҙәре менән тамырҙаш булырға тейеш.

***ЙЕЛПЕҮ.*** Диалекттарҙа сарпыу, сарфыу, шарфыу варианттары бар. Ышаныуҙар буйынса, йелпеү – ауырыу эйәһе. Ул ғәҙәттә күҙгә күренмәй. Күберәк ҡыҙыл эңерҙә йылы ел, ямғыр, ҡойон булып килеп һуғыла. Шуға ла башҡорттар ҡыҙыл эңерҙә ятырға, йоҡларға, яланбаш йөрөргә, уй-

нарға, ергә ултырырға ҡушмайҙар. Йелпеү бигерәк тә йәш бала, имеҙгән йәки ауырлы ҡатын-ҡыҙ өсөн ҡурҡыныс икән. Шуға ла ҡыҙыл эңерҙә йәш балалы йәки ауырлы ҡатын булған өйгә инергә ҡушмайҙар.

Йелпеү шулай уҡ ауырыу кешенең, сабып килгән аттың еле менән дә килеп һуғыла икән.

Ышаныуҙар буйынса, йелпеү ҡайһы бер осраҡта һайыҫҡан, һары бүрекле, йәшел һаҡаллы ҡарт булып та күренә тиҙәр. Шуға Бөрйән районы башҡорттары кәртә-ҡура тирәһендә һайыҫҡан күрһә, уға таш ырғытып, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтә:

Шыҡыр-шыҡыр һайыҫҡан,
Ике аяғың тайышҡан,
Изге булһаң, ҡунып кит,
Ауырыу булһаң, осоп кит.
*(Г.Ишдәүләтова. Бөрйән р-ны, Тимер ауылы).*

Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс ауырыу ғәҙәттә осоп китә икән. Ҡойон менән килгән йелпеүҙән (сарпыуҙан) һаҡланыр өсөн ҡойонға бысаҡ, балта ташлап, махсус магик һүҙҙәр әйткәндәр:

Ҡара йыланды ҡамсы ит,
Үҙ ҡарындашыңды бисә ит,
Ҡәһәр һуҡҡан минән кит,
Ауырыуыңды алып кит.
*(Г.Йосопова. Әбйәлил р-ны, Мораҡай ауылы).*

Ҡойонға ләккәндә балта, бысаҡ булмаһа, «балта», «бысаҡ» тигән һүҙҙәрҙе әйтеү ҙә етә тиҙәр.
*(Х.Яманһарина. Меләүез р-ны, Һәргәй ауылы).*

Йелпеү (сарпыу) менән башҡорттар бик күп ауырыуҙарҙы бәйләй. Мәҫәлән, күбәләк башҡорттары эпилепсия, күҙ, ҡолаҡ сарпыуы була тиҙәр.

Йелпеү (сарпыу) ел, ҡойон менән генә түгел, ерҙән ҡалҡҡан боҫ менән дә һуғыла икән.

Ғәҙәттә ул көл, сүп-сар, мәйет һыуы түккән, мал һуйған урындарҙан ҡағыла тиҙәр. Шуға ла мәйет һыуын, көлдө, сүп-сарҙы аяҡ аҫтына түгергә ярамай. Мал һуйған ер ҙә кеше йөрөй торған урын булырға тейеш түгел.

Әгәр ҙә белмәй шундай урындарҙан үтһәң, йығылһаң: «Һиңә – ауырлыҡ, миңә – еңеллек», – тип 3 тапҡыр төкөрөргә ҡушалар. Ҡыҙыл эңерҙә башҡа ерҙә йығылһаң да ошо һүҙҙәрҙе әйтергә кәрәк.

Ерҙән сарпыу ҡағылһа, кеше «ерҙән тейенгән» ауырыуҙар менән ауырый икән. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары бындай ауырыуҙарға енес, аяҡ шеше, бөйөр һ.б. урологик ауырыуҙарҙы индерә. Ышаныуҙар буйынса, «ерҙән тейенгән» ауырыуҙы тик «ергә һалыу» ысулы менән генә бөтөрөп була. Салауат районы башҡорттарында «ергә һалыу» шулай башҡарыла. Һыуҙы банкаға йә стаканға уҡына-уҡына 7 төрҙө әйбер һалына. Был көл, көмөр, иҫке дағанан алынған сөй, еҙ йә көмөш һыныğы, сәс, тырнаҡ, кәрәсин була. Ошо әйберҙәр һалынған банканы ауырыу тирәһенән 3 тапҡыр уратып, ергә көн байыр саҡта кеше йөрөмәгән ергә, берәй соҡорға түгәләр. Ауырыуҙы уратып йөрөгәндә, банкалағы һыуҙы түккәндә, түбәндәге һүҙҙәр әйтелә:

Ер анаһы ерән һаҡал,
Һыу әйәһе һүлпән һаҡал,
(Ғәйшәне)* тотма,
Енде тот,
Ер кендеге бары бер.

Йәки:

***

Ергә йәшел яуҙыҡ,
Миңә иҫәнлек-һаулыҡ.

*(Х.Хурамшина, Салауат р-ны, Иҙелбай ауылы).*

Ел, ер йелпеүенән айырмалы рәүештә, һыу сарпыуы эҫерҙә йылы ямғыр булып тейә икән. Белорет районынан Ғәлиә Хисамитдинова сарпыу тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: «Васпый инәйең бушанғандан һуң ҡәйнәһе менән тышҡа сыҡҡан буған. Тышта ул ҡәйнәһенә: «Ҡалай йылы ғына ямғыр яуып тора», – ти икән. Ҡәйнәһе аптырап: «Ниндәй ямғыр? Юҡсы, ямғыр яумай бит», – ти. Тыштан ингәс тә инәйең ауырып киткән быуылып, ауыҙынан күбеге лә сыға икән. 2–3 тапҡыр шәп мулланы саҡырып өшкөртөп бөтөрҙөләр инәйеңдең быуымаһын».

Сарпыу кешегә предмет булып та күренә тиҙәр. Йопар шешәһенә оҡшап күҙгә күренгән сарпыу тураһында шул уҡ Ғ.Хисамитдинова түбәндәгеләрҙе һөйләне: «Бер Игеназ тигән инәй Золхоя ҡоҙағый менән Рәхмәткә китеп барған. Оло зыяратҡа еткәс Игеназ инәй: «Уй, тороп тор әле, еңгә, мынауында ҡалай бер йәмде генә йопар шешәһе ята. Алайым әле Сәлимәгә, уйнатыр», – тип аттан төшкән дә шешәне алған. Шул ыңғайы быуылып ауырып та киткән. Ҡайтҡас, йәмде шешәне Сәлимәгә

* ауырыған кешенең исеме әйтелә

бирәйем тиһә, теге юҡ икән. Золхоя ҡоҙағыйҙың әйтеүе буйынса, сарпыу шулай күренгән Игеназ инәйгә».

Йелпеү (сарпыу) ҡағылһа, уны осоҡлап, ергә һалып, өшкөрөп, имләп, махсус һүҙҙәр менән арбап бөтөрәләр. Түбәндә Мәләүез районында яҙып алынған арбау килтерелә.

1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 – тупраҡҡа,
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7 – елгә, һыуға,
1, 2, 3, 4, 5 – бөтһөн, китһен,
1, 2, 3 – осһон, китһен,
1 – бер ҙә ҡалмаһын.
*(Н.Исмәғилева. Меләүез р-ны, Һыртлан ауылы).*

Арбауҙың йөкмәткеһенә ҡарағанда, сарпыу (йелпеү) эйәһен ергә, һыуға, елгә ҡыуалар. Ошонан сығып, уның йәшәү урыны ошо өс стихия икәнен тағы бер тапҡыр иҫбатларға була.

Йелпеү атамаһы боронғо төрки ҡомартҡыларҙа осраған *jelpiq* тигән ауырыу эйәһенең исемен хәтерләтә. Был ике һүҙ ҙә *ел (jel)* тамыры ауырыу, ауырыу эйәһе мәғәнәһендә боронғо төрки ҡомартҡыларҙа, бик күп хәҙерге төрки телдәрҙә осрай.

Сарпыу һүҙе башҡорт теленең ҡыҙыл, миәс һөйләштәрендә киң таралыш алған. Башҡа һөйләштәрҙә, диалекттарҙа осрамай.

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә сарпыуҙың 2 мәғәнәһе бирелгән: 1) ниҙеңдер зыянлы тәьҫире, шауҡымы; 2) ен ҡағылғандан килгән ауырыу. Ике мәғәнәнең дә яҡын булыуы көн кеүек асыҡ. Улар нигеҙендә ниндәйҙер яман тәьҫир, шауҡым ята. Ошонан сығып, сарпыу һүҙенең дә яман зат менән бәйле булыуын иҫбатларға була. Башҡа төрки телдәрҙең һүҙлектәрендә был һүҙ сағылыш тапмаған. Шуға был саф башҡорт һүҙе тип фараз итеп була.

Был һүҙҙең 2 өлөштән тороуы ихтимал: сар һәм пыу. Ошо уҡ сар тамыры сарсыҡ булыу (баланың ен-елпеү һуғылғандан һуң артҡа саңҡайып, тартышып илауы) тигән фразеологик берәмектә лә осрай. Кешенең ҡапыл әсе тауыш менән ҡысҡырып ебәреүен дә башҡорттар сар итеп ҡалды тиҙәр. Нисек кенә булмаһын, *сар* тамыры ла ен-елпеү менән бәйле булыуы ихтимал.

Сарпыу һүҙенең икенсе өлөшө *-пыу* йелпеүҙәге *-пеү* элементының ҡалын варианты булыуы ихтимал. Ошонан сығып, уның да боронғо *jelpiq* һүҙендәге *piq* элементына барып тоташыуын фараз итеп була.

Дөйөм алғанда, йелпеү һәм сарпыуҙың бер үк ауырыу эйәһенең атамаһы булыуын этнографик материал ғына түгел, тел материалы ла иҫбатлай.

***ЙОМА КӨН.*** Башҡорт мифологияһында изге һәм бәрәкәтле көн һанала. Уны оло байрам, изге көн итеп ҡабул итеү башҡорттарға ислам менән килеп ингән.

Йома менән бәйле төрлө ышаныуҙар, тыйыуҙар халыҡта әле лә йәшәй. Мәҫәлән Илеш районы Һеңрән ауылынан алынған материалда ошондай ышаныу сағылыш тапҡан: «Жомға көннө иҙән йуурға ярамай. Бер ҡыз шулай жомға көннө иҙән йууғанда бер бабай (Хызыр Ильяс): «Ниә, бәбекәйем, жомға көннө иҙән йууасың? Сыуыңны эчеп бетер дигән. Теге ҡыҙ эчеп бетергән дә сыйырға әйләнгән».

*(З. Нурисламова. Һеңрән ауылы).*

Факиһа Фәхретдинова ла «Жомға көн – оло бәйрәм бит ул. Әгәр ҙә бу көнне иртән кер, иҙән йуусаң, тән ауырая, чирләп китәсең, кәйеф булмай, тормыш алға бармай», – ти.

*(Ф. Фәхретдинова. Һеңрән ауылы).*

Ошондай ышаныуҙар булыу сәбәпле йоманы башҡорттар элек намаҙ уҡып, ҡымыҙ, сәй эсеп, изге эштәр башҡарып үткәргән. Йомала шулай уҡ ҡыҙ биреү, килен алыу, никахлашыу, балаға исем ҡушыу һ.б. йолалар ҙа атҡарылған.

Башҡортарҙа бигерәк тә ике йома араһы, йәғни кесе йома төштән һуң һәм йома төшкә тиклем изге ваҡыт һанала. Шуның өсөн дә ошо изге ваҡытта әле лә ғәйбәт һатмаҫҡа, хәмер эсмәҫкә, яман эштәр ҡылмаҫҡа тырышалар.

Йома һүҙе килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙ.

***ЙОРТ ЭЙӘҺЕ.*** ҡара: ***өй эйәһе.***

***ЙӨҘЛӨК.*** Башҡорт телендә бөркәнсек, битлек, пәрҙә, фәрҙә, һәрҙә тигән варианттары ла бар. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә йөҙлөк һәм бөркәнсек һүҙҙәренә «карындағы баланы уратып ҡаплаған ярыы» тигән аңлатма бирелгән. Ышаныуҙар буйынса, был предмет баланы һаҡлау, ауырыу-сирҙән йүнәлтеү, ҡотҡарыу көсөнә эйә. Шуға ла йөҙлөктө киптереп баланың бишегенә, кейеменә тағып ҡуйыу йолаһы булған. Стәрлебаш районы Ибраҡай ауылынан Булатова Фатима апай һөйләүе буйынса, йөҙлөк зыяндаш, йәғни быума сире менән ауырыған балаға тағылған. Ир бала булһа, йөҙлөк яғаға, ҡыҙ балаға – ҡултыҡ аҫтына.

Йөҙләк йәки бөркәнсек менән тыуған бала элек-электән өләшлә, бәхетле һаналған. Ундай кешеләргә әүәле Йөҙләк, Йөҙләкәй, Йөҙләкбай, Йөҙләкбикә тигән исемдәр ҡушыу йолаһы булған. Был типтағы исемдәр менән башҡорттар йөҙләккә баланың бәхетен нығытып, билдәләк ҡуйғандар. Йөҙләк йәки бөркәнсек менән бәйле ышаныуҙар менән бер рәттән төрлө ырымдар ҙа осрай. Мәҫәлән Стәрлебаш районы Ибраҡай ауылынан Яҡупова Мөршиҙә апай һөйләүенсә, бөркәнсектең кендектән алған ерен төйөнсәктең аҫтына табан һалһаң, ҡабат бала булмай икән.

Ышаныуҙар буйынса, бәғзе кендек инәләре йөҙләктө түңкәреп күмеп дошман күргән кешеләрен һыңар бала менән генә ҡалдырғандар.

Һуңғылыҡ менән бәйле лә ошондай ышаныуҙар бар. Мәҫәлән, бала булдырмаҫ өсөн һуңғылыҡты түңкәреп, йәғни кендек яғы менән аҫҡа күмгәндәр.

Йөҙләк менән бәйле ышаныуҙар башҡортта ғына түгел, башҡа бик күп халыҡтарҙа ла бар. Мәҫәлән, урыҫтарҙың родился в рубашке тигән фразеологизмы ла ышаныу барлығына ишара яһай. Ошоларҙан сығып йөҙләк менән бәйле ышаныуҙар бик боронғо осорҙарға барып тоташа тип фараз итеп була.

*Йөҙләк, бөркәнсек, битлек* төрки сығанаҡлы һүҙҙәр. Пәрҙә һәм уның диалект варианттары фарсы телдәренә барып тоташа.

***ЙЫЛАН.*** Башҡорт мифологияһында йылан – бик ҡатмарлы образ. Ышаныуҙар буйынса, ул кешегә яҡшылыҡ та, яманлыҡ та ҡыла. Мәҫәлән, аҡ йылан осраған кешегә бәхет, ырыҫ килә икән. Шуға аҡ йылан күрһәң, уның алдына берәй аҡ әйберҙе һалырға кәрәк, тиҙәр. Аҡ әйбергә аҡ йылан мөгөҙөн һала икән. Шул мөгөҙҙө тапҡан кеше бәхетле, ырыҫлы булып китә тиҙәр.

Ышаныуҙар буйынса, туҙбаш йылан да аҡ йылан кеүек изге йән. Ул йәшәгән өй, кәртә-ҡура ҡотло, имен-аман була, тиҙәр. Шуның өсөн хужабикәләр өй нигеҙендә, кәртә-ҡурала йәшәгән туҙбаш йыланға һөт ҡоялар, ем һалалар.

Йыланды изгеләштереп ҡарауҙы шулай уҡ башҡорттар составында йылан исемле ҡәбилә булыуы, кейем-һалымда, ҡаралтыла йылан орнаменты булыуы ла иҫбатлай. Йыландың бик борондан табыныу объекты булыуын Ибн-Фаҙлан яҙмалары ла күрһәтә.

Ышаныуҙар буйынса, йылан итен ашаған кеше донъялағы бөтә тере заттың телен аңлай икән. Йылан менән бәйле ышаныуҙар башҡорт халҡының рациональ һәм магик медицинаһында ла киң ҡулла-

ныла. Беренсенән, башҡа халыҡтар кеүек башҡорттар ҙа борон-борондан йылан ағыуын ҡулланған. Икенсенән, йыланғараҡ тигән шешек сыҡһа, миңһеҙ ҡара йыланды бешереп ашағандар, яндырылған йыландың көлөн бәйләгәндәр, тере көйө һыҙырылған йылан тиреһен япҡандар.

Күҙ ауырыуҙарын имләгәндә лә йылан тиреһе ҡулланылған.

Йылан сағыу, йылан арбау менән дә бәйле ышаныуҙар бар. Ышаныуҙар буйынса, кешене йәки малды саҡҡан йылан һыуға ынтыла икән. Әгәр ул һыуға барып етһә, сағылыусыны ҡотҡарып булмай. Шуға, ышаныуҙар буйынса, йылан һыуға барып етмәҫ борон яраны йыуыу, һыу эсереү, йылан арбаусыға мөрәжәғәт итеү кәрәк.

Ышаныуҙар буйынса, һәр йыландың телендә һәм күҙендә уғы бар. Шул уҡ сағылған кешенең йәки малдың йөрәгенә йүгерә, тиҙәр. Әгәр ҙә уҡ йөрәккә етһә, кеше шешенә, тын ала алмай, һөйләшә алмай, икән. Ваҡытында йылан арбаусыға мөрәжәғәт итмәһә, кеше үлә, тиҙәр. Шулай итеп башҡорт ышаныуҙарында йылан үҙе генә түгел, уның уғы ла магик көскә эйә. Шуның өсөн дә рациональ ысулдар (ағыуҙы һығып, һурып алыу, таралмаһын өсөн ныҡ итеп бәйләү) менән бер рәттән арбауҙар һ.б. магик ысулдар ҡулланыла. Йылан арбау процедураһы кешене йәки берәй малды саҡҡан йыланды махсус доға әйтеп үлтереүгә йүнәлтелгән. Ышаныуҙар буйынса, саҡҡан йыландың исемен әйтеп арбаһалар, ул эсе ярылып үлә икән. Түбәндә Белорет районында яҙып алынған материалдан өҙөк бирелә.

«Атайым бик уҡымышлы мулла кеше ине. Ул өшкөрөп, им-том итеп күп кешеләргә ярҙам итте. Иҫемдә ҡалған миңә 5–6 йәштәрҙә булған бер хәл. Атайыма бер кис колхоз бригадиры өйөр айғырын етәкләп килде. Ул айғырҙы йылан саҡҡан икән. Шул айғырҙы атайым арбаны. Ә иртәнсәк беҙҙең кәртә эсенә бик күп йыландар йыйылғайны. Шунан атайым үҙенең мулла таяғы менән йыландарға һелтәп ебәрҙе. Һелтәгәйне, улар ырғып китте төрлө яҡҡа. Шулай итеп атайым солан ишегенән артҡы ҡапҡаға тиклем юл һалды. Юл һалғас, таяғын артына ҡуйҙы ла урман яғына китте. Теге йыландар сиратҡа баҫҡан һымаҡ теҙелешеп атайымдың артынан эйәрҙеләр. Йыландар бик оҙаҡ ҡына теҙелеште. Атайым күҙҙән юғалды, ә улар һаман китеп бөтмәгәйнеләр әле. Атайым кискә табан ғына ҡайтып инде. Беҙ: «Нишләп оҙаҡ йөрөнөң?» – тип һораныҡ атайымдан. Ул: «Йыландарҙың һәр бер семьяһын өйҙәренә таратып йөрөнөм», – тине. Шунан атайым өйөр айғырын йыландар батшаһы сағыуы турыһында һөйләне. Йыландар батшаһы атайым арбағас эсе ярылып үлгән. Шуға урмандағы бөтә йыландар ҙа беҙҙең

өйгә килгән икән. Әгәр атайым көслө мулла, яҡшы йылан арбаусы булмаһа, йыландар беҙҙе вис ашап бөтөр ине.

Өйөр айғырын саҡҡан йыланды арбағанда атайым әллә ниндәй доғалар уҡый ине. Мин аны иҫләмәйем. Ике ағайым бар, исмаһам береһенә әйтеп ҡалдырмаған шул».

*(З.Илһамова. Инйәр ҡасабаһы).*

Йылан арбағанда махсус доға уҡыла. Уны башҡорттар йылан теле йәки арбау, тиҙәр. Түбәндә бер нисә арбау варианты бирелә.

Бисмилаһи-р рахман-р рәхим,
Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Ҡаулан ҡашлы ҡара йылан,
Ҡатҡан башлы саба йылан,
Ҡылдан нескә үткер йылан,
Атҡан уҡты еткер, йылан,
Аҡҡан һыуҙы үткәр, йылан,
Кәрәҙ, кәрәҙ, кәрәҙ йылан,
Сән, сән йылан, сән йылан,
Сәндән яман бән йылан,
Вә инәккә ҡат, йылан!

***

Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке башлы ҡара йылан,
Атҡан уҡтан етеҙ йылан,
Ағын һыуҙан ауан йылан,
Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан,
Сағыр булһаң, саҡ, йылан,
Саҡмаҫ булһаң, ят йылан,
Нух пәйғәмбәр хөрмәтенә
Ятҡан ерҙә ҡат йылан
Ятҡан ерҙә тибрән (Әл), йылан!

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Өҫтә килтерелгән арбауҙарҙа бик борондан килгән һүҙҙәр менән бер рәттән ислам менән килеп ингән элементтар ҙа бар. Мәҫәлән, Нух пәйғәмбәр, бисмиллаһи-р рахман-р рәхим, сән, сәндин, бән keүек китап формалары. Текст мәғәнәүи яҡтан да ике өлөшкә бүленә. Килтерелгән 2 арбауҙың да тәүге өлөшөндә йылан маҡтала, ә икенсеһендә уны ҡурҡытырға, буйһондорорға, үлтерергә тырышыу һиҙелә. Ошоларҙан сы-

ғып арбауҙың тәүге өлөшө исламға тиклем йыланды изгеләштергән, уға табынған саҡта барлыҡҡа килгән тип әйтеп була. Ә ислам таралып киткәс, боронғо башҡа тәңреләр, тотемдар кеүек йылан да дошман итеп иғлан ителә. Ошо ваҡыттарҙа: «Йылан – дошман ул. Үлтермәһәң, ҡәбереңә килә», «Йыландың ағы ла – йылан, ҡараһы ла – йылан», – тигән әйтемдәр, ышаныуҙар барлыҡҡа килгән булырға тейеш.

Шулай итеп башҡорт мифологияһында йылан менән бәйле ышаныуҙар 2 ҡатламдан тора: исламға тиклемге һәм ислам дине таралғас барлыҡҡа килгән ышаныуҙарҙан.

Йылан һүҙе менән башҡорт телендә бик күп һүҙбәйләнештәр, мәҡәл һәм әйтемдәр, йомаҡ һәм һынамыштар бар: йылан аяғы, йылан мөгөҙө, йылан мөгөҙө алыу, йылан теле, ҡуйында йылан аҫрау, йәне теләгән йылан ите ашаған; төшөңдә ҡара йылан күрһәң, кафыр дошманың була; йыландың ағы ла, ҡараһы ла йылан һ.б.

Йылан һүҙе килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ЙӘЙ, ЙӘЙ ТӘҢРЕ.*** Ибн-Фаҙлан яҙмаларында башҡа тәңреләр менән бер рәттән башҡорттарҙың Йәй тәңреһе (йәй эйәһе, йәй хужаһы) тураһында ла һүҙ бара. Йәй тәңре менән бәйле ышаныуҙар башҡорттарҙың исламғаса тиклемге осорона барып тоташа. Ислам дине ингәс, Йәй тәңре башҡа тәңреләр кеүек үк юҡҡа сыға. Тик телдә, халыҡ ижады әҫәрҙәрендә генә уның ҡайһы бер ремекттары тороп ҡалған. Мәҫәлән, телдәге ***йәй башы, көлә-көлә йәй килә, йәйҙең өйө киң, йәй ҡышты туйҙыра*** һ.б. кеүек һүҙбәйләнештәр йәйҙе ҡасандыр башҡорттар йәнле итеп ҡабул итеүенә ишара яһай. Билдәле булыуынса боронғо төркиҙәр йәй менән яҙҙы айырмағандар. Йәй һәм яҙ һүҙҙәре лә боронғо бер тамырға барып тоташа. Төрки телдәрендәге й~ҙ~д~т өндәре сиратлашыуын иҫәпкә алһаҡ йәй һәм яҙ (йаҙ) бер үк тамыр икәнлеген күреп була. Шуның өсөн башҡорт телендәге ***яҙ башы, яҙ килә, яҙ арттан бер тотам ҡалмай; илай-илай яҙ була; яҙ киреләнһә, көҙҙән яман*** кеүек һүҙбәйләнештәр, сағыштырыуҙар ҙа йәйҙе/йаҙҙы ҡасандыр йәнләндереп ҡарауға ишара яһай.

Йәй/йаҙ килеп сығышы яғанан төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ЙӘЙТАШ.*** Башҡорт телендә йәш ташы, ямғыр ташы, ҡолонташ тигән исемдәр менән дә йөрөй. Ышаныуҙар буйынса, йәйташ ярҙамында ямғыр яуҙырыу, ямғыр туҡтатып була икән. Башҡорттарҙа 3 төрлө йәйташ таралған. Беренсеһе – урман ситтәрендә, тауҙа ятҡан һынташ кеүек ҙур таштар. Бындай таштар Белорет, Архангель, Ғафури район-

арында теркәлгән. Ышаныуҙар буйынса, ошо ташҡа һуҡһаң, бер ярығын алып һыуға һалһаң, ямғыр яуа икән. Ямғыр оҙаҡҡа китһә, ярыҡты кире урынына ҡуйып, ташты май менән һылап ҡуйырға кәрәк. Шунан ғына ямғыр туҡтап, көн аяҙып китә, тиҙәр. Икенсе төрлө йәйташар тураһында Хәйбулла, Йылайыр, Баймаҡ райондарында йыйылған иатериалдар һөйләй. Был райондарҙа Йәйташ-ямғыр таш тип һаҡарҙан алынған ваҡ таштарҙы әйтәләр. Ямғыр яуҙырыу өсөн ошо ташарҙы һаҡмарға һалалар. Туҡтатыу өсөн таштарҙы һыуҙан алып, кипереп, майлап, аҡ ҡулъяулыҡҡа төрөп ҡараңғы ергә һалып ҡуялар. Әбйәлил, Учалы яҡтарында йәйташ тип ҡоштоң бүркәтәүенән шымаып сыҡҡан ваҡ ҡына таштарҙы әйтәләр. Ямғыр яуҙырыу өсөн уларҙы а һыуға һалыу, туҡтатыу өсөн – һыуҙан алыу мотлаҡ һанала. Ямғыр аштары менән һәр кем булыша алмай, сөнки ямғыр яуҙырыу һәм туҡатыу өсөн доғаларын да белеү мөһим. Ахыры, шул боронғо доғалар алдығы балалар фольклорында тороп ҡалған. Сағыштырығыҙ:

Яу, яу, ямғырым,
Ҡара тәкә һуйырмын.
Ингән, сыҡҡан балдарға,
Туҡ исәген бирермен.

Йәйташ һүҙе һәм уның менән бәйле йолалар боронғо төрки, монол, һун традицияларына барып тоташа. В.Радлов М.Ҡашғари, А.Инан ҫәрҙәрендә сағылыш тапҡан боронғо Яда-таш менән башҡорттоң Йәй ташы бер сығанаҡҡа барып тоташыуы бәхәсһеҙ.

***ЙӘН.*** Башҡорт ышаныуҙарында йән кешенең төп рухы һанала. Ул әр ваҡыт кеше менән бергә була икән. Үлгәндә, йоҡола, һуш юғалтҡанда әндән айырылып осоп та китә икән. Осҡан йәндең кешегә кире ҡайтыуы а ихтимал. Шуға ла башҡорттар һыуға батҡан кешене сығарғас, яр уйына һала, һыуҙан уның ауыҙына бәй йәки таҫма тарта һәм ошондай үҙҙәр әйтә: «Йәнкәй, ҡайт, йәнкәй, ҡайт, ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты, һин ә ҡайт».

Осоп киткән йәндең кире ҡайтыуына ышаныу мәйет күтәү йолаһында ла сағылыш тапҡан. Мәйет күтәү йолаһының хәҙерге мәғәнәһе шуан ғибәрәт. Үлгән кеше эргәһендә ғәҙәттә бер нисә кеше ултыра, Көрьәндән сүрәләр уҡый. Ышаныуҙар буйынса, был процедура йәнгә еге донъяға күсергә ярҙам итә икән. Был ышаныу ислам дине менән илеп инергә тейеш. Беҙҙең ҡарамаҡҡа был йола ике ҡатламдан тора. Әгәр өҫкө ҡатлам ислам менән бәйле булһа, төптә – исламға тиклем

булған ышаныуҙар, ҡараштар һаҡланып ҡалырға тейеш. Беренсенән, быны *«күтөү»* һүҙе үҙе иҫбатлай, сөнки уның төп мәғәнәләренең береһе, урыҫса әйткәндә, ждать. Икенсенән, халыҡ ижады әҫәрҙәрендә үлгән йәки үле кеүек йоҡлаған батырҙы ла көтөү йолаһы бар. Мәҫәлән, ышаныуҙар буйынса, кеше үлгәс, уның йәне сыға һәм осоп китә. Йән сыҡҡанда ҡан сәсрәй икән, шуға мәйет сыҡҡас өйҙө стеналары менән йыуып алырға кәрәк тиҙәр. 40 көнгә тиклем йән алыҫ китмәй: өй тирәһендә, үлгәндең туғандары, ҡәрҙәштәре янында осоп йөрөй икән. Өйҙә йәнгә ҡуныр өсөн ишек башына ағас сөй ҡағалар, таба (май) еҫе сығарып йәймә, ҡоймаҡ бешерәләр. 40 көндән һуң йән осоп китә икән. Яҡындарына, өйөнә инде ул йомала ғына ҡайта тиҙәр. Шуға ла йома көнө башҡорттар йәймә, ҡоймаҡ, бауырһаҡ бешерә, уларҙы балаларға тарата, ҡарт-ҡороға, муллаға, етем-еһергә, ғәриптәргә хәйер бирә. Әгәр ҙә быны аткармаһаң, үлгән кешенең рухы өлөшһөҙ илап китә һәм убырға әүерелә икән.

Башҡорт телендә *йән* һүҙе менән бик күп фразеологик берәмектәр бар: *йәнен усына ҡыҫып, йән алҡымға килеү, йән ере, йәнде ҡулға тотоп, йәне йөрәк төбөндә, йән көйөү, йән өшөү, йән һөймәҫ, йән тартыу, йән биреү, йән алыу.* Был берәмектәр йәндең материаль бер әйбер кеүек икәнлегенә, уны алып, биреп, тотоп булыуына ишара яһай. Икенсенән, был фразеологик берәмектәр ярҙамында кешелә йәндең урынын билдәләргә була. Әйтәйек, йәне йөрәк төбөндә, йән ере тигән фразеологизмдар йәндең йөрәктә, енес органдарында булыуына ишара яһай.

***ЙӘННӘТ.*** Икенсе төрлө – ожмах. Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән төшөнсә. Ышаныуҙар буйынса, гөнаһһыҙ кешеләр үлгәндән һуң бара торған рәхәт донъя.

Йәннәт бик матур йәшел баҡса икән. Ул үҙе 7 ҡаттан тора. Һәр ҡатында йәм-йәшел ерҙә төрлө-төрлө емештәр үҫә, ҡоштар һайрай, шишмәләр сылтырай. Шишмәләрендә боҙолмай торған һыу, бал һәм һөт аға икән. Кешеләр матур кейемдә йомшаҡ келәмдәр йәйелгән ятаҡтарҙа ята, тиҙәр. Улар янында матур-матур хур ҡыҙҙары тора. Алтын-көмөш һауыттар менән унда йәш егеттәр баллы һыуҙар эсерә, ҡоштар итен ашата, татлы, һутлы емештәр ауыҙ иттерә. Йәннәттә кеше хоҙай менән осраша, әңгәмәләшә ала.

Башҡорт телендә йәннәт һүҙе ожмах мәғәнәһенән тыш күсмә мәғәнәлә, йәғни рәхәт, матур тормош йәки урын төшөнсәһен дә бирә. Телдә урының *йәннәттә булһын, йәнең йәннәттә булһын, йәннәт күлдәге, йәннәт емеше, ожмах ниғмәттәре, ожмах түре, ожмахҡа инеү, ожмах күлдәге, ожмахлы булыу, ожмах әһеле, урынын ожмах ҡылһын* кеүек тәләктәр, һүҙбәйләнештәр бар.

Йәннәт килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙ. Ожмах һүҙенең килеп сығышы тураһында ике ҡараш бар. Беренсе ҡараш, буйынса, ожмах – ул фарсы сығанаҡлы һүҙ. Икенсе ҡараш буйынса, ожмах һүҙе боронғо төрки *uҫ* | *uз* | *uc* «уҙыу, осоу» (үлеү мәғәнәһендә) тамыры менән бәйле.

***ЙӘҺӘННӘМ.*** Икенсе төрлө тамуҡ. Башҡорт мифологияһына йәһәннәм ислам дине менән килеп ингән. Ышаныуҙар буйынса, йәһәннәм гөнаһлы кешеләр үлгәндән һуң яна торған теге донъялағы урын. Йәһәннәмдә гөнаһлы кешеләр сылбыр менән бәйләнгән икән. Кейемдәре уларҙың ыҫмаланан, ашағандары – шайтан ағасы, эскәндәре – ҡайнар һыу. Гөнаһлыларҙың тиреһе янып төшһә, уға хоҙай тәғәлә яңы тире кейҙерә икән. Шулай итеп язалау бер туҡтауһыҙ бара. Кешеләр ауыртыуҙан унда ҡысҡыра, баҡыра, тештәрен шығырлата.

Йәһәннәм 7 ҡаттан тора, тиҙәр. Был ҡаттарға кеше 7 ҡапҡа аша ҡыл кеүек тар, ҡылыс кеүек үткер күпер аша үтә. Гөнаһтарыңа ҡарап йәһәннәмдең 7 ҡатының береһенә төшөп китәһең икән.

Башҡорт теләндә *йәһәннәм уты, йәһәннәмгә оҙатыу, йәһәннәм арты, йәһәннәм аҫты, йәһәннәм төбө, йәһәннәмгә китеү, йәнең йәһәннәмгә киткер, тамуҡ уты, тамуҡта яныу, тамуҡ киҫәүе* кеүек һүҙбәйләнештәр, ҡарғыштар бар.

Йәһәннәм килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙ. Тамуҡ һүҙенә килгәндә инде, был һүҙ төрки сығанаҡлы *tamu, tamuq* һүҙҙәре менән бәйле булыуы ихтимал.

***ЙӘШЕН.*** Диалекттарҙа, халыҡ ижадында йәшен тәңреһе, йәшен эйәһе, йәшен хужасы исемдәре менән дә йөрөй.

Ышаныуҙар буйынса, йәшен кеше, ат, үгеҙ ҡиәфәтендә күктә йәшәгән мифик зат.

Урал аръяғы башҡорттары мифологияһында Йәшен тәңре айғыр ҡиәфәтенә инеп Оло тәңренең ҡушыуы буйынса ерҙә йәшәгән ен-шайтандарҙы, гөнаһтары күбәйгән кешеләрҙе ата.

Көньяҡ башҡорттары ышаныуҙарында йәшендең оҙон сыбыртҡы шартлатып йөрөгән кеше ҡиәфәтендәге мифик зат булыуы сағылыш тапҡан. Сыбыртҡыһын шартлатҡан һайын күктә ялт-йолт итеп уттар уйнай, күк күкрәй икән. Сыбыртҡыһы осонда йомро таш та була. Ҡайһы бер саҡта шул сыбыртҡы осондағы йоморо таш ергә килеп төшә, ағасҡа, өйҙәргә, кешеләргә бәрелә икән. Был осраҡта ағасты, өйҙө, малды, кешене «йәшен һуҡты» тиҙәр.

Сыбыртҡы осондағы йоморо таш ишек-тәҙрәнән, мөрйәнән өйгә килеп инеүе лә ихтимал. Шуға йәшен йәшнәп, күк күкрәй башлаһа «бисмилла» тип ишек-тәҙрәләрҙе, мөрйәне ябырға кәрәк, тиҙәр. Бигерәк тә йәшен тәңреһе ялтыр әйберҙәрҙе (көҙгө, самауыр, батмус), ялан-аяҡ, еңһеҙ кейемле кешеләрҙе яратмай икән. Шуға ла ололар йәшен йәшнәгәндә ялтыр нәмәләрҙе ябырға, еңле кейем кейергә, башҡа яулыҡ ябынырға ҡуша. Йәшен йәшнәп күк күкрәгәнде ололар йәшен тәңреһенең дөбөр-шатыр ен-шайтанды баҫтырыуы менән бәйләй. Ен-шайтандар төрлө урындарға йәшенергә тырыша икән. Улар өйгә, мунсаға, ағас араларына, хатта кеше һәм малдың ҡуйынына ла инә икән. Йәшен тәңреһе яман заттарҙы табып атһа, өйҙө, ағасты, мал-тыуарҙы, кешене «йәшен атты», «йәшен һуҡты» тиҙәр.

Йәшен йәшнәгәндә кешеләр «йәшен доғаһын», «йәшен эпсенен», «йәшен теле» тип йөрөтөлгән һамаҡты ла әйтәләр. Мәҫәлән:

Йәшен-йәшен, кешнәмә
Бер кемде лә тештәмә!
Ямандыҡтар эштәмә,
Бына һиңә биш нәмә!

*(Х.Мостафина. Учалы р-ны, Ҡаҙаккол ауылы).*

Йәшен-йәшен, кешнәмә,
Бер кемне ҙә тешләмә!
Этлек-мазар эшләмә,
Бына сиңә биш нәмә!

*(Ғ.Муллаярова, Муллаҡай ауылы,*
*С.Хөсәйенова. Якуп ауылы Ҡариҙел р-ны).*

Ошо һәм башҡа эпсен варианттарын әйтеп сәс, артыш йә миләш ботағы, энә, еп, тоҙҙо төрлө яҡҡа ташлағандар. Үрҙә килтерелгән эпсендәрҙә йәшен тәңреһенең ат ҡиәфәтендә булыуын «кешнәмә» тигән һүҙ аша бирелә.

Йәшен тәңреһенең башҡорттар тарафынан ат образында ҡабул ителеүен йәшен йәшнәп күк килгәндә йүгән тотоп, шуның ауыҙлығын шылтыратып һамаҡ әйтеү ҙә иҫбатлай:

– Ерҙән ерән айғыр бир,
Күктән күк айғыр бир!
Ерҙән ерән айғыр бир,

Күктән күк айғыр бир!
Ҡорайт! Ҡорайт! Ҡорайт!
*(Т. Ҡолсобаева. Мәләүез р-ны, Һәргәй ауылы).*

Йәшен ат образында булыуына Йылайыр, Баймаҡ, Хәйбулла районларында яҙып алынған йәшен һәм күк күкрәү тураһындағы йомаҡ та ишара яһай. Сағыштырығыҙ:

Һаҡмарҙағы һары айғыр
Һағынып тороп кешнәйҙер,
Битләүҙәге биш бейәм
Бишеһе лә ҡолонлай
Ҡолонлары һары-ала
Йән-яғыма тарала,
Уны күргән кешенең
Зиһенләре тарала.
*(З. Әхмәрова, Йылайыр р-ны, Юлдыбай ауылы,*
*Ф. Килдебаева. Хәйбулла р-ны, Аҡъяр ауылы).*

Йәшен атыу, йәшен һуғыу менән бәйле бик күп тыйыуҙарҙар ҙа бар. Мәҫәлән, йәшен атҡан өйҙө, кәртәне һыу менән һүндерергә ярамай. Һүндереү өсөн ҡатыҡ йә ҡара һыйырҙың һөтө генә барған. Йәшен атҡан өйҙән ағас-ташты, башҡа әйберҙәрҙе алырға, шул урынға яңы өй һалырға ла ярамаған. Йәшен атҡан ағасты утынға йәки төҙөлөш эштәренә алыу тыйылған. Әммә шул ағастың күмере, им-том итеүҙә киң ҡулланылған. Мәҫәлән, йәшен атҡан ағас күмерен яндырып, енләнеп ауырыған кешене төтәҫләгәндәр.
*(З. Мостафин. Учалы р-ны, Ҡаҙаҡкол ауылы).*

Йәшен һүҙе килеп сығышы менән төрки сығанаҡлы һүҙ. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа Jašin тәңре исеме сағылыш тапҡан.

***КЕСЕ ЙОМА.*** Диалекттарҙа көсима, кесе аҙна, бәләкәй аҙна исемдәре менән йөрөй. Башҡорт мифологияһында кесе йома изге көндәрҙән һанала. Был көндө иҙән, кер йыуырға, ғәйбәт, ялған һөйләргә, иҫерткес эсемлектәр эсергә ярамай. Был тыйыуҙарҙы үтәмәгән кешеләр яза ала тиҙәр. Бөрйән районы Гөлнәзирә Мөхәмәтйәнова һөйләүе буйынса, элек Әбделмәмбәт ауылында Хәлбә исемле ҡыҙ йәшәгән. Был ҡыҙыҡай гел генә кесе йомала кер йыуған, ә бысраҡ һыуын юл аша сығарып түгер булған. Бер көндө шул ҡыҙ кер йыуып бысраҡ һыуын түгеп

торғанда, ниндәйҙер имәнес һөйрәлеүсегә әйләнеп, шыуышып киткән. Ололар әйтеүе буйынса, ул ҡыҙ енгә әүерелгән.

*(Г. Мөхәмәтйәнова. Мәһәҙей ауылы).*

Кесе йома көнө төштән һуң ғәйбәт, ялған һөйләгәндәрҙең ауыҙы ҡыйшайыуы, телдән ҡалыуы тураһында ла хөрәфәти хикәйәләр бар.

Кесе йома атамаһы төрки сығанаҡлы *кесе* һәм ғәрәп һүҙе *йоманан* барлыҡҡа килгән.

***КӨН.*** ҡара: ***ҡояш.***

***КҮҘ УҒЫ.*** Ышаныуҙар буйынса, күҙҙең уғы була. Берәй бала, мал-тыуар, ҡош-ҡорт, ағас, сәскә менән һоҡланһаң, күҙҙең уғы килеп ҡаҙала йә тейә тиҙәр. Күҙ тейгән йә күҙеккән кеше, мал, ҡош ауырый, хатта үлә. Ағастар, гөлдәр, игендәр күҙ тейеүҙән ҡорой, һулый. Шуғалыр ҙа башҡорттарҙа: «Күҙ кешене ҡәбергә, малды ҡаҙанға керетер», – тигән әйтем бар.

Ышаныуҙар буйынса, күҙ тейҙермәҫ өсөн күҙ уғына кәртә ҡуялар. Бының өсөн, йәш балаға, малға собханалла тип ҡарарға кәрәк, сөнки был һүҙ күҙ уғына кәртә булып тора. Ҡором да кәртә була, шуға баланың маңлайына ҡором һөртөргә кәрәк. Сабый мендәре аҫтына тимер-томор һалһаң, ул да кәртә була икән.

*(К.Фәтхисламова. Илеш р-ны, Базы-Ҡуян ауылы).*

Күҙ уғына ҡаршы сәскә таҫма, күкрәккә бетеү, булавка, ҡортбаш, ҡаҙ-өйрәк мамығы, баш кейеменә төҫлө муйынсаҡтар, ҡортбаш, ҡабырсаҡ, аҡ мәрйен, тәңкә, ҡолаҡҡа һырға, ҡулға йөҙөк, беләҙек таҡҡандар. Малға күҙ теймәһен өсөн ҡойроғона ҡыҙыл сепрәктән йәки миләштән суҡ, муйынына төрлө сепрәктән муйынсаҡ, ҡолағына тимер алҡа элгәндәр. Ышаныуҙар буйынса, күҙ уғы шул әйберҙәргә ҡаҙала һәм кешегә, малға зыян килтермәй. Быларҙан тыш йәш балаға, малға ҡарап һоҡланыуҙан, маҡтауҙан да тыйғандар. Ҡараған, һоҡланған осраҡта: «Тфү,тфү, күҙ теймәһен! Тфү,тфү, ҡарарлыҡ урыны юҡ!» – тигән һүҙҙәр әйтергә ҡушҡандар.

Балаға кеше ҡарағанда күрһәтмәй генә йоҙроҡ күрһәтеп ултырыу ҙа күҙҙән һаҡлай тиҙәр.

Ҡаты күҙле кешеләргә ололар йәш балаға, мал-тыуарға ҡарарға ҡушмаған. Ҡайһы бер кешеләр күҙҙәренең ҡаты икәнлеген белеп, үҙҙәре ҡарауҙан, һоҡланыуҙан тыйылған.

Шишмә районында яҙып алынған материалда бына нимә тиелә: ҡәйнәмдең дуҫы бар ине. Ул әйтә торғайны: «Бына мин яңы сығып, үҫеп килгән игенгә ҡарамайым. Күҙем ҡорота аны».

*(М.Сәлимйәнова. Бикҡол ауылы).*

Шулай итеп башҡорттарҙа күҙ менән бәйле профилактик ышаныуҙар бик күп булған.

Күҙҙән йүнәлтеү ҙә төрлө ысулдар менән башҡарылған. Иң ябайы ишек тотҡаларын сайып, тәҙрә быуын һөртөп баланың битен йыуыу. Был процедураны башҡарған саҡта: «Ҡара күҙҙән, һоро күҙҙән, зәңгәр күҙҙән», – тип уҡырға кәрәк, сөнки доғаһын уҡымаһаң, файҙаһы булмай икән. Сағыштырығыҙ: «Күҙ тейеп бала илаҫа, тәҙерә тирләрен ҫөртә торғайныҡ. Ишек бауы ҫайҡатып, битенә, ҡулларына ҫөртә торғайныҡ. Беҙнең киленнең балаҫы ҡаҙ өмәҫенән ҫуң илаңы за иланы. «Әй ауыҙы, бер тин аҡса хәҙәре һымаҡ, бигерәк матур бит әле», – тип хатындар ҡарағайны.

Ҡәйнәм йоҡлағайны. Мин тәҙерә ҫуулары ҫөрткән булам инде. Ишек бауларын сайҡатып битенә ҫөртәм. Әлеге доғаҫын уҡымағанға микән, бала тынмай илай ҙа илай. Шунан ҡәйнәмде уяттым. «Тор, бала үлә бит», – тим. Ул тороп доғаҫын уҡып ҫөрткәйне, малай илауҙан туҡтаны, тирләп бешеп, килен ҡулында көйө йоҡлап та китте. Шулай уҡыҫаң бөтә икән.

*(М.Сәлимйәнова. Бикҡол ауылы).*

Күҙ тейһә тағы «эт күкрәген» ябаһың. Был им-том шунан ғибәрәт: «Ҡыш көнө ҡыҙҙың балаһына ҡаты күҙ тейҙе. Ҡаты күҙ тейһә, бала күкрәктән тын ала алмай бит инде. Анан шуныңа шу хәҙәре генә эҫе һыуға ҡамыр баҫаң да, шуны майҙап күкрәккә, йөрәк ауыҙына теймәй генә, ябаң. Ярты сәғәт тотаһың да шуны артың менән генә эткә һалаң. Күҙҙән хатта ярҙам итә. Инәйем шулай имдәй торғайны әүәл».

*(М.Абдуллина. Учалы р-ны, Юлдаш ауылы).*

Күҙ тейеүҙән һөйләшмәгән баланы өшкөрөп йүнәлтеү киң таралған. Шулай уҡ еҫле һабынды өшкөрөп 3 тапҡыр йыуындырғандар, ҡаты күҙле кешенең әйберенең берәй киҫәген, һүрентеһен алып өтәҫләгәндәр.

Шулай итеп күҙгә ҡаршы төрлө ысул-алымдар ҡулланылған.

Күҙ уғы төрки сығанаҡлы *күҙ* һәм *уҡ* һүҙҙәренән барлыҡҡа килгән.

***КҮК. КҮК ТӘҢРЕ.*** Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә *күк* һүҙенә «ерҙән көмбәҙләнеп күренгән һауа, ерҙән юғары тараф», тигән аңлатма бирелгән. Шунда уҡ күккә «йәшен йәшнәүе», «дини ҡарашса, алла фәрештәләр урыны», тиелгән. Күк һүҙе менән башҡорт телендә *күк йөҙө* (бите), *күк килде, күк ҡабағы* тигән фразеологик берәмектәр бар. Был берәмектәр күкте боронғо башҡорттар тарафынан кеше һымаҡ итеп ҡабул ителеүен күрһәтә.

Халыҡта беренсе күк күкрәүен *күк килеү*, тиҙәр. Ышаныуҙар буйынса, «күк килгәндә ҡороҡ менән ергә һуғаһың, *йүгән* алып шылтырата-шылтырата күккә ҡарап болғайһың-болғайһың да ергә һуғаһың. Шулай һуға-һуға, өй, тирмә, аласыҡтарҙы уратып сығаһың, үҙең шулай тип һамаҡлап йөрөйһөң:

Ҡорайт, күгем,
Ҡорайт, күгем!
Ергә бир, илгә бир,
Мал-тыуарға бир,
Ҡош-ҡортҡа бир,
Бала-сағаға бир,
Етем-еһергә бир,
Тол ҡатындарға бир,
Зәғифтәргә бир,
Ауырыуҙарға бир,
Артҡанын миңә бир!»

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Күренеүенсә, Күккә, Күк тәңрегә мөрәжәғәт иткәндә *ҡороҡ, йүгән* ҡулланғандар. Ошонан сығып башҡорттар Күкте ат, йылҡы малы итеп күҙ алдына килтергән тип фараз итеп була. Славяндар күктә күк күкрәтеп үгеҙҙәр, һыйырҙар йөрөй, тип уйлаған. Әгәр ҙә башҡорттарҙың ат йәнле, атҡа табынған халыҡ икәнлеген иҫәпкә алһаҡ, Күктең йылҡы малы итеп ҡабул ителеүе берҙә логиканан ситләшмәй.

X быуат башында Ибн-Фаҙлан яҙып ҡалдырған 12 тәңре араһында Күк тәңреһе лә бар. Ул яҙмала иң бөйөк тәңре тип теркәлә.

Күк тураһында һүҙ алып барғанда, ышаныуҙарҙа уның 7 ҡаттан тороуы билдәле. Илеш районы Тыпый ауылынан З.В.Әхмәтова һөйләүенсә, күктең беренсе ҡаты йәшел зөбәржәттән тора икән, ә фәрештәләр унда әҙәм сифатында йөрөй, ти. Икенсе ҡаты күктең ҡаты ынйынан, ә фәрештәләр унда ат сүрәтендә икән. Өсөнсө ҡаты күктең ҡыҙыл яҡуттан, фәрештәләр бүре сүрәтендә. Дүртенсе ҡаты уның көмөштән, фәреш-

тәләр унда бөркөт сүрәтле икән. Бишенсе ҡаты күктең ҡыҙыл алтындан, фәрештәләр унда хур ҡыҙҙары кеүек, алтынсы ҡаты – һоро яҡуттан, фәрештәләр ир балалар сүрәтендә; етенсе ҡаты нурҙан, фәрештәләр кеше сүрәтле икән.

*(З.В.Әхмәтова. Тыпый ауылы).*

Шулай итеп күк, уның ҡатламдары тураһында ышаныуҙар, мифологик ҡараштар башҡорттарҙа киң таралған. Был ҡараштар ике ҡатламдан тора. Беренсе ҡатлам исламға тиклемге ышаныуҙар, икенсеһе – ислам дине менән килеп ингән.

Күк, үрҙә күрһәтелгәнсә төрки сығанаҡлы һүҙ.

***КӘКҮК.*** Башҡорт мифологияһына ингән ҡош. Халыҡта кәкүк менән бәйле бик күп ышыныуҙар, юрауҙар бар. Мәҫәлән, кәкүк ауылға осоп килһә, янғын сыға; кәкүк йорт-ҡура тирәһендә ултырып ҡысҡырһа, бәхетһеҙлек була йә мал-тыуар ҡазалана, тиҙәр. Шулай уҡ кәкүк ауыл тирәһендә оҙаҡ ҡысҡырып йөрөһә, һуғыш сыға, йот килә. Кәкүк өй өҫтөнән үтһә, ихатаға ҡунып ҡысҡырһа, өйҙән мәйет сыға, тиҙәр. Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә кәкүк моңло, зарлы ҡош итеп һүрәтләнелә. Легендаларҙа Кәкүк бер батырҙың, һыу батшаһы улының исеме. Батыр һәләк булғас, һыу батшаһы улы ғәйеп булғас, уларҙың һөйгән ҡыҙҙары зарығып ҡошҡа әүерелә. Гел генә һөйгәндәренең исемен әйтеп саҡырғас, был ҡоштарҙы халыҡ кәкүк ти.

*(БХИ. Риүәйәттәр һәм легендалар. II т.).*

Башҡорт йолалары араһында Кәкүк сәйе, Кәкүк саҡытыу тигән йолалар булыуы ла кәкүктең ябай ғына ҡош түгеллегенә ишара яһай. Был йолалар кәкүк саҡырыуҙың тәүге көндәрендә башҡарыла. Йөкмәткеһе, барышы менән был ике йола ла тотем ҡошто ололауға йүнәлтелгән. Башҡорт этнонимияһында нәҫел, зат атамаһы булараҡ кәкүк һүҙенең булыуы ла быны иҫбатлай.

*(Р.А.Сиражитдинов. Башкирская этнонимия).*

Башҡорт телендә *кәкүк айы, кәкүк саҡыра, кәкүк ситеге, кәкүк эйеү, кәкүк төкөрөгө, кәкүк сәскәһе* кеүек фразеологик берәмектәрҙең булыуы ла кәкүктең тотем, изге ҡош икәнлегенә инандыра. Өҫтәп шуны әйтеп була, әгәр ҙә башҡорттар кәкүкте моңло, зарлы ҡош итеп йәлләһә, урыҫтар инде уны балаһын ташлап киткән яман ҡатын образында ҡабул итә. Был инде ике халыҡтың ысынбарлыҡты ҡабул итеү үҙенсәлеге.

***ҠАРҒА.*** Ҡарға башҡорт мифологияһына ингән ҡоштарҙың береһе. Беренсенән, быны Ҡарға бутҡаһы, Ҡарға туйы тигән йола-байрамдар булыуы иҫбатлай. Был йола-байрамдар ғәҙәттә яҙ көнө үткәрелгән. Тәүҙә өйҙән-өйгә йөрөп, ярма, һөт, ҡаймаҡ, май, йомортҡа йыйғандар. Йыйыусылар ғәҙәттә түбәндәге һамаҡты ла әйткәндәр:

Ҡарға әйтә: «Ҡар-ҡар,
Туйым етте, бар, бар.
Ярма, күкәй алып бар,
Һөт-майыңды алып бар,
Һин дә ҡалма, әйҙә бар,
Бар, бар, бар!»

Йыйылған ярманан ҡаҙан аҫып бутҡа бешергәндәр. Бутҡаны ашап туйғас бала-саға, мал-тыуырға, ҡош-ҡортҡа именлек, ер-һыуға – шифалы ямғыр, ил-йортҡа – тыныслыҡ теләгәндәр. Шунан ҡалған бутҡаны ҡарғаларға тип, таштарға, ағастарға һалып сыҡҡандар. Ҡарғаларҙы саҡырып: «Ашағыҙ, туйығыҙ, ергә ямғыр килтерегеҙ!» – тип һамаҡлағандар. Шулай итеп ҡарғаны ҙурлап, байрам үткәреп, унан ил-йортҡа именлек теләгәндәр. Был инде ҡарғаны изге ҡош итеп ҡабул итеүҙе күрһәтә.

Икенсенән, ҡарғаны изге, ҡурсалаусы, яҡлаусы зат итеп «Бала-ҡарға» легендаһын да күреп була. Легенда буйынса, ҡаҙаҡтарҙан ҡасып барған ирле-ҡатынлы ике башҡорт балаһын ҡарға ояһына һалып китәләр. Ҡарғалар ул баланы ҡарап, ашатып, ҡурсалап алып ҡалалар. Хатта ата-инәһе кире килгәс, бирмәҫкә лә тырыша улар. Шулай итеп легендала ҡарғалар кеше ҡурсалаусы итеп һүрәтләнә. Былар барыһы ла ҡарғаның тотем булыуын күрһәтә.

***ҠОҘҒОН.*** Башҡорт мифологияһында ҙур урын алған ҡош. Мәҫәлән, «Урал батыр» эпосында ҡара ҡоҙғон батшаның байрағы биҙәге.

Батшаның тыу биҙәге –
Ҡара ҡоҙғон ҡошо бар.

Эпоста шулай уҡ ҡоҙғондарға йылда ҡорбан килтерелә.

Шул ҡоштарҙы йыл һайын
Һыйлай торған көнө бар
Ана, егет, күрәмһең,
Ул ҡоштарҙы беләмһең,

Килеп тауға ҡунғандар,
Ем булырын белгәндәр.
Ҡойоға ҡыҙҙар һалған һуң,
Ҡыҙҙар анда үлгән һуң,
Барын алып ҡойонан
Ҡоҙғондарға ташлайҙар,
Алар шунда шайҙар.

*(БХИ. Эпос).*

Ҡоҙғондоң ябай ҡош түгел икәнлеген халыҡта йәшәгән ышаныуҙарҙан да күреп була. Миҫал өсөн Учалы районында яҙып алынған материалдан өҙөк тәҡдим итеп була. «Йорт араһына ҡоҙғон инһә әүәле ололар: «Ауылда ҡоҙғон оса башлаған, мәйет булыр ахыры», тейҙәр ине. Шул һүҙҙәр хаҡ ине. Үҙебеҙҙең ауылдан булмаһа, ҡырҙан килтереп ҡуя инеләр ауыл зыяратына. Әле лә шулай. Ҡоҙғон осһа, ҡорҡолдай баштаһа, Себер яҡтарынан мәйет апҡайталар!»

*(М.Абдуллина. Юлдаш ауылы).*

Ҡоҙғон ҡорҡолдаһа, ҡысҡырһа өс тапҡыр шулай тиҙәр:

– Ҡоҙғон, ҡоҙғон,
Тамағыңа – таш торһон.

*(БХИ. Эпос).*

Шулай итеп ҡоҙғонға ике төрлө ҡараш бар. Беренсе ҡараш буйынса, ул изге ҡош. Элек уға ҡорбан килтергәндәр. Ҡоҙғон һүҙе, ырыунәҫел атамаһы булып йөрөгән. Сағыштырығыҙ: ҡоҙғон-ҡатай «Ҡоҙғон ҡысҡырһа, ҡорҡолдаһа, ҡыуырға, таш, таяҡ бәрергә ярамай», – тигәндәр. Ул изге ҡош. Үҙе үк: «Ҡолоң! Ҡолоң!» – тип ҡысҡыра, ти. Кеше ҡоло була инде.

Эй, собханалла, ҡошҡайым,
Изге ҡошҡайым,
Хәйерле хәбәргә,
Шатлыҡлы хәбәргә,
Үҙең – ҡиблаға,
Һүҙең хоҙайға,
Ауыҙыңа – һары май,
Изге ҡошҡайым, –

тип әйтергә кәрәк.

*(БХИ. Эпос).*

Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа ҡоҙғон, уның ҡурҡыныс тауышы яман ырым менән бәйләнгән.

*(ДТС. 475-се бит).*

Килеп сығышы яғынан ҡоҙғон төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ҠОРҠОТ. ҠОРҠОТ АТА, ҠОРҠОТ АТАЙ.*** Уғыҙ халыҡтары менән уртаҡ ыңғай образ. Уғыҙ халыҡтарынан айырмалы рәүештә Ҡорҡот ата осҡан ҡотто ҡайтарыуҙа, төрлө ауырыуҙарҙы һ.б. яман заттарҙы ҡыуғанда ҡатнашҡан зат. Сағыштырығыҙ:

Ҡотом әмере буйынса,
Ҡорҡот әмере буйынса.
Ҡорҡот атай, ҡотоң бир
Түлкә атай, ҡотоң бир.
Ҡотом ҡайҙа, мин шунда
Ҡотом ҡайҙа, мин шунда.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Ҡорҡот образы экиәттәрҙә, шәжәрәләрҙә, легендаларҙа ла осрай. Әммә уғыҙ телле халыҡтарға хас булған Ҡорҡот тураһындағы ҙур дастандар башҡорттарҙа юҡ. *Ҡорҡот* һүҙенең килеп сығышы *ҡор* һәм *ҡот* һүҙҙәре менән бәйле булырға тейеш. Быны, беренсенән, Ҡорҡоттоң ҡот ҡайтарыу фольклорында ҡулланыуы иҫбатлай. Икенсенән, боронғо төрки тамыр *ҡор* (башҡортса *ҡур – ҡурсалау*) 'һаҡлау яҡлау' мәғәнәһендә ҡулланыла һәм Ҡорҡот ата функцияларына тура килә. Шулай итеп Ҡорҡот, Ҡорҡот ата образы башҡорт мифологияһында һаҡлаусы, яҡлаусы изге зат. Образдың килеп сығышы уғыҙ ҡәбиләләре менән бәйле булырға тейеш. Билдәле булыуынса, башҡорт эпосының формалашыуында уғыҙ төркиҙәре лә ҡатнашҡан.

***ҠОРО КӨН.*** Башҡорт мифологияһында *шишәмбе* һәм *шәмбе* ҡоро көндәр. Ҡоро көндәр менән бәйле ышаныуҙар халыҡта әле лә йәшәй. Ҡоро көндө, ышаныуҙар буйынса, кер йыуырға ярамай. Илеш районы Фәхретдинова Факия һөйләүе буйынса, «шимбә көн кер юуһаң фәкирлек килтерә; сисәмбелә юсаң – кер күтәрмәй, шул шаҡшы сыуны теге доньяла үзеңә эчерәләр».

*(Ф.Фәхретдинова. Һеңрән ауылы).*

Ҡоро көндө шулай уҡ ҡыҙ бирмәгәндәр, тырнаҡ ҡыркмағындар, яңы әйбер алмағандар, күлдәк-ыштан бесмәгәндәр. Сусҡаның сусҡаһы был көндө: «Бер бөртөк ҡылым да ҡыбырламаҫҡа тейеш», – тип тик ята, ти.

*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, шишәмбе көндө бәрей сихырлай, ти. Шуның өсөн дә яңы эш башлау, нигеҙ ҡороу, никах уҡытыу тыйылған. Был көндө эшләгән эш уңмай, кәйеф ҡырыла, ауырыу-сир баҫа, тормош кирегә китә, тиҙәр ололар.

Ҡоро көн атамаһы төрки сығанаҡлы ҡоро һәм көн һүҙҙәренән тора һәм исламға тиклемге календарға барып тоташа.

***ҠОТ.*** Башҡорт ышаныуҙарында ҡот айырым урын алып тора. Ололар һөйләүе буйынса, ҡот ғәҙәттә кешенең эргәһендә, баш осонда, сәс араһында йөрөй. Ир-ат ҡото уның енес органында ла була икән. Ышаныуҙарға бәйле материалдан тыш быны башҡорт теле лексикаһы ла иҫбатлай. Мәҫәлән, шул уҡ ҡот тамыры йәки уның йомшаҡ варианты ир-аттың енес органы һәм кешенең башҡа тән ағзалары атамаһында осрай.

Кеше ҡурҡһа, ҡото ботҡа китә икән. Ҡото эргәһендә булған кеше ғәҙәттә һөйкөмлө, һау-сәләмәт, бәхетле була. Уның бөтә эштәре ыңғай, уңышлы бара. Уны бәлә-ҡаза, ауырыу-һыҙлау, уңышһыҙлыҡ урап үтә.

Ҡотло кешене башҡорттар өлөшлө кеше, алланың ҡашҡа тәкәһе лә тиҙәр. Бындай кешеләр үҙҙәренә генә түгел, башҡаларға ла ҡот тарата, шуға уларҙы бала ҡото, ырыу ҡото, ауыл ҡото тиҙәр.

Ҡотло, өлөшлө кешеләр менән бер рәттән ҡотһоҙ йәки бәхетһеҙ кешеләр ҙә бар. Ундай кешеләр йыш ауырый, бәлә-ҡазаға тарый; юлға сыҡһа – юлы, эш башлаһа – эше уңмай уларҙың.

Ышаныуҙар буйынса, кеше тыумыштан ҡотло йәки ҡотһоҙ була. Ҡотһоҙ йәки өлөшһөҙ бала ғәҙәттә ауырлы ҡатындың теләгең үтәмәгәндә, ҡарындағы балаһына өлөш бирмәгәндә тыуа икән. Шуға ла башҡорттар ауырлы ҡатындың һәр теләгәнен ашатырға, эсерергә, бирергә тырышалар. Һыйлағанда, ашатҡанда мотлаҡ бала өлөшөн бирәләр. Бирмәһәң, бала ҡотһоҙ, һөмһөҙ, өлөшһөҙ була тиҙәр.

Ҡотло, бәхетле булыуҙы туйҙа уҡ теләйҙәр. Шуға туйҙа ғәҙәттә туйҙарығыҙ ҡотло булһын, нигеҙегеҙ ныҡлы булһын тигән теләк теләйҙәр. Сөнки ҡотло, бәхетле ғаиләлә ҡотло бала тыуа икән.

Ышаныуҙар буйынса, кеше генә түгел, мал-тыуар, ҡош-ҡорт, өй-ҡаралты, кәртә-ҡура, кейем-һалым, аш-һыу ҙа ҡотло йәки ҡотһоҙ була.

Шуға ла бәғзе малды мал ҡото тиҙәр һәм һаҡлап, ҡурсалап торалар. Уны һатырға, һуйырға, һуғырға, эрләргә ярамай икән.

Мал ҡотон ғына түгел, башҡа малды, ҡош-ҡортто һатҡанда, биргәндә лә ҡот китмәһен тип уның ҡултыҡ аҫтынан йөнөн, ҡауырһынын алып ҡалыу йолаһы әле лә һаҡланған. Һатып йәки бүләк итеп алған кеше лә ҡотло, ризалыҡлы мал алыр өсөн хужаларға күлдәк, яулыҡ, таҫтамал кеүек бүләктәр һәм күстәнәстәр менән килә. Һунарға барғанда юл уң булһын тип һунар ҡото йолаһы атҡарыла.

Шулай итеп башҡорт ышаныуҙарында мал, ҡош-ҡорт ҡото ла мөһим урын алып тора.

Һунар магияһы менән *һунар ҡото* тигән һүҙбәйләнеш бәйле.

Өй-ҡаралты, кәртә-ҡура, нигеҙ-тупһа ҡотона ышаныу ҙа башҡорттарҙа бик көслө булған. Быны өй ҡото, нигеҙ ҡото, тупһа ҡото тигән һүҙбәйләнештәр ҙә иҫбатлай. Икенсенән, элегерәк өй тынысһыҙ булһа, ғаилә ағзалары йыш ауырыһа, үлеп торһа йәки башҡа бәлә-ҡаза килһә, нигеҙ алыштырғандар. Миҫал өсөн Хәйбулла районында яҙып алынған материалды килтерергә була: «Беҙҙә бер военкаматта эшләгән ҡатынды үлтерҙеләр. Шунан туғандары өйөн һатырға булғайнылар, бер ҙә кеше алманы, ҡото юҡ тип. Элек тә шул өйҙә торған ҡатын янып үлгән булған икән. Өйгә ҡотло урын һайларға кәрәк. Урын ҡотһоҙ булһа, йә малың үлә, йә ауырыйһ, йә өйөң янып китә, йә берәй балаң үлә, йә нимә».

*(Ә. Усманова. Аҡъяр ауылы).*

Өй нигеҙе ҡотло булһын өсөн өрлөк башына, нигеҙгә көмөш тәңкә, йөн һалыу йолаһы әле лә бар. Ышаныуҙар буйынса, көмөш тәңкә, йөн (төк) ҡот тота икән. «Төклө аяғың менән» (муллыҡ, ырыҫ, бәхет менән мәғәнәһендә) тигән килен ҡаршылағанда әйтелә торған һүҙҙәр ҙә быны иҫбатлай.

Ҡотло, бәхетле нигеҙ өсөн дим башҡорттары Нигеҙ бутҡаһы тигән йола үткәргән. Яңы өйгә күскәс ҡотло өй (өйөгөҙ ҡотло булһын), ҡотло нигеҙ (нигеҙегеҙ ҡотло булһын) теләү әле лә киң таралған. Яңы кейем алғанда, кейгәндә лә ҡотло булыуын теләйҙәр.

Ышаныуҙар буйынса, бәғзе кешенең ҡото оса икән. Сәбәбен ғәҙәттә ҡурҡыуҙа күрәләр. Кеше, бигерәк тә бала нимәнәндер ныҡ ҡурҡһа, уның ҡото осоп китә тиҙәр. Ҡото осҡан кеше ғәҙәттә ҡалтырана, аяҡтан ҡала, хәлһеҙләнә, йөҙөнә ҡыу төҫ инә. Ҡотон ҡайтармаһаң, ул ауырып үлә тиҙәр. Осҡан ҡотто ҡайтарыр өсөн ҡот ҡойоу йолаһы үткәрәләр. Ҡайһы бер яҡтарҙа был йоланы ҡот ҡайтарыу, ҡотайтыу тип тә йөрөтәләр.

Ҡот ҡойоу 2 маҡсат менән үткәрелә. Беренсенән, ҡот ҡойоп кешенең нимәнән ҡурҡҡаны билдәләнә, йәғни диагноз ҡуйыла. Икенсенән, осоп

киткән ҡотто ҡайтарыу маҡсаты ҡуйыла. Ҡот ҡойоу йолаһы әле лә һаҡланған. Шишмә района башҡорттары ҡотто түбәндәгесә ҡоя икән. Баланың өҫтөнә аҡ сепрәкне ошолай ябабыҙ. Шуннан утта ҡот сүмесен йәки табаны ҡыҙҙырабыҙ. Ҡыҙған табаға ҡурғашны ҫалабыҙ ҙа эретәбеҙ шул көйгә. Шуннан баланың өҫтөнә ҫыу белән берәй ҫауыт тотабыҙ ҙа эрегән ҡурғашны ҫалабыҙ. Нәҫтәҙән ҡурҡа бала: эттәнме, песәйҙәнме, шуның ҫүрәте төшә. Бала ҡурҡҫа шулай эшләйҙәр ине әбейләр.

*(С.Йәнгәрәйева. Бикҡол ауылы).*

Нимәнән ҡурҡҡанын билдәләгәс, ҡотто ҡайтарыу процедураһы башлана. Бының өсөн ҡурғаш йөрәк формаһын алғанса ҡоялар. Йөрәк формаһын алғас: «Ҡот урынына ултырған, ҡайтҡан», – тиҙәр. Төшкән ҡотто күн йә ҡалын ҡара сепрәктән өскөл итеп тегелгән тоҡсайға һалып, пациенттың муйынына тағалар. Шишмә районынан М.Сәлимйәнова ҡот һауыты тураһында былай тип һөйләне: «Шул ҡурғашты бер күн нәҫтәгә тегеп тоҡҫай ҫымаҡ итеп муйынына тағып ебәрәҫе баланың. Нисә көнгә таҡҡандарҙыр, аныҫын белмәйем. Бетеү, бетеү итеп өскөлләп тегеп ҡуялар ине аны күн эсенә ҫалып».

*(М.Сәлимйәнова. Бикҡол ауылы).*

Учалы яҡтарында ҡотто түшәктең, яҫтыҡтың бер еренә төйнәп һалып ҡуйыу ҙа таралған.

*(М.Абдуллина. Юлдаш ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, ҡоттоң һүҙе генә түгел, һыуы ла файҙалы икән. Шул һыуҙы эсеү, күҙгә, ҡашҡа, бит-ҡулға һөртөү киң таралған булған. Һөрткәндә «Имем шул булһын», – тиҙәр. Ҡот ҡойғанда ла махсус һүҙҙәр әйтелә. Шишмә районында яҙылған материалда ошондай һүҙҙәр бар:

Имен бир, йүнен бир,
Иҫәннеген бир.
Ҡайт ҡотом, ҡайт.
Ҡайҙа булҫаң, шуннан ҡайт.

Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә бик күп ҡот ҡайтарыу, ҡот саҡырыу һүҙҙәре сағылыш тапҡан. Миҫал итеп ҡайһы берҙәрен килтерергә мөмкин.

Әй һин, ҡотом, һин ҡотом,
Саҡырғанда кил, ҡотом.
Хәстә төштө башыма,
Эйәһен табып бир, ҡотом.

***

Кил, ҡотом, кил,
Бисмиллаһи-р - рахмани-р - рәхим,
Кил, ҡотом, кил!
Мөрйәнән дә кил,
Ишектән дә кил,
Тишектән дә кил!

***

Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Йерҙән осһаң, йерҙән кил,
Эттән осһаң, эттән кил,
Малдан осһаң, малдан кил.
Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Ерҙән осһаң, ерҙән кил,
Һыуҙан осһаң, һыуҙан кил,
Ҡорайт, ҡотом, кил, ҡотом!

*(БХИ. Йола фольклоры).*

Стәрлебаш районында осҡан ҡотто ҡайтарыу өсөн ҡот һалмаһы бешереү йолаһы бар. Ибраҡай ауылы Булатова Фатима менән Мырҙаһитова Бибиямал инәйҙәр ҡот һалмаһы тураһында бына нимә һөйләй: «Ахыры шаршамбыла бер күкәйгә ҡамыр баҫалар. Шуны 41 киҫәккә бүлеп, доғаһын уҡып, һыуҙа бешерәләр ҙә ҡурҡҡан кешегә ашаталар».

*(Ф.Булатова, Б.Мырҙаһитова. Ибраҡай ауылы).*

Ҡот менән бәйле башҡортта Ҡот алып ҡасырыу тигән йола ла бар. Был йола ғәҙәттә ҡыҙ биргәндә, килен алғанда башҡарыла. Йола шунан ғибәрәт: ҡаршы алырға барған кешенең бүркен йәки ат башына махсус бәйләп килтергән яулыҡты, тауарҙы ҡунаҡҡа килгән ҡоҙаларҙың береһе алып ҡаса. Шуны ҡот алып ҡасыу тиҙәр. Ҡаршыға килгән ҡоҙалар ҡунаҡты баҫтырып тоторға тейеш. Хәйбулла, Йылайыр яҡтарында тотҡас ике ҡоҙаға ла бүләк биреү йолаһы бар.

*(З.Аҡбалина, Аҡъяр ауылы; А.Ғәлиәкбәров, Юлдыбай ауылы).*

Башҡорттарҙа шулай уҡ ҡот, ҡотло элементы менән исем ҡушыу йолаһы ла бар. Ата-әсәһе һ.б. яҡындары балаға бәхет, ырыҫ теләп Ҡотло, Ҡотлобай, Ҡотлоғәләм, Ҡотлосура тигән исемдәр ҡушҡан.

Шулай итеп, башҡорт ышаныуҙары буйынса, һәр кешенең, һәр нәмәнең ҡото бар. Ҡот кешегә бәхет, ырыҫ, һаулыҡ, уңыштар килтерә. Ҡот осһа, юғалһа кешенең генә түгел, хатта әйберҙең дә, мал-тыуарҙың да ҡото, ырыҫы, һаулығы китә.

Ҡот һүҙе боронғо ҡомартҡыларҙы йән, рух, бәхет, уңыш мәғәнәһендә ҡулланылған qut һүҙенә барып тоташа.

***ҠОЯШ (КӨН).*** Диалекттарҙа һәм халыҡ ижады әҫәрҙәрендә Ҡояш тәңре, Ҡояш апай, Ҡояш апа, Көн, Көн тәңре исемдәре менән йөрөй.

Башҡорт мифологияһында Ҡояш кеше ҡиәфәтендә бирелә. М.В.Лоссиевский яҙыуы буйынса, Ҡояш диңгеҙҙән сыҡҡан матур һыу эйәһе. Һыуҙан сыҡҡанда уның бер нисә ҡолас һары сәсе һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөй. Ҡулы менән ул күктән йондоҙҙар алып сәстәренә ҡуя икән.

Ысынлап та, башҡорт халыҡ ижадында Ҡояш ғәҙәттә ҡатын-ҡыҙ образында бирелә. Мәҫәлән, «Урал батыр» эпосында Ҡояш менән Ай күк һәм ҡоштар батшаһы Самрауҙың ҡатындары. Балалар ижадында ла ҡояшҡа *Ҡояш апай* тип мөрәжәғәт ителә:

> Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ!
> Һалҡын ағай, кит, кит!

Ҡайһы бер легендаларҙа *Ҡояш* ир-егет образында ла бирелә. Мәҫәлән, легенда буйынса, бөрйән башҡорттары *Ҡояш* нурынан ғүманлы булған ҡыҙҙан таралған.

Шулай итеп был этногенетик легенда буйынса, Ҡояш – ир-егет, ырыу атаһы. Әйтергә кәрәк, Ҡояш нурынан тыуған бала мотивы һун, уйғыр төркиҙәре легендаларында ла осрай.

*Ҡояш* һәм *Көн* менән бәйле башҡорттарҙа төрлө тыйыуҙар ҙа бар. Мәҫәлән, *Ҡояш байығас*, һыуға барырға ярамай. *Ҡояш байығас* өйҙән һөт, аҡса, мал бирергә, ялан баш йөрөргә ярамай. *Ҡояшҡа* төрлө бысраҡтарҙы күрһәтергә ярамай. Шулай уҡ *«Ҡояш сыҡты, ҡояш батты»* тип әйтергә ярамай. Был тыйыуҙарҙы үтәмәһәң, *Ҡояш* ғәрләнә, асыулана, ҡарғай. Мәҫәлән, *«ҡояш сыҡты,» тиһәң, үҙеңдең күҙең сыҡһын,* тип ҡояш ҡарғай, икән.

Ҡояш тотолоу, көндәрҙең эҫе тороуы, ямғыр яумау, ҡоролоҡ та Ҡояштың күмелмәй ятҡан мәйеттәр булыуына асыуланыуы менән бәйләнә. Шуның өсөн, Ҡояш тотолһа – ҡорбан салыу, ямғыр яумаһа – теләк теләү йолалары уҙғарыла. Был йолалар нигеҙендә Ҡояш тәңрене ялбарыу, унан ямғыр, уңыш теләү мотивтары ята.

Шулай итеп, Ҡояш (көн) культы башҡорт йолаларына, ышаныуҙарына, тыйыуҙарына үтеп ингән.

Ҡояш (көн) менән бәйле кеше исемдәре булыуы ла Ҡояш культының ҡасандыр башҡорттарҙа бик көслө булыуын күрһәтә.

Ҡояш (көн) һүҙе боронғо төрки ҡомартҡыларҙа ла осрай. Ҡомартҡыларҙа төркиҙәрҙең Көн тәңре исемле тәңреләр булыуы ла сағылыш тапҡан.

Ҡояшҡа (көнгә) табыныу, уны илаһилаштырыу төрки халыҡтарының барыһының тип әйтерлек ышаныуҙарына хас.

Ҡояш тәңреһе боронғо Шумер, Мысыр, Һиндостан, Америка аборигендары мифологияһы менән бер рәттән хәҙерге Себер, Амур, Сахалин, Австралия, Урта һәм Үҙәк Азия, Урал һәм Волга буйы халыҡтары мифологияһында ла киң таралған образ.

Ҡояш һүҙе менән башҡорт телендә *ҡояш апай, ҡояшым баҡ, ҡояштыр (ант)* һүҙҙәре лә, *ҡояш тыуышы, ҡояш байыу, ҡояш ҡалҡыу* тигән һүҙбәйләнештәр ҙә осрай. Ҡояш һүҙе менән *Ҡояш, Ҡояшбикә, Ҡояшбай* тигән кеше исемдәре лә булған.

Ҡояш һүҙенең синонимы Көн дә башҡорт телендә киң ҡулланыла. Был һүҙ *көнтыуыш, көнбайыш, көнинеш, көн үтеү, көнгә яныу, көн ашау, көнө етеү (ҡатындың бала тыуҙырыу ваҡыты етеү) кеүек һүҙбәйләнештәрҙә һәм Көнбаҡты, Көнһылыу, Көнбикә, Көнсыуаҡ* һымаҡ исемдәр ҙә осрай.

Юғарыла килтерелгән һүҙҙәрҙә һәм һүҙбәйләнештәрҙә Ҡояшты (Көндө) башҡорттарҙың ниндәйҙер осорҙа йәнле итеп ҡабул итеүҙәре сағыла. Ҡояш кеше йәки башҡа йән эйәһе кеүек «тыуа», «ҡалҡа», «ята», «ашай» һ.б.

Ҡояш, Көн, Көн тәңре атамалары төрки сығанаҡлы һүҙҙәр.

***ҠЫТМЫР.*** Диалекттарҙа Кетмер формаһы ла осрай. Башҡорт мифологияһында иң уҫал бәрей йәки шайтан заты. Ул «шайтанның иң кечкенәсе, үҙе бигерәк усал; кешегә, хайуаннарға зыян китерә: кеше аннан сирләй, сыйыр бузауын сала».

*(М.Ғабдуллина. Илеш р-ны, Дөмәй ауылы).*

Башҡорттарҙа эткә Ҡытмыр тип исем ҡушыу йолаһы бар. Ышаныуҙар буйынса, был ҡушамат ен-пәрейҙәрҙе һәм башҡа яман заттарҙы кәртә-ҡураға, өй тирәһенә яҡын ебәрмәҫкә ҡушыла.

Ҡытмыр/Кетмер атамаһы ғәрәп сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш.

***ҠЫШ.*** X быуат башында Ибн-Фаҙлан башҡорттарҙың 12 тәңреһе араһында Ҡыш тәңре (Ҡыш эйәһе, Ҡыш хужаһы) булыуын яҙып ҡалдырған. Әммә бөгөнгө башҡорттарҙа Ҡыш тәңре тураһында ҡайһы

бер генә реликтттар һаҡланып ҡалған. Беренсенән, *ҡыштың бауыры оҙон, ҡыш килде, ҡыш башы, ҡыш ҡорһағы-киң алап* кеүек һүҙбәйләнештәр, мәҡәл һәм әйтемдәр башҡорттарҙың ҡышты йәнләндереп ҡабул итеүен тасуирлай. Икенсенән, йомаҡтар ҙа ҡышты бабай, кеше итеп күрһәтә. Мәҫәлән, *бабай килгән һағынып, аҡ сәкмәнен ябынып.* Ҡыштың атрибуты булған һалҡынды, һыуыҡты ир-ат итеп ҡабул итеү балалар фольклорында ла сағылыш тапҡан. Сағыштырығыҙ:

Ҡояш апай, кил, кил,
Һалҡын ағай, кит, кит.

Шулай итеп, ҡыш боронғо башҡорттарҙың анимизм осоронда барлыҡҡа килгән тәңреләренең береһе. Уны улар ислам дине ингәс онотҡан, тик ҡайһы бер реликттары ғына тороп ҡалған.

***МӨНКИР, НӘНКИР.*** Диалекттарҙа Нәңкер, Мөңкәр, Мәңкер, Мөңкөр варианттары ла осрай. Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән образдар. Ышаныуҙар буйынса, теге донъяла үлгән кешенән һорау ала торған ике фәрештә. Улар, кешене ерләп 40 аҙым киткәс, һорау алырға килә. Хоҙай тәғәләгә ышанған кешеләргә улар теймәй, ә ышанмағандарҙы тамуҡҡа тиклем үк ыҙалата башлайҙар икән. Был ике фәрештәнең исеме халыҡ ижадына ла ингән. Бигерәк тә әжәл, яуап көнөн көтөү, әхирәткә әҙерләнеү менән бәйле һыҡтау-һығыныуҙарҙа Нәнкир менән Мөнкир фәрештәләрҙең исемдәре сағылыш тапҡан. Сағыштырығыҙ:

Һуҙылып мин ятып үлермен,
Еңһеҙ генә күлдәк кейермен.
Нәңкер, Мөңкөр килеп һорау алыр,
Ни нәмә тип яуап бирермен?
Ғазраил алыр йәнемде,
Мәсет ҡарты йыяр тәнемде.
Нәңкер, Мөңкөр килеп һорау алыр,
Кем белер ҙә инде хәлемде.

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Мөнкир һәм Нәнкир атамалары килеп сығышы яғынан ғәрәп сығанаҡлы һүҙҙәр.

Мәскәй ҡан һура, кешене үлтерә. Үлтермәһә лә *мәскәй әбейҙең күңеле* тейә икән. Был осраҡта кеше ауырый. Уны өшкөртөп кенә йүнәлтеп була, тиҙәр.

*(М.Мансурова. Әбйәлил р-ны, Рәхмәт ауылы,*
*З.Аҡбалина. Хәйбулла р-ны, Аҡъяр ауылы).*

Башҡорт мифологияһында мәскәй убыр образын хәтерләтә. Хатта функциялары ғына түгел, һүҙбәйләнештәре лә яҡын. Сағыштырығыҙ: *мәсекәй әбейҙең күңеле тейгән* һәм *убыр күңеле тейеү.* Мәскәй образы Себер татарҙарында киң таралған. Оҡшаш мифик зат бөтә алыҫ көнсығыш халыҡтарында бар.

***НУХ ПӘЙҒӘМБӘР.*** Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән образ. Телдә Ноҡ, Нох варианттары ла осрай. Ышаныуҙар буйынса, Нух Алла тарафынан ебәрелгән пәйғәмбәр. Нухты кешеләр пәйғәмбәр итеп танымай, көләләр, әрләйҙәр. Ул Аллаға мөрәжәғәт итә, ярҙам һорай. Хоҙай уға кәмә төҙөп, шуға бөтә яҡындары менән ултырырға ҡуша. Шунан бөтә донъяға ут, һыу ебәрә, ер тетрәтә. Был ғәрәсәт ваҡытында бөтә кеше һәләк була. Ер йөҙөндә тик Нух пәйғәмбәр менән уның яҡындары ғына тороп ҡала. Сөнки улар Аллаға ышанған, иман тотҡан, яҡшылыҡ эшләгән заттар була.

Башҡорт телендә нух заманы, нох заманы бик боронғо мәғәнәһендә ҡулланылған һүҙбәйләнештәр бар.

Нух пәйғәмбәр исеме, Библиялағы Ной менән бер сығанаҡтан.

***ОЖМАХ.*** ҡара: ***йәннәт.***

***ОСОҠ.*** Башҡорт мифологияһында осоҡ иң яуыз ауырыу эйәһе. Кешегә ул ғәҙәттә ҡатын-ҡыҙ булып күренә. Төрлө «яман» урындарҙан берәй нәмә алһаң, йығылһаң артыңдан эйәрә һәм ауырыта. Төрлө райондарҙа *осоҡ* менән төрлө ауырыуҙарҙы бәйләйҙәр. Мәҫәлән, Бөрйән районында ҡысынманы, Әбйәлил районында быуманы, Ҡариҙелдә ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуын *осоҡ* эйәреүҙән күрәләр. Ололар һөйләүе буйынса, *осоҡтан* тейгән ауырыуҙы тик *осоҡлау* юлы менән йүнәлтеп була. Осоҡлау төрлө ерҙәрҙә төрлөсә башҡарыла. Мәҫәлән, Әбйәлил, Белорет, Учалы райондарында осоҡлау өсөн бер йәки ике ҡурсаҡ эшләнә. Шул ҡурсаҡты ауырыуҙың ҡуйынына өс көн һалып ҡуялар. Өс көн үткәс, ҡурсаҡты йәки ҡурсаҡтарҙы төрлө сепрәк-сапраҡ, икмәк, көл, бөтәһе (ете предмет) менән бергә биҙрәгә һалалар һәм эңерҙә һыу ағымына йәки соҡор-саҡырға алып барып ташлай-

ҙар. Ҡайтҡанда өс өйгә инеп урау юлдан ҡайтып инәләр. Күгәрсен районында ҡысыу йәки тимерәү сыҡһа бер сепрәкте, доға уҡып һыулап алалар ҙа ҡысыуға, унан ергә төртәләр. Шулай итеп әгәр беренсе осраҡта ауырыу ҡурсаҡҡа күсерелһә, икенсеһендә ауырыу сепрәккә, унан ергә күсерелә. Бик ҡыҙыҡ осоҡлау ысулы балаһыҙ ҡатындарҙы имләгәндә ҡулланыла. Был ысулды *бысраҡ эсәк менән осоҡлау* тип атайҙар. Әлеге йоланы атҡарыу өсөн бер малды һуялар. Тиреһен һыҙырмаҫ борон эсен ярып эсәктәрен алалар. Ауырыу ҡатынды иҙән уртаһына ултыртып бысраҡ эсәк менән төрлө яҡлап һуҡҡылайҙар. Шунан һуң эсәкте, ҡатындың бысраған күлдәген систереп алып биҙрә йә башҡа һауытҡа һалып һыу буйына ултыртып китәләр. Ышаныу буйынса, ауырыу бысраҡ эсәккә, күлдәккә эйәреп китә икән.

*(Аңлатмалы һүҙлек картотекаһы).*

Тағы ла бер осоҡлау ысулына туҡталайыҡ. Ғ.Дәүләтшин, Ш.Ғәбдиев яҙмаларында ҡара тауыҡ һуйып осоҡлау тураһында мәғлүмәт бар. Һуйылған тауыҡ менән (ҡайһы бер ерҙәрҙә тере тауыҡ ҡулланыла) ауырыуҙы һуҡҡылайҙар, шунан башынан, биленән өс тапҡыр уратып алалар. Был процедуранан һуң тауыҡты «әйҙәгеҙ минең менән, мин һеҙҙе ҡунаҡҡа алып барам», тип бер соҡорға ташлайҙар. Материалды дөйөмләштереп шундай һығымталар яһарға була: 1). Осоҡлау йолаһының региональ варианттары бар. 2). Шул уҡ ваҡытта бөтә региондарға уртаҡ үҙенсәлек булып ауырыуҙы кешенән нимәгәлер күсереү һәм ҡыуыу тора. Өҫтә әйткәнсә, тәүге осраҡта ауырыуҙы ҡурсаҡҡа, икенсеһендә кейем-һалымға, мал эсәгенә йәки һөйәктәргә, сепрәккә, ҡара тауыҡҡа күсерәләр, шунан ауырыу эйәләре ғәҙәттә йәшәй торған ергә, елгә, һыуға ҡыуалар. 3). Осоҡлау йолаһын үткәргәндә һүҙ магияһы ла ҡулланыла. Һәр регионда тип әйтерлек осоҡлауҙың доғаһы барлығын әйттеләр һәм яҙҙырҙылар. Доғалар мәғәнәүи яҡтан яҡын шуға миҫал өсөн бер нисә генә доға бирелә: Осоҡ булһаң, осоп ҡайт, илеңә ҡайт, һыуыңа ҡайт, ҡайҙан килдең, шунда ҡайт, амин шул булһын; Осоҡ булһаң осоп кит, тауҙан килһәң – тауға кит, таштан килһәң – ташҡа кит, ҡайҙан килдең – шунда кит. Был бахырҙа нейең бар, яр аҫтында өйөң бар. Бар кит, ос! Мине күп этләнең, инде һимеҙ кешегә бар, йомшаҡ түшәклегә бар, тип, ҡағып-һуғып алып китәләр, тиҙәр ололар; Уртаҡ мотив булып осоҡто мотлаҡ ҡыҙыл эңерҙә ташлау, ташлағандан һуң артҡа әйләнеп ҡарамай ҡайтыу, эҙ юғалтыу өсөн бер нисә өйгә инеү һ.б. тора.

Шулай итеп этнографик күҙлектән ҡарағанда осоҡлауҙың бик ҡатмарлы им-том икәнен күрергә мөмкин.

Лингвистик күҙлектән ҡарағанда, осоҡ һүҙҙе бер нисә мәғәнәлә ҡулланылыуы билдәле. Беренсенән, ул ауырыу эйәһе, икенсенән, осоҡлап ташланған ҡурсаҡ, кейем-һалым, тауыҡ. Шулай итеп, ауырыу үҙе һәм ул күскән предмет бер исем менән, йәғни «осоҡ» тип атала.

Осоҡ һүҙенән осоҡсо, осоҡлаусы, осоҡлау һүҙҙәре яһалған һәм уларҙың барыһы ла им-том менән бәйле. Был һүҙҙәрҙән тыш ауырыу мәғәнәһендә ошо уҡ тамыр менән *осоноу, осан, осонған* һүҙҙәре осрай. Ғәҙәттә, ирен, тел, күҙ, тән осоноуҙарын да ниндәйҙер ен, шайтан үбеүе, ялауы менән аңлаталар. Уларҙы ла магик ысул менән бөтөрөргә тырышалар. Мәҫәлән, тел осонғанда: «телем осонған, телем осонған, бесәй артын үп, тфү, тфү, хайран телем хур булды, хур булды», – тип, өс тапҡыр әйтеп имләйҙәр.

Шулай итеп *осоҡ, осоноу* һүҙҙәренең мәғәнәүи яҡтан яҡынлығы күренә. Фонетик һәм морфологик күҙлектән дә осоҡ һәм осоноу араһында уртаҡлыҡ бар.

Был һүҙҙәрҙең уртаҡлығын иҫбатлар өсөн боронғо төрки һүҙлеккә мөрәжәғәт итәйек. Унда учғук һүҙе менән осоноуҙы аңлатҡандар. Был һүҙлектә тапма ауырыуы *учык-йелпик* тип бирелгән. Хәҙерге төрки телдәрҙән *учук* теге йәки был ауырыуҙың атамаһы булып азербайжан, төрөк, төркмән, ҡырғыҙ, үзбәк, уйғыр, ҡаҙаҡ телдәрендә осрай. Төрки телдәрҙән тыш *учук* һүҙе таджик телендә бар. Өҫтә, иҫкә алған телдәрҙә *учук* һүҙе ирен осоноу, ҡан боҙолоу арҡаһында барлыҡҡа килгән тәндәге күк таптар, тәнгә сыҡҡан ҡыҙыл таптар, тәндең төрлө өлөштәренең сабыртып сығыуы, быума, ҡатын-ҡыҙҙар ауырыуҙары, уремия һ.б. мәғәнәлә ҡулланыла.

Ҡырғыҙ телендә учук һүҙе, ҡайры учук – шештең төрө, курчак учук – туберкулез, аҡ учук – кешене ябыҡтырыусы билдәһеҙ ауырыу кеүек ауырыуҙар атамаларында осрай. Ҡырғыҙ телендә учукта тигән этнографик термин да бар. Уның мәғәнәһе – ауырыуҙы боҫ менән, йәғни ҡыҙған тимергә һыу һибеп боҫо менән дауалау. Шул уҡ ваҡытта учуҡта һүҙе ҡурҡытып дауалау мәғәнәһендә лә ҡулланыла.

Төркмәндәрҙә дауалау өсөн ҡорбанға килтерелгән мал да учуҡ тип йөрөтөлә. Шулай итеп осоҡ, учуҡ һүҙҙәре төрки телдәрендә киң таралған. Уларҙың мәғәнәләре бик яҡын, йәки бөтөнләй тура килә.

Төрки телдәрендә учун тигән һүҙ ҙә бар. Уның Э.В.Севортян һүҙлеге буйынса, төп мәғәнәһе кешенең быуылып йығылыуы, ҡапыл ҡурҡып ҡысҡырыуы, тәнгә сабыртып сығыуы.

Шулай итеп учгук, учуҡ һүҙҙәренең нигеҙендә уч йәғни ос тигән тамыр ята. Ошонан сығып башҡорт теленең осоҡ, осоноу һүҙҙәрендә лә шул уҡ ос, йәғни осоп сығыу, ослайып тороп күтәрелеү мәғәнәһендә ҡулланылған ос тамыры ята, тип фараз итергә була. Әйтеп китергә

кәрәк, ошо уҡ тамыр бәлки осраҡ, осрау һүҙҙәрендә лә яталыр. Сөнки мәғәнәүи паралель ныҡ һиҙелә. Осоҡ, осоноу ҙа осраған, табылған, көтөлмәгән, уйланмаған ауырыу.

***ӨҘЛӨК.*** Диалекттарҙа өҙҙөк, өҫтөк, өҫтек варианттары бар. Башҡорт телендә был һүҙ өҙлөк булыу, өҙҙөк тотоу, өҫтек пулыу, өҙлөк төйөү, өзлөк имнәү кеүек һүҙбәйләнештәрҙә осрай. Ҡоншаҡ башҡорттары телендә өҫтөк-өҙөнәк тигән парлы һүҙ составында ҡулланыла.

Ышаныуҙар буйынса, өҙлөк – ул ауырыу эйәһе. Ғәҙәттә ул баланан һуң 40 көнгә тиклем һаҡланмаған ҡатын-ҡыҙҙы тота. Хәйбулла районынан Зөһрә Аҡбалина өҙлөк тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: «40 көнгә тиклем йәш балалы ҡатын-ҡыҙ сабый хөкөмөндә була тиҙәр ине ололар. Уны шуға яңғыҙ өйҙә ҡалдырырға, кәртә-ҡураға, урамға, баҙарға сығарырға ярамай. Ир менән бергә йоҡлау, мунсаға йөрөү ҙә яҙыҡ һаналған. Кеше алдында бала имеҙергә, кейемдәрҙе ялпылдатып, ялан-баш йөрөргә лә ярамай тиҙәр. Ошо тыйыуҙарҙы үтәмәгән ҡатын-ҡыҙға өҙлөк була икән. Минең үҙемә өҙлөк булды. Күкрәктәр шеште. Температура күтәрелде. Тәүҙә белмәнек. Аҙаҡ сәнсеп һыҙлай башлағас ҡына белдек өҙлөк икәнен. Ҡәйнәм Сафура тигән инәйҙе алдыртты. Ул итәгемә өс ерҙән көл төйнәп бәйләне, өшкөрҙө, банка ҡуйҙы. Шунан ғына бөттө теге өҙлөк. Өҙлөк бик яман нәҫтә икән».

*(З.Аҡбалина. Аҡъяр ауылы).*

Өҙлөк булғанда ҡайһы бер ҡатын аяҡһыҙ ҡала, бәғзеләре енләнеп, алмашынып ауырый. Өҙлөктән аяҡһыҙ ҡалыу тураһында түбәндәге материал һөйләй: «Икенсе баламдан һуң мине өҙҙөк тотто. Бушанғандан һуң оҙаҡ ятманым. Көн йылы ине. Торғас һыуға барҙым, малдарҙы ҡараным, мунса яҡтым. Шунан китте аяҡ һыҙҙап. Бөтөндәй аттай алмай баштаным. Атайың ҡәйнәмде әпкилде. Ул ҡорот иҙеп эсерҙе, мунсаға апарҙы. Өҙҙөк тотҡан тип 9 ерҙән көл төйҙө итәгемә. 3–4 көндән аяғымдың шеше ҡайтты. Бөттө шулайтып».

*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлек картотекаһында Бөрйән районында яҙып алынған өҙлөк имләү һамағы бар. Унда берәй ҡатын баланан һуң өҙлөк булып ауырыһа, бер баш, бер кинйә бала икәүләп:

– Инәй, ни алаһың?
– Өҙҙөк алам.
– Инәй, ни эсәһең?
– Өҙҙөк эсәм, – тип өсәр мәртәбә һорап сығалар.

*(Аңлатмалы һүҙлек картотекаһы).*

Мәләүез районында ла «өҙләк төйөү» менән бәйле махсус һамаҡ яҙып алынды. Был һамаҡтың йөкмәткеһе буйынса өҙләк осоп йөрөй. Уны башҡа ауырыу эйәләре кеүек һыуға, елгә, тупраҡҡа ҡыуалар икән. Сағыштырығыҙ:

1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 – тупраҡҡа,
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7 – елгә, һыуға,
1, 2, 3, 4, 5, – бөтһөн, китһен,
1, 2, 3 – осһон, китһен,
1 – бер ҙә ҡалмаһын.

Көл менән бергә, һамаҡтан күреүебеҙсә, «өҙләк төйөү» процедураһында һандар магияһы ла ҡулланыла.

Шулай итеп, им-том итеүҙә бер генә ысул ҡулланылмай. Ҡорот эсереү, банкы һалыу менән бер рәттән көл төйөү, махсус һамаҡ әйтеү, һандар магияһына, баш бала менән кинйә бала көсөнә мөрәжәғәт итеү ҙә өҙләк имләгәндә һәр ауылда тип әйтерлек ҡулланыла.

Үрҙә әйтеп киткәнсә, баланан һуң 40 көнгә тиклем һаҡланмаған ҡатын-ҡыҙ енләнеп тә ауырый. Шуның өсөн ҡырҡы үткәнсә баланы ғына түгел, әсәнең үҙен дә һаҡлау мотлаҡ.

Хәҙерге башҡорт телендә өҙләк һүҙе 2 мәғәнәлә ҡулланыла: 1) бала артынан ҡабаттан ауырыу; 2) йүнәлеп барғанда берәй сәбәп менән ҡабаттан ауырыу. Ике мәғәнәнең нигеҙендә лә ҡабаттан ауырыу ята. Әгәр ҙә икенсе мәғәнәлә ҡабат ауырыу сәбәбе булып һалҡын тейҙереү, ауыр эш башҡарыу торһа, беренсеһендә – ауырыу эйәһе өҙләктөң тотоуы тора. Ошонан сығып, беренсе мәғәнә боронғораҡ тип әйтеп була.

***ӨЙ ЭЙӘҺЕ.*** Башҡорт телендә йорт эйәһе, өй хужаһы, йорт хужаһы тигән атамалар менән дә йөрөй. Башҡорт мифологияһында өй эйәһе кеше ҡиәфәтендәге рух. Ул кешегә зыян килтермәй, киреһенсә ярҙам итә. Мәҫәлән: Илеш районы Һеңрән ауылынан Фәтхетдинова Факия инәй һөйләүе буйынса, өй эйәһе сахар ваҡытында йоҡлап китһә уны уятҡан булған. Стәрлебаш районы Ибраҡай ауылынан Мырҙаһитова Бибиямал апай: «Һәр кемдең төпләнеп торған йортонда була ул эйә. Мине гел: «Һыйырың быҙаулай, Бибиямал», – тип уята торғайны. Бер быҙау, бер бәрәс туңдырманым өй эйәһе арҡаһында. Ул мине бер ваҡыт та ҡурҡытманы ярҙам ғына итте» – тип һөйләй. Йылайыр районынан Ғәлиәкбәрова Рауза өй эйәһенең ауыл эргәһендә туңа башлаған кеше булып: «Мине сығып алығыҙ», – тип ҡысҡырыуын ишеткән. А.Вәлиева өй эйәһе тураһында бына нимәләр яҙып ебәргән: «Өй эйәһе

беҙгә гел яҡшылыҡ эшләгән. 1932 йылда атайымдың бөтә мөлкәтен тартып алғандар. Өйҙө колхоз фермаһына биргәндәр, ләкин унда бер кем дә тыныс йәшәмәгән: өй эйәһе төндәр буйы өй башында йөрөгән, бүрәнәләрҙе һелкеткән, кешеләргә йоҡо бирмәй, төрлөсә йонсотҡан. Шуға унда бер кем дә йәшәмәгән. Атайым: «Яңы өйгә күсенһәгеҙ, әйҙә өй эйәһе, киттек беҙҙән ҡалма, тип әйтегеҙ», – ти торғайны. Әгәр ҙә яңы һалынған өйгә күсенеүселәр булһа: «Өй эйәһе, бергә-бергә татыу, бер-беребеҙгә ярҙам итеп кенә йәшәйек» – тип әйтергә өйрәтә, ине.

*(«Йәшлек». 28.01.1999)*

Б.Мырҙаһитова апай өй эйәһен яңы өйгә эйәртеп алып китеү өсөн әйберҙәрҙе һалғанда: «Әйҙә китәйек, шунда барып торайыҡ, яңы өйгә күсәйек», – тип һөйләнеп торорға кәрәк ти. Мәләүез, Күгәрсен райондарында яҙып алынған материалдар буйынса, өй эйәһе аҡ оҙон кейем кейгән бабай, күрше ҡатын, үлгән туған-тумаса, ҡара бәрәс булып та күренә кешегә. Миҫалға Мәләүез районы Һәргәй ауылы Мәҙинә Ҡунаҡбаеванан яҙып алған материалдан өҙөк килтерергә була. «Бер ҡатын әсәһе үлгәс, уның кейемдәрен йыумай ташлай. Өй эйәһе шул кейемдәрҙе кейеп, үлгән әсә ҡиәфәтендә күренә ҡатынға. Өй эйәһе шулай бер нисә тапҡыр күренгәс, ҡатын ташланған кейемдәрҙе барып ала, йыуа бәғзеләрен һалып ҡуя, бәғзеләрен ололарға, ғәрип-ғорабаға тарата. Шунан һуң ғына үлгән әсә булып күренгән өй эйәһе күренмәй башлай». Шулай итеп башҡорт мифологияһында өй эйәһе кеше ҡиәфәтендә осраған, хужаларын ҡурсалаған, уларға ярҙам иткән нәҙек оҙон аҡ кейемле кеше образында бирелә. Өй эйәһе, ышаныуҙар буйынса, төндә йөрөй, һауыт-һаба йыуа, он, йөн иләй, бәғзе ваҡыт ҡаты һулап, ынғырашып илап ала. Ул, ғәҙәттә, кешеләр менән татыу йәшәй, уларға ярҙам итә. Ошо уҡ сифаттар башҡа төрки телле халыҡтарға хас. Шул уҡ ваҡытта айырма ла һиҙелерлек. Мәҫәлән, башҡорттарҙың өй эйәһе ярҙамсыл, ҡурсалаусы, кешегә бик яҡын булһа, Себер татарҙарында ул яуыз, ҡот осҡос йәмһеҙ зат икән.

Өй эйәһе образы бөтә донъя халыҡтарында осрай һәм боронғо анимизм осорона барып тоташа. Атамаға килгәндә инде ***өй эйәһе*** атамаһының ике өлөшө лә төрки сығанаҡлы ***өй*** һәм ***эйә*** һүҙҙәренән тора.

***ӨЛӨШ.*** Ышаныуҙар буйынса, донъя бер бөтөн. Шул бөтөндән һәр кемгә ***өлөш тейә.*** Кемгәлер яҡшыраҡ ***өлөш төшә,*** уны ***өлөшлө кеше*** тейҙәр. Кемгәлер яман өлөш төшә, уны ***өлөшһөҙ*** тейҙәр. Өлөшлө кеше-

нең эше һәр ваҡыт уң була, ул һөймәлекле, бәхетле була. Бәхетле, өлөшлө кеше хоҙайҙың яратҡан билдәһе һанала. Баланы тыумаҫ борон уҡ өлөшлө йәки өлөшһөҙ итеп була, тиҙәр. Бының өсөн ауырлы ҡатынды һыйлағанда мотлаҡ ҡарындағы бала өлөшөн биреү фарыз. Шулай уҡ ауырлы ҡатындың теләгән ашын ашатырға кәрәк. Сөнки ҡатын теләгән, көҫәгән ашты ашатмаһаң, ҡарындағы бала өлөшһөҙ, ҡотһоҙ булыуы ихтимал. Хоҙай тарафынан бирелгән өлөшөңдө мотлаҡ һаҡларға кәрәк, тиҙәр. Шуға башҡорттар: «*Аша, өлөшөңдө ҡалдырма, өлөшөңдө кешегә бирмә*», – тиҙәр бала-сағаларына. Шул уҡ ваҡытта кеше өлөшөнә инеүҙә яман һанала.

Өлөш кешенең тормошон, яҙмышын билдәләй. Шуға ла башҡорттар: «*Өлөшөңә төшкән көмөшөң*», – тиҙәр.

Өлөш менән бәйле ышаныуҙар, ырымдар бөтә башҡорт йолаларында ла сағылыш тапҡан. Үрҙә бала тыумаҫ борон атҡарылған йола тураһында һүҙ барғайны инде. Хәҙер үлем йолаларының ҡайһы берәүҙәренә туҡтап китәйек. Мәҫәлән, үлеләр өлөшөн хәйер итеп бала-сағаға, муллаға, ҡарт-ҡороға, ғәриптәргә таратыу йолаһы әле лә бар. Ышаныуҙар буйынса 2 йома араһында үлеләр яҡындарына, тыуған-тыумасаларына *өлөш* өмөт итеп килә. Шуға йомала хәйер биреү фарыз. Хәйер бирмәүселәрҙең вафат булған туған-тумасалары, ышаныуҙар буйынса, сатанлап, илап китәләр икән. Улар юлда башҡа эруахтарҙың өлөшөн талап юлбаҫарға әйләнә, тиҙәр. Хәйерҙән тыш йомала таба, май еҫе сығарыу фарыз. Был да үлеләр *өлөшө* икән. Үлеләр өлөшө ерләгәндән һуң өсөн, етеһен, ҡырҡын, йыллығын уҡығанда ла таратыла.

Өлөш төшөнсәһе туй йолаһында ла сағылыш тапҡан. Беренсенән, *өлөш әйтеү* тигән йола бар. Был йола шунан ғибәрәт: йәш киленде күрергә килгән кешеләр ниндәйҙер изге теләктәр әйтеп киленгә бүләк һала. Бында ла киленде өлөшлө итеү идеяһы һалынған.

Өлөш төшөнсәһе Ҡарға бутҡаһы йолаһында ла сағылыш тапҡан. Беренсенән, һәр өйҙән байрамға ярма, йомортҡа, май, һөт һ.б. ашамлыҡтар, йәғни *өлөштәр* йыйыла. Шулай итеп байрамға һәр кем үҙ *өлөшө* менән килә. Икенсенән, йола бутҡаһы бешкәс, һәр кемгә өлөш бүленә. Был өлөш ҡарт-ҡороға, етем-еһергә, хатта ҡарғаларға ла таратыла. Өлөш ағастарға, таштарға ла һалына.

*Өлөш* төшөнсәһе башҡа йолаларҙа ла бар. Мәҫәлән, Ҡорбан салғанда, һуғым һуйғанда ит бөтә күрше-күләнгә, ҡарт-ҡороға, етем-еһергә лә өләшелә. Шулай итеп *өлөш, өләшеү* төшөнсәһе бөтә йолаларҙа ла сағылыш тапҡан. Өлөш һүҙе башҡорт телендә бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла. Был мәғәнәләрҙең барыһында ла тип әйтерлек бер бөтөндөң

киçәге өләшө төшөнсәһе ята. Шул уҡ ваҡытта өләш яҙмыш, бәхет, тәҡдир, ризыҡ, күрәсәк, бойорған, яҙған, хаҡ мәғәнәһендә лә ҡулланыла. Мәҫәлән *ҡыҙ өләшө-нағыш, килен өләшө-һағыш, үҙ өләшөң, үҙ көмөшөң; өләшһөҙ кеше* (бәхетһеҙ).

Өләш һүҙенең ҡылымы *өләшеү* мәғәнәүи яҡтан *таратыу, бүлеү* һүҙҙәре менән яҡын. Шулай итеп, ышаныуҙар буйынса, өләш кешегә юғарынан бүленгән, таратылған яҙмыш.

Өләш һүҙенең килеп сығышын тикшергәндә уның беренсел тамыры *али*кәнлеген әйтеп була. Был тамыр Ә.В.Севортян һүҙлегендә *үлсәү өлгө* (кейем өлгөһө), урысса әйткәндә «выкройка», *үлем* һүҙҙәренең тамырҙары менән яҡынлаштырыла. Был осраҡта, өләш – ул кешегә юғарынан *бүлеп, үлсәп, киçеп өләшелгән, бирелгән ғүмер, яҙмыш, тормош.* Үлсәнеп, бүленеп бирелгән ғүмере, ризығы бөткәс, кеше үлә, тиҙәр.

***ӨРӘК.*** Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә өрәк һүҙенең 2 мәғәнәһе күрһәтелгән: 1) үлгән кешенең шәүлә булып күренә торған рухы, йәне; 2) ҡотто алырлыҡ ҡурҡыныс зат; бапаҡ.

Ышаныуҙар буйынса, өрәк ул үҙ үлеме менән үлмәгән кешенең йәне. Ул кешегә оҙон буйлы, оҙон аҡ кейемле ябыҡ кеше ҡиәфәтендә күренә. Ғәҙәттә *өрәк* тауыш-тынһыҙ ғына төндәрен йөрөй икән. Ул кешегә бик һирәк осрай. Осраһа кеше ауырый икән: һаташа, зәғифләнә йә аҡылдан яҙа. *Өрәк* үлтереүсегә йыш килә, тиҙәр. Ул уның ишеген ҡағып, илап ҡотон ала икән. Йөрөй-йөрөй өрәк үлтереүсене аҡылдан яҙҙыра, үлергә мәжбүр итә.

Шулай итеп, өрәк кешегә зыян килтереүсе мифик зат. Килеп сығышы яғынан өрәк образы һәм һүҙе төрки сығанаҡлы булырға тейеш. Өрәк һүҙе башҡорт теленең *өрәй/ҡот, рух; өркөү/ҡапыл ҡурҡып ҡасыу; өркәк/ҡурҡып тертләп барыусан, өрөү, өрөләү.* Магик дауалау ысулдары һүҙҙәре менән тамырҙаш. Уларҙың уртаҡ тамыры *өр* булырға тейеш. *Өр* тамыры мәғәнәүи яҡтан *йән (рух),* уның сығып китеүе һәм төрлө ысулдар менән кире ҡайтарылыуы менән бәйле.

***ӨСЙӘН.*** Диалекттарҙа осан, өсъян, очан атамалары осрай. Ышаныуҙар буйынса, ауырлы ҡатын эткә йәки башҡа йән эйәһенә типһә, уның балаһына өсйән була. Өс йәнле булһа, баланың бер йәне кеше, ике йәне эт йәне була, тиҙәр. Өсйән баланың эсе өскә бүленеп ята, ул күбә, ҡата, боғорлай. Өсйәнле бала ал-ялһыҙ илай. Ышаныуҙар буйынса, өсйәнде тик им-том менән генә йүнәлтеп, бөтөрөп була. Белорет районы Инйәр ҡасабаһынан Илһамова Зәйтүнә өсйән имләү тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: «Бала илай ҙа илай. Ниңә илағанын да белмәй-

без. Фельдшер килгәйне, ул да сәбәбен әйтә алманы. Шунан ҡәйнәм әбей килтертте. Иң беренсе әбей баланың эсен асып ҡараны, шунан ҡолағын эсенә ҡуйып тыңлап ҡараны. Аҙаҡ: «Өсйән был бала», – тине. «Ике йәнен үлтерергә кәрәк, берәүһе ҡалғас етәр. – Ике йәне – эт йәне, бер йәне генә – кеше йәне», – тине. Эт йәне тураһында мин атайымдан да ишеткәнем бар ине. Шуға әбейгә ышанып дауалауын үтендем. Әбей бик ҡыҙыҡ дауаланы Илүзәне. Тәүҙә ул баланы сисендерҙе, өҫтәлгә һалды, ҡолағын ҡуйып эсен тыңлап ҡараны ла: «Ана шылды» – тине. Минән тыңлатҡанда: «Һөйләнәләрме?» – тине. Шунан әбей яланғас баланы күтәреп өҫтәлгә менеп баҫты. Артабан ул уҡына-уҡына баланың эсен өс тапҡыр өрлөккә тейҙереп алды. Шунан баланы өҫтәлгә һалды ла уның эсенә табаның ҡором яғын 3 тапҡыр тейҙереп алды. Шулай уҡ ауырыған баланың яланғас эсенә 3 тапҡыр атаһының итеген тейҙереп алды. Шунан әбей баланы һыу индерҙе. Һыу индергәндә 3 тапҡыр сайындырҙы. Им-том иткәндә әбей ошо һүҙҙәрҙе ҡабатлап йөрөнө:

Бер – берҙән ҡайтһын,  
Өс – осоп китһен,  
Биш – биҙеп китһен,  
Ете – елгә, ҡуҙға китһен.

Һыу индергәс, әбей баланың күлдәген ишеккә ҡыҫып-ҡыҫып алды. Ҡыҫҡан саҡта ул кемделер яман итеп әрләй һәм ошондай һүҙҙәрҙе ҡабатлай: «Эт йәне, сыҡ, кеше йәне ҡал! Эт йәне сыҡһын, кеше йәне ҡалһын. Ҡәһәр һуҡһын һине, эт йәне. Һиңә бында нимә бар? Бар сыҡ, кит». Шулар балаға бермә-бер килеште. Бала йоҡлап китте. Әбей баланың эсен тағы ла тыңланы. Шунан ул: «Бөгөн бер йәне үлде. Икенсеһе бирешмәй әле. Иртәгә уныһы ла үлер», – тине. Икенсе көн әбей тағы килде. Кисә башҡарған им-томдо тағы ҡабатланы. Бала бөтөнләй иламай башланы. Шунан әбей ҡолағын баланың эсенә ҡуйып оҙаҡ тыңланы. Мине бер нисә тапҡыр тыңлатты. Ул: «Тауыш бармы? Эсе шаулаймы? Тегеләр һөйләнәме?» – тине. Ҡабат-ҡабат тыңлап ҡараным мин, бер ниндәй ҙә тауыш булманы. Шулай итеп әбей балалағы ике эт йәнен дә үлтерҙе, тик кеше йәнен генә ҡалдырҙы.

*(З.Илһамова, Инйәр ҡасабаһы).*

Учалы районының Батал ауылында өсйән имләгәндә күмер ҡулланғандар. Гөлнәфис Ағзамова: «Өсйән буһа, күмер менән төртөп имдәйҙәр», – ти. Имдәгәндә: «Ней төртәң? Өсйән төртәм», – тип 3 тапҡыр ҡабатлайҙар һәм баланың эсенә 3 тапҡыр төртөп алалар».

*(Г.Ағзамова. Батал ауылы).*

Өсйәнде өшкөрөп, олторак менән төркөләп, өшкөртөлгән һыу, сәй йотторол, бысак менән 3 урындан һыҙып, калуш, ир кешенең ойоғо менән һуҡыллап та әтмәлләйҙәр.

Бик ҡыҙыҡ ысул Дим буйы ауылдарында яҙып алынды. Дәүләкән районынан М.Насибуллина өсйән тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: Ҡәйнәм бер көн: «Ҫинең бер кемең дә юҡ, яңғыҙсың», – тине. «Балаға өсйән сығыусан була. Өсйән булҫа, бала илай. Илаҫа, мына Әүәлдең наскийын кей ҙә балаға тип. Типкәндә кирегә һана ла төкөр», – тине. Ҡәйнәм өйрәткәнсе баланы мендәргә һала инем дә: «Туғыҙҙан, һигеҙҙән, етенән, тфү, тфү, тфү», – тип ике яҡҡа төкөрә инем. Бала тынысланып йоҡлап китә ине».

*(М.Насибуллина. Яңы Япар ауылы).*

Ҡыҙыҡ материал яҙып алынған Илеш районы башҡорттарында. Улар өсйәнде *очан* тип атайҙар. Ауырыуҙың сәбәбен улар ҙа ауырлы ҡатындың эткә, бесәйгә тибеүе менән аңлата. Һеңрән ауылынан Фәхретдинова Факия инәй һөйләүе буйынса, элек балаға өсйән/очан булһа, уның эсенә ҡандала ҡаны һөртөп, тараҡ, уҡлау менән эсенә 3 ерҙән төрткөләгәндәр. Им-том иткәндә түбәндәге эпсенде лә әйткәндәр:

Ней булған?<br>
Очан булған.<br>
Бетсен, китсен,<br>
Жилгә очсын.

Ҡариҙел районы Яҡуп ауылынан Хөсәйенова Сәхипъямал инәй һөйләүе буйынса, өсйәнде (ул өсъян ти) йә игеҙ бала тапҡан ҡатын, йә игеҙ һыңары имләй алған. Им-том иткәндә түбәндәге эпсендәр ҙә ҡулланылған икән:

Ай ҡайтты, көн ҡайтты,<br>
Өсъян ҡаста син дә ҡайт,<br>
Име-томо шул былсын.<br>
1, 2, 3, 4, 5, 6, 7,<br>
7, 6, 5, 4, 3, 2, 1.<br>
Берҙән ҡайт,<br>
Ҡайҙан килсәң,<br>
Шуннан ҡайт.

Дим буйы башҡорттарында осан һүҙе лә осрай. Шишмә районы Суҡраҡлы ауылы инәйҙәре һөйләүе буйынса, эс төшөп ауыртһа, уны

осан тиҙәр һәм үрҙә килтерелгән әпсендәргә оҡшаш әпсен әйтеп, өс төрлө әйбер: орсоҡ, ҡайраҡ, энә менән имләйҙәр. Сағыштырығыҙ:

Май кеүек эреҫен,
Көл кеүек туҙҫын,
(Фәләндең) осаны
Эреҫен, туҙҫын,
Име-томо шул булҫын.

Шулай итеп, материалдар күрһәтеүе буйынса, өсйән, осан, өсъян, очан исемле ауырыуҙар эс менән бәйле, ә һүҙҙәр эс ауырыуҙары атамалары булып тора.

Халыҡ этимологияһы буйынса, *өсйән атамаһы* өс һәм йән һүҙҙәренән тора. Әммә өсйән һүҙенең башҡа варианттары *ос* тамырына барып тоташа. Ос тамыры боронғо төрки телендә үлеү, юҡҡа сығыу мәғәнәһендә йөрөгән. Ә парлы *jelvik – исип* һүҙе биҙгәк ауырыу эйәһен аңлатҡан. Хәҙерге башҡорт телендә осраған *осоноу, осколоҡ, осоҡлау* һүҙҙәре лә ауырыу, ауырыуҙы магик ысул менән ҡыуыу мәғәнәһендә йөрөй. Шулай итеп был һүҙҙәрҙең дә тамыры *ос* булырға тейеш. Ошоларҙан сығып, өсйән ауырыуының атамаһы ла *ос* тамырына барып тоташа, тип фараз итеп була. Ни өсөн тигәндә, беренсенән, ул да ауырыу эйәһе исеме, икенсенән, уны ла тик магик ысул менән дауалайҙар, өсөнсөнән, бөтә фонетик варианттары *ос* тамырына бәйле.

***САМРАУ.*** Әкиәттәрҙә сәмреғош. Башҡорт мифологияһында Самрау күктә йәшәгән Оло тәңре, Күк тәңре. Эпоста Самрау ҡоштар батшаһы итеп бирелә. Әммә Ҡояш һәм Ай уның ҡатындары, йәғни Самрау ябай ғына ҡоштар батшаһы түгел икән. Ҡояш менән Айҙан Самрауҙың Һомай һәм Айһылыу исемле ҡыҙҙары бар. Улар йә кеше, йә ҡош ҡиәфәтенә инә ала. Аталары кеүек улар ҙа күрәҙәлек итеү һәләтенә эйә. Шулай итеп ҡыҙҙары ла Самрауҙың ябай түгел, улар ҙа тәңреләр затынан. Самрау күктең генә түгел, ерҙең, ер аҫтының да хужаһы килеп сыға. Шулай итеп Самрау Оло, Баш тәңре булып сыға.

Әкиәттәрҙә осраған сәмреғош та ябай ҡош түгел. Ул да тылсым ға эйә. Беренсенән, ул батырҙың һум ите киҫелеп алған ерен тиҙ генә уңалта. Икенсенән, аҫҡы һәм өҫкө донъяны бәйләй. Шулай итеп сәмреғош та тәңрелек сифаттарына эйә.

Самрау һүҙенең һәм образының килеп сығышын ғалимдар, иран телдәре менән бәйләй. Самрау һәм сәмреғош атамаһындағы сәмре элементы иран халыҡтары мифологияһындағы ҡош исемен хәтерләтә.

***СИРАТ КҮПЕРЕ.*** Башҡорт мифологияһына ислам дине менән килеп ингән сәстән нәҙек, ҡылыстан үткер күпер. Ышаныуҙар буйынса, һәр кем үлгәс ошо күпер аша үтергә тейеш. Гөнаһыҙҙар күперҙе үтеп ожмахҡа инә икән. Аллаһы тәғәләгә ышанмағандар, гөнаһлылар күперҙән үтә алмай тамуҡҡа төшәләр. Шуның өсөн башҡорттар теге донъяға китер алдынан алланан ошо һүҙҙәрҙе әйтеп һорайҙар:

> Сират күперен үткәндә,
> Аяғымды тайҙырма,
> Ғәйшә менән Фатиманы
> Юлдаш ҡыл һин, йә алла.
> *(З.Кәшфетдинова. Әбйәлил р-ны, Рәхмәт ауылы).*

Килеп сығышы яғынан сират күпере ғәрәп сығанаҡлы сират һәм төрки тамырлы күпер һүҙҙәренән тора.

***ТАМУҠ.*** ҡара: ***йәһәннәм.***

***ТАТРАН.*** Башҡорт мифологияһында Татран ҡолаҡ ауырыуы эйәһе. Уны ғәҙәттә ҡыҙ, ҡатын ҡиәфәтендә күҙ алдына килтерәләр. Ышаныуҙар буйынса, татран һыу ингәндә ҡолаҡҡа инә. Шуға бала-сағалар һыуҙан сыҡҡас та бер аяҡта ырғып уны сығарырға тырыша. Ырғыған ваҡытта ошо йәки шуға оҡшаш башҡа магик һүҙҙәрҙе өс тапҡыр әйтәләр:

> – Иләксенең ике ҡыҙы,
> Айыу кеүек көслө ҡыҙ,
> Үгеҙ кеүек сәсле ҡыҙ,
> Татыран күс, татыран ҡас.

Был процедураны, йәғни ҡолаҡтан һыу сығарыуҙы баҡа һыуы сығарыу йәки татрас ҡасырыу тиҙәр.

Әгәр Татран сыҡмаһа, ҡолаҡ эренләй, һыҙлай башлай. Был осраҡта махсус им-том итеүсе саҡырыла һәм Татран ҡыуыу йолаһы баш-

ҡарыла. Татран ҡыуыу бер нисә этаптан тора. Тәүҙә үҙенә күрә «диагноз» ҡуялар, йәғни ауырыуҙың татран икәнлеген, уның ҡайҙан килеүен асыҡлайҙар. Бының өсөн им-том итеүсе:

– Татран тигән татлы ҡош! Өйөң ҡайҙа?

– Ҡумырыҡта.

Шулай тиҙә баланың ҡолағына:

– Көф, көф, көф! – тип өрә.

Шунан Татран эйәһен маҡтап уны күсергә, сығырға өгөтләй башлай. Бының өсөн түбәндәге һүҙҙәрҙе һамаҡлап әйтә:

Иләксенең ике ҡыҙы –
Айыу кеүек көслө ҡыҙ,
Бейә кеүек һөтлө ҡыҙ,
Дөйә кеүек көслө ҡыҙ.
Татран күс, татран күс,
Татран күс!

Әгәр ҙә өгөтләүҙәр ярҙам итмәһә, ҡыуыу процедураһы, йәғни татранды әрләү, яманлау, ҡурҡытыу башлана. Был осраҡта инде бөтөнләй икенсе һүҙҙәр әйтелә. Сағыштырығыҙ:

Тат-тат, татыран,
Татыран, һиңә баҡырам.
Ҡайын күрһәң, ҡайным, тиң,
Ҡабыҡ күрһәң, ҡартым, тиң,
Ҡумырыҡ күрһәң, өйөм, тиң,
Йылан күрһәң, ҡамсым, тиң
Татыран күс, татыран ҡас!
Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты
Татыран ҡолаҡ, һин дә ҡайт!

Ошо һүҙҙәрҙән һуң Татран эйәһе ҡолаҡтан ҡорт ҡиәфәтендә килеп сыға һәм ҡумырыҡҡа, ҡабыҡҡа, ҡайынға күсә, тиҙәр.

Татран һүҙе менән башҡорт телендә *татран булыу, татран ҡыуыу, татран ҡысҡырыу, татран ҡолаҡ* кеүек һүҙбәйләнештәр бар.

Килеп сығышы яғынан татран һүҙе төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш. Беренсенән, уның нигеҙендә татыр ‘тоҙло, ҡаты’ тигән һүҙ ятыуы ихтимал. Шул уҡ ваҡытта *татран ҡыуыу* эпсендәрендә осраған татран исемле ҡош атамаһына лә барып тоташыуы мөмкин.

***ТИМЕР.*** Башҡорт мифологияһында магик көскә эйә булған предмет. Ышаныуҙар буйынса, тимер кешене һаҡлай, ҡурсалай, ауырыу эйәһен, ен-шайтанды ҡурҡыта. Мәҫәлән, баланы яңғыҙ ҡалдырғанда, үлгән кешене күмгәндә өҫтөнә тимер бысаҡ йәки ҡайсы һалыу йолаһы бар. Ҡойон килгәндә, уны әрләп, бысаҡ ташлағандар. Борсаҡ (боҙ) яуғанда тимер һоҫҡо, тәртешкә, шипсе сығарып ташлағандар. Ауырыу эйәһен ҡурҡытыу өсөн тимер һүҙе ҡулланылған һамаҡ әйткәндәр. Сағыштырығыҙ:

Тимер көрәк менән ҡырырмын,
Тимер тырма менән тырмармын,
Ҡырҙым, тырнаҙым, сеперҙем!
Тфү, тфү, тфү!

*(Ғ.Муллаярова. Ҡариҙел р-ны, Муллаҡай ауылы).*

Башҡорттарҙа шулай уҡ балдаҡ, беләҙек, алҡа (һырға) тағыу йолалары ла булған. Был металл әйберҙәр кешене күҙҙән һаҡлай икән тип уйлағандар. Халыҡта хатта: «Балдаҡ, беләҙек – ҡулға пәрҙә, алҡа (һырға) – биткә пәрҙә» – тигән әйтем дә бар.

Тимер әйберҙәрҙән башҡорттарҙа тағы энә менән бәйле ышаныуҙар бар. Миҫал өсөн Белорет районында яҙып алынған материалдан өҙөк килтерергә мөмкин.

«Сәбилә апайым 30 йәштә генә ауырып үлде. Ауырығанда гел әйтеп утыра торғайны: «Төшөңә ҡабат-ҡабат керһәм, төштөгөм насар буһа, магазиндан *энә* ал да, шуны тотонмай утҡа яҡ. Тәүелә ишек үксәһенә һалып һындыр, шунан: «Миңә мишайттап йөрөмә», – тип, утҡа яҡ тине.

*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Тимер менән бәйле тағы кәртә-ҡураға мал зыянланмаһын тип һапһыҙ салғы, һәнәк тығып ҡуйыу йолаһы ла бар. Ышаныуҙар буйынса, тимер әйберҙәр кешене генә түгел, малды ла һаҡлай икән.

Боронораҡ кәртә-ҡурала, өйҙә һәнәк, балта, бысаҡ, көрәк һына башлаһа кешеләр: «Тимер эйәһенә ҡорбан кәрәк», – тип тау башында күк йәки ерән йылҡы салғандар ҡорбан итеп. Ошо ҡорбан ҡаны аҡҡан ергә һынған тимер-томорҙо күмеп ҡуйғандар.

*(Ғ.Хисамитдинова. Яңы Абҙаҡ ауылы).*

Башҡорттарҙың тимер менән бәйле ышаныуҙары боронғо төркиҙәр осорона барып тоташа. Билдәле булыуынса, төрки ҡәбиләләре борон-борондан тимер иретеү, ҡорал ҡойоу менән шөғөлләнгән. Шуның өсөн

башҡа тәңреләр менән бер рәттән төркиҙәрҙә Тимер тәңреһе лә булған тип фараз итеп була. Быны боронғо төркиҙәрҙә Тимербуға, Байтимер, Илтимер, Ҡотлотимер, Биктимер һ.б. исемдәрҙең булыуы ла раҫлай. Икенсенән, боронғо төркиҙәрҙә тимерсе, тимер оҫтаһы изге кешеләрҙән һаналған. Сөнки, ышаныуҙар буйынса, тимерсе уратып алған донъяны, бик күп предметтарҙы булдырыуҙа ҡатнашҡан.

Башҡорт телендә тимер һүҙе менән Тимер ҡаҙыҡ, тимер юл, тимер күк, типһә тимер өҙөрлөк, Тимербай, Тимербулат, Тимерғәли, Тимерғаҙыҡ, Тимерхан, Байтимер, Сынтимер кеүек исемдәр, һүҙбәйләнештәр, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр бар.

Килеп сығышы яғынан башҡорт телендәге тимер төрки сығанаҡлы temir һүҙе менән бәйле.

***ТИРМӘН ЭЙӘҺЕ.*** Диалекттарҙа тирмән инәһе, тирмән хужаһы тигән исемдәр менән йөрөй. Тирмән эйәһе башҡорт ышаныуҙарында онға буялған ялбыр сәсле, ялбыр ҡашлы, оҙон керпекле әбей. Тирмән эйәһе тирмәнде, тирмәнсене, килгән кешеләрҙе һаҡлай, яҡлай, тиҙәр. Ул шулай уҡ ваҡытында ел булдырыуҙы, быуа һайыҡмауҙы ла тәьмин итер. Уға һәр ваҡыт өлөш сығарып торорға кәрәк. Быныӊ өсөн тирмәндә бер аҙ он, иген ҡалдырғандар. Әгәр ҙә ҡалдырһаң, өлөш булһа, тирмән яҡшы эшләгән. Ә инде өлөш сығарғанда, ваҡытында ел булған, тирмән быуаһы һайыҡмаған. Әгәр ҙә быуа һайыҡһа йә йырылып китһә, төньяҡ башҡорттары: «Аналар бозолошто», – тигәндәр.

*(Ғ.Муллаярова. Ҡариҙел р-ны, Муллаҡай ауылы).*

Тирмән эйәһе төрки сығанаҡлы *тирмән* һәм *эйә* һүҙҙәренән тора.

***ТӘҢРЕ.*** Ышаныуҙар буйынса, донъяны бар иткән, уныӊ менән идара иткән, күктә йәшәгән юғары зат, алла, хоҙай. Тәңре күҙгә күренмәй, әммә ир-ат затынан икәнлеге билдәле. X быуат башында башҡорттар менән осрашҡан Ибн-Фаҙлан уларҙыӊ 12 тәңрегә (эйәгә, хужаға) табыныуын әйтеп киткән. 12 тәңре араһында иӊ бөйөгө Күк тәңреһе, ул башҡалар менән берлектә бөтә донъя менән идара итә.

Хәҙерге башҡорт телендә тәңре һүҙе «оло тәңре», «күрше хаҡы-тәңре хаҡы», «тәкә мөгөҙө тәңрегә теймәҫ», «тәңремде ҡырҡма», «Тәңре бирҙе», «Тәңреғол» кеүек һүҙбәйләнештәрҙә, мәҡәл һәм әйтемдәрҙә, кеше исемдәрендә осрай. Әлбиттә, алла һүҙе менән сағыштырғанда тәңре пассив ҡулланылышта икәнлеге күренә. Сәбәбе: ислам дине тәңрелек менән бәйле лексиканы телдән ҡыҫырыҡлап сығарыуҙа.

Тәңре образы һәм һүҙе башҡорттарҙа боронғо төрки осор менән бәйле. Боронғо төрки ҡомартҡыларҙа тәңре һүҙе күк, хоҙай-тәғәлә, юғары көс мәғәнәләрендә ҡулланылған. Төркиҙәрҙең иң бөйөк юғары, илаһи заты ҡомартҡыларҙан Күк тәңре, унан башҡа Ай тәңре, Йәшен тәңре, Ел тәңре, Көн тәңре, Ҡот тәңре һ.б. булыуы билдәле. Шулай итеп, башҡорттарҙың тәңреһе боронғо төрки тәңрегә барып тоташа.

***УБЫР.*** Диалекттарҙа, башҡорт халыҡ ижадында Убыр ҡарсыҡ, Убыр әбей, Убырлы ҡарсыҡ, Убыр ҡатын, Убыр ҡәйнә атамалары осрай. Ышаныуҙар буйынса, Убыр кешенең, малдың елек майын, йөрәген һура, сыхырлай, йота торған мифик зат. Убырҙы икенсе төрлө Мәскәй, Мәскәй әбей ҙә тиҙәр. Башҡорт телендә *убыр һүҙе убырлы ҡарсыҡ, убыр уты, төн убыры, ҡарт убыр, убыр күҙ* кеүек һүҙбәйләнештәрҙә осрай.

Убыр кешегә эт, бесәй, суҡа, утлы йомғаҡ, шар, тәгәрмәс, утлы әҙәм, ут күбәһе булып күренә. Әммә йышыраҡ ул йәмһеҙ ҡарт, әбей ҡиәфәтендә осрай тиҙәр.

Тау башҡорттары ышаныуҙарында, убыр көндөҙ ҡарт бабай, кисен ярғанат ҡиәфәтен ала икән.

Ышаныуҙар буйынса, убырға ясинһыҙ үлгәндәр, сихырсылар, үҙенә-үҙе ҡул һалғандар әйләнә. Убырға осраған кеше ғәҙәттә ауырый, үлә. Бигерәк тә убыр ауырлы ҡатындар өсөн ҡурҡыныс, сөнки ул әсә ҡарынындағы баланы урлай икән.

Убыр мал-тыуарға ла зыян килтерә: һыйырҙар быҙау һала, йәш мал үлә, һыйыр, кәзә елененән ҡан килә.

Убыр зыян килтермәһен өсөн, убырға әйләнгән кешенең ҡәберен аҡтарып, табанына энә ҡаҙайҙар, йөҙтүбән әйләндереп имән сөй менән елкәһенән ҡағалар.

Осоп йөрөгән убырҙың сарпыуы тейеүе ихтимал. Шуға убыр уты күрһәләр, уҡынып: «Кит, юғал, мәлғүн!»– тип төймәләрен, иҙеүҙәрен ысҡындырғандар. Убырлы ҡәберҙең тишегенә имән сөй ҡаҡҡандар. Убыр уты ҡағылһа тоҙ өшкөртәләр ҙә, шуны семтеп кенә ҡояш байышына һипкәндәр. Әгәр һыйыр малына убыр сарпыуы тейһә, көмөш йөҙөк аша һөтөн һауғандар.

Убыр, убыр утына ышаныуҙар халыҡта әле лә йәшәй. Миҫал өсөн Х.Яхиндың «Башҡортостан» гәзитендә 1999 йылдың 23 апрелендә баҫылған мәҡәләһен килтерергә була. Мәҡәлә «Ут күбәһе» тип атала. «Көҙ көнө. Ҡараңғы төшә башлағанда атайым менән бер ауылдан ҡайтырға сыҡтыҡ. Ағиҙел аша һалынған йәйге күпергә етәрәк, алда бәләкәй күбә ҙурлыҡ ике ут күренде.

– Атай, ана күпер яғында ут ялтырап күренә. Юлсылар туҡтап ат ашатамы икән? – тинем.

– Юлсылар яҡҡан утҡа оҡшамай, яҡынайғас күрербеҙ әле. Атты ҡыума, үҙ яйы менән барһын,– тине атайым.

Күпергә яҡынайғас, ат та ниҙер һиҙенгәндәй, яйлай биреп, ҡолаҡтарын торғоҙҙо. Шул саҡ атайым:

– Әҙерәк туҡтап торайыҡ булмаһа, бәлки, юҡ булырҙар, – тигәйне, ут йомғаҡтары күҙ асып йомған арала күперҙең арғы осона күсеп, дөрләп янған кеүек ялтырай башланы. Беҙ, шулай булһа ла, туҡтамай күпергә индек. Ат һаҡ ҡына үҙ яйына алға атланы. Күперҙең яртыһына етеп барғанда ике күбә лә, сәселеп юҡ булды.

– Был нимә, ендәр булдымы икән?– тинем.

– Уларҙы кеше, сүрәтенә инмәгәнен, «убыр уты» тиҙәр. Әлдә беҙгә яҡын килмәнеләр, йә беҙгә, йә атҡа зыяндары тейер ине, – тип ҡуйҙы атайым».

Убыр һүҙе килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш (убыр, убыу, йәғни һурып алыу, йотоу).

***УТ, УТ АНАҺЫ, УТ-УСАҠ ТӘҢРЕҺЕ.*** Башҡорт телендә ут һүҙе менән *ут теле, ут ялмаған, ут ҡапҡан, ут башы, ут ҡыҙ, ут егет, ут күрше, утҡа һөйләү, сығыр уты, уттың ҡулы оҙон, биртек уты, утҡа әйтәм, ут уйнатыу* кеүек һүҙбәйләнештәр бар.

Уттың компоненттары көл, күмер, төтөн, ут менән бәйле усаҡ, усаҡ урыны ла башҡорт телендә һүҙбәйләнештәр һәм мәҡәлдәр биргән. Мәҫәлән: көлө күккә осоу, артынан көл һибеп ҡалыу, көлгә әйләнеү, көлгә аунаһын, көнөн күрһен, көл итеү, көтә-көтә көл булыу, ҡабырғаһы менән көл ташытыу (янау); тере күмер, үле күмер, күмер күҙе, төтөн баҫа, төтөн ашай, төтөнө башҡа (яҡшыраҡ), төтөн сығарыу (йәшәү), эт күҙе төтөн белмәҫ (ояла белмәҫ); усаҡ ашай, ут-усаҡ ҡабул иткән, усаҡ урынына бысраҡ ташлама һ.б.

Шулай итеп, утты, уның компоненттары көлдө, күмерҙе, төтөндө, ут менән бәйле усаҡ урынын башҡорттар шулай уҡ йәнле, изге итеп ҡабул иткән. Шуға ла ут «ашай», «ҡаба», «ялмай», «йота». Уттың башы, теле, ҡулы бар. Утҡа кешегә кеүек «һөйләп», «әйтеп» була. Ә инде көл менән бәйле һүҙбәйләнештәрҙә башҡорттарҙың үлгән кешене яндырыу йолаһы булыуы сағылыш тапҡан. Ысынлап та археологтарҙың фекере буйынса, боронғо Урал ҡәбиләләрендә мәйетте яндырып, көлөн һибеү йолаһы булған. Әммә археологтар уны әлегә башҡорттар менән бәйләгәне юҡ.

Тел материалы иһә, йәғни «көлөң күккә осһон», «артыңдан көл һибеп ҡалам», «артыңдан көл» тигән һүҙбәйләнештәр, мәйетте яндырыу башҡорттарҙың боронғо олата-бабаларында ла булған тип, фараз итергә мөмкинселек бирә. Тел материалынан сығып эшләнелгән һығымталар ырым, тыйыу, ышаныу һ.б. материалдар нигеҙендә лә иҫбатлана. Мәҫәлән, ут тоҡанмаһа: «Ут, һиңә әйтәм!» – тип, бер нисә тапҡыр ҡабатларға кәрәк. Насар төш күрһәләр, «утҡа һөйләйем», тип кешегә һөйләгәндәр. Үлгән кеше төшкә инһә, утҡа энә һындырып, ҡағыҙ битенә исемен яҙып ырғытҡандар. Яңы өй һалып ингәс, Ут-усаҡ йолаһы башҡарыла. Был йола шуннан мәғлүм. «Йола башлығы (оло ир кеше) ағасты ағасҡа ышҡып, натҡы саҡтыра. Осҡондан ут тоҡана. Был утты һүндермәй һаҡлайҙар».

*(F.Ибраһимов. Кинйә романы).*

Ут менән өйгә ҡот, ырыҫ килә, тиҙәр. Ут менән бәйле тағы ла бер ышаныу бар. Ваба ауырыуы таралғанда, ауылда бөтә уттарҙы һүндереп, сығыр уты сығарғандар һәм шул изге уттан барыһы ла ут алған. Өй тыныслыҙ булһа, өйҙән мәйет сыҡһа, артыш яндырып өйҙө өтәҫләгәндәр. Балаға күҙ тейеп илаһа, күҙе тейгән кешенең берәй бөртөк сәсен йәки әйберенең һүрентеһен яндыралар. Ут һыҙғырып янһа, алыҫтан ҡунаҡ килә тигән ырым да бар. Утҡа төкөрһәң, ауыҙың күберсей, тиҙәр. Абдулҡадир Инан яҙыуынса, ут менән бәйле ырымдар, тыйыуҙар яҡут, алтай, хаҡас төркиҙәрендә лә булған.

Дөйөм алғанда, Ут (Ут-Усаҡ) боронғо төрки тәңреләренең береһе булған тип, фараз итергә була.

Ут, Ут-Усаҡ атмаларының килеп сығышы төрки сығанаҡлы ут һәм усаҡ һүҙҙәре менән бәйле.

*ҮЛӘТ.* Ышаныуҙар буйынса, ауырыу эйәләренең береһе. Башҡорт телендә үләт һүҙе *үләт зәхмәте, үләт тейгер, үләт ҡырғыр, үләт йылы, үләт соҡоро* кеүек һүҙбәйләнештәрҙә осрай.

Ышаныуҙар буйынса, Үләт ғәҙәттә үлгән мал, емтек ташлай торған соҡорҙа йәшәй. Шуның өсөн дә башҡорттар үләт соҡорҙарына яҡын барырға ҡурҡа. Бигерәк тә үләт кис яңғыҙ йөрөүселәрҙе баҫтыра икән. Кешегә эйәреп, уны баҫтырып үләт өйгә, ауылға инә. Ул ингән өйгә, ауылға ауырыу, афәт, үлем килә. Үләт ингән ауыл тулыһынса ҡырылыуы ихтимал.

Ышаныуҙар буйынса, үләт ҡыҙыл күҙле эт ҡиәфәтендә йөрөй икән. Ул уттан, эттән ҡурҡа тиҙәр. Бигерәк тә үләт сығыр утынан ҡурҡа икән.

Шуға үләт инһә, ауылда бөтә уттар һүндерелә, сығыр уты сығарылып, өйҙән өйгә таратыла. Үләтте шулай уҡ тимер-томор, иләк, биҙрә ҡағып та ҡыуалар. Үләт ингән өйҙө, ул йәшәгән соҡорҙо төтәтеп тә ҡыуыу таралған. Үләт ҡыуған ваҡытта түбәндәге һамаҡ та ҡулланыла:

Шап-шоп иләк,
Шаҡ-шоҡ силәк,
Сөйәк беләк,
Сиңә теләк:
Ҡас, ҡас бынан,
Хәсис, үләт!

*(С.Хөсәйенова. Ҡариҙел р-ны, Яҡуп ауылы).*

Үләтте ҡыуып сығарғас, ауылды уратып йылҡы өйөрө йөрөтһәң, үләт был тирәнән бөтөнләй китә икән. Славян халыҡтарында үләт индермәҫ өсөн ауылды уратып ер һөргәндәр.

Үләт һүҙе төрки сығанаҡлы үлеү һүҙе менән тамырҙаш.

***ХЫЗЫР ИЛЬЯС.*** Башҡорт мифологияһында изге кеше, пәйғәмбәр исеме. Ышаныуҙар буйынса, Хызыр Ильяс һәр ваҡыт юлда. Ул юл йөрөгәндәргә ярҙам итә. Шуның өсөн юлға, сәфәргә сыҡҡан кешегә башҡорттар: «Хызыр Ильяс юлдаш булһын!» – тип теләк теләйҙәр. Юлға сығыусы үҙе лә сәфәр алдынан Хызыр Ильястан махсус доға уҡып, ярҙамынан ҡалдырмауын үтенә. Һуғышҡа, армияға оҙатҡанда ла Хызыр Ильясҡа мөрәжәғәт итәләр.

Түбәндә юлға сығыусыға, һуғышҡа китеүсегә әйтелгән бер нисә теләк бирелә:

Хызыр Ильяс булһын юлдашың –
Меӊ дошманға торор бер башың!

***

Хәйерле сәфәр, изге ниәт булһын,
Хызыр Ильяс юлдаш булһын,
Әйүп пәйғәмбәр сабырлыҡ бирһен.

***

Хызыр Ильяс, Хөбби хужа ярҙамсың,
Хызыр Ильяс булһын изге юлдашың.
Юлың уң булһын,
Ун ике мөсәлең һау булһын.

Йә Ханнан, йә Маннан,
Әй, Хоҙайым үҙең һаҡла,
Дошмандың күҙен ҡапла,
Ауыҙын бәйлә, телен сис!

*(БХИ. Йола фольклоры. I т.).*

Үрҙә килтерелгән доғалар юлсыны эт-ҡоштан, юлбаҫарҙарҙан; һыуҙа батҡанды һыу эйәһенән, янғынға эләккәнде Ут тәңреһенән дә ҡотҡара икән. Башҡорт ышаныуҙарында Хызыр Ильяс, шулай итеп, иң изге зат. Уны ғәҙәттә аҡ һаҡаллы, аҡ сәлләле йәки алама кейемле ҡарт итеп күҙ алдына килтерәләр.

Меләүез районы Һыртлан ауылында яҙып алынған материалда: «Хызыр Ильяс иген үҫтерә, емештәр үҫтерә. Ул кешегә насар кейенеп, һөймәгән кешеһе булып та күренә ти».

*(Н.Исмәғилева, Һыртлан ауылы).*

Килеп сығышы яғынан Хызыр Ильяс ғәрәп сығанаҡлы Хызыр һәм Ильяс исемдәре менән бәйле.

***ҺАЙЫҪҠАН.*** Башҡорт мифологияһында һайыҫҡан бик ҡатмарлы образ. Халыҡта: «Һайыҫҡан ҡыйыҡ башына ҡунһа, ҡайғы килер, кәртәгә төшһә, ауырыу булыр», – тигән ышаныуҙар киң таралған. Шул уҡ ваҡытта: «Һайыҫҡан шыҡырлаһа, ҡунаҡ килә», – тигән юрау ҙа бар. Шуға ла һайыҫҡан өй, кәртә тирәһенә килеп шыҡырлаһа: «Яҡшыға, изгелеккә булһын!» – тип махсус һүҙҙәр әйтәләр. Сағыштырығыҙ:

Яҡшыға шыҡырҙа, яҡшыға!
Яҡшыға шыҡырҙаһаң
Ауыҙыңа һары май,
Яманға шыҡырҙаһаң,
Яурыныңа – уҡ,
Ауыҙыңа – буҡ.

*(Х.Мостафина. Учалы р-ны, Ҡаҙаҡкол ауылы).*

Был мөрәжәғәттә яҡшы теләккә, хәбәргә яуап итеп әйтелгән ғәҙәти «ауыҙыңа – май» менән бер рәттән ҡурҡытыу, яманлау һүҙҙәре лә бар.

Икенсе бер юрауҙа ла шул уҡ яман һәм яҡшы мотивтары сағылыш тапҡан. Сағыштырығыҙ:

Изгегә шыҡырла,
Изгегә шыҡырла,
Ем һалам!
Яманға шыҡырлама,
Йәнеңде алам!
Бер ыҫау һиңә!
Шул етәр һиңә!
*(Н.Ғәлина. Бөрйән р-ны, Мәксүт ауылы).*

Һайыҫҡандың ауырыу, ҡайғы эйәһе икәнлеген белер өсөн кәртәгә ултырған ҡошҡа ошондай һүҙҙәр әйтеп, таш ташлау әле лә һаҡланған.

Шыҡыр-шыҡыр, һайыҫҡан,
Ике аяғың тайышҡан,
Изге булһаң ҡунып кит,
Ауырыу булһаң, осоп кит.
*(Ғ.Ишдәүләтова. Бөрйән р-ны, Тимер ауылы).*

Шулай итеп һайыҫҡан башҡорттар тарафынан ябай ғына ҡош итеп ҡабул ителмәгән. Улар уның ниндәйҙер сихри көскә эйә икәнлегенә ышанған. Ырыу, ара исемдәре составында һайыҫҡандың булыуы ла быны иҫбатлай.

Һайыҫҡан килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ҺАРЫ САМАУЫР.*** Башҡорт мифологияһында магик көскә эйә булған предметтар рәтенә һары самауыр индерелгән. Ырымбур башҡорттарының һөйләүе буйынса, ямғыр оҙаҡ яумай ҡоролоҡ башланһа, йылғаға һары самауыр һалалар. Ышаныуҙар буйынса ул самауыр ямғыр тарта икән. Самауырҙы йылғанан алырға ярамай. Уны алған кешегә гөнаһ була, аяҡ-ҡулы тартыша, ауырыуға һабыша. Яуынға китһә генә мулла махсус доғалар уҡып һыуҙан ул самауырҙы алған булған.
*(Х.Әхмәтова, Оренбург өлкәһе, Гай р-ны, Байғаҙаҡ ауылы).*

Һары самауыр менән бәйле ышаныуҙар Хәйбулла, Белорет райондарында яҙып алынған ямғыр ташы тураһындағы легендаларға яҡын. Билдәле булыуынса, Хәйбулла, Белорет башҡорттары ямғыр яуҙырыу өсөн оло һыуға таш һалалар, ә ямғырҙы туҡтатыр өсөн уны һыуҙан алып ҡуялар.

Шулай итеп, һары самауыр һәм таш бер функция үтәй. Килеп сығышы яғынан һары самауыр төрки сығанаҡлы һары һәм урыҫ теленән ингән самовар менән бәйле.

***ҺАУА.*** Мосолман мифологияһынан ингән образ. Ышаныуҙар буйынса, Һауа – тәүге кеше Әҙәмдең ҡатыны. Уны Аллаһы тәғәлә Әҙәмдең ҡабырғаһынан булдырған икән. Тәүҙә Һауа менән Әҙәм йәннәт баҡсаһында йәшәгән. Хоҙай уларға бер ағасҡа яҡын килергә, уның емешен ашарға ҡушмаған. Әммә Иблистең ҡотортоуы буйынса Һауа был емеште ашап ҡарай һәм ире Әҙәмгә лә ашатырға тырыша. Быны күреп торған Хоҙай тәғәлә Әҙәмдең үңәсенән тотоп ҡала, ә Һауа йотоп өлгөрә.

Хоҙай һүҙен, тыйыуын үтәмәгән Әҙәм менән Һауаны ергә ҡыуа. Иблис ҡотортоуына ҡаршы тора алмаған Һауаға физик яза ла бирелә: ғөманлы булыу, бала табыу. Шулай итеп Һауа бөтә кешелектең әсәһе лә. Башҡорттар шуға ололап уны: «Анабыҙ Һауа» – тиҙәр.

Һауа Библиялағы Ева образы, һүҙе менән бер сығанаҡтан.

***ҺОМАЙ. ҺОМАЙ ҠОШ.*** Ышаныуҙар буйынса, бәхет ҡошо. Уны күргән кеше бәхетле була. Һомайҙың күләгәһе кемгә төшә, шул да бәхетле була. Әкиәттәрҙә Һомай кемдең яурынына ҡуна, шул бәхетле була, тиелә.

Һомай «Урал батыр» һәм «Аҡбуҙат» эпосында ҡоштар батшаһы Самрау менән Ҡояштың алтын сәсле ҡыҙы. Ул йә аҡҡош, йә ҡатын-ҡыҙ образында һүрәтләнә. Эпоста ул үлемһеҙ, күктә лә, ерҙә лә йәшәй алған зат. Ер кешеһе Уралдың ҡатыны, Иҙел батырҙың әсәһе Һомай Урал батыр үлгәс уның иленә аҡҡош булып, ҡош-ҡорт, мал-тыуар эйәртеп, халҡын ҡурсалаусы, һаҡлаусы булып ҡайта. Ошо замандан башҡорттар «Һомай инә балалары, ҡәрҙәштәребеҙ» тип аҡҡошҡа теймәй, уның итен ашамай.

Һомай образының башҡорттарҙа ике сығанағы бар. Беренсенән, Һомай ҡош образы иран халыҡтарының мифик ҡоштары Хумайға барып тоташа. Башҡорт этногенезында иран телле ҡәбиләләр ҡатнашыуы быны иҫбатлай. Икенсенән, башҡорттарҙың Һомайы боронғо төркиҙәрҙең Умай тәңреһе менән тығыҙ бәйле. Ул Умай тәңре кеүек ергә ҡот, ырыҫ, бәхет таратыусы. Геройҙы яҡлаусы; уға көс, ҡөҙрәт, ярҙамға ат-Аҡбуҙат биреүсе.

Башҡорт фольклорсылары, этнографтары Һомайҙы шулай уҡ башҡа төрки халыҡтарында таралыш тапҡан Умай (Ымай, Омай, Амый, Йомай) исемле алиһә, тәңре менән дә бәйләйҙәр.

***ҺҮҘ.*** Башҡорттарҙа *һүҙ* борон-борондан ысынбарлыҡты таныуҙа, үҙләштереүҙә, тупланған информацияны туплауҙа, таратыуҙа төп сара булған. Һүҙ, фекер, ысынбарлыҡ, йәшәйеш айырылғыһыҙ бәйле итеп

ҡабул ителгән. Шул сәбәпле һүҙ башҡорт өсөн уны уратып алған бөтә донъя кеүек йәнле материаль. Бөгөн дә телдә һаҡланып ҡалған *һүҙ башы, һүҙ аҙағы*(аяғы), *һүҙ алыу, һүҙ биреү, яҡшы һүҙ, яман һүҙ, һүҙ терелтә, һүҙ үлтертә, һүҙ тотоу, һүҙ йыйыу, һүҙ тейеү, һүҙ төйнәү, һүҙ эйәреү, һүҙ китеү, һүҙ уйнатыу, һүҙ теҙеү һ.б. һүҙбәйләнештәр, йылы һүҙ таш иретә, кеше һүҙе кеше үлтерә; көндө ел боҙор, кешене һүҙ боҙор; яҡшы һүҙ йән аҙығы, яман һүҙ баш ҡаҙығы* кеүек мәҡәл һәм әйтемдәр һүҙҙең башҡорт мифологияһында сихри, тылсымлы көскә эйә булған бер мифик зат икәнлеген һүрәтләй. Һүҙҙең тылсымлы, сихри көскә эйә зат икәнлеген алғыштар иҫбатлай. Алғыштар ярҙамында башҡорттар төрлө тәңреләргә, эйәләргә мөрәжәғәт итеп, уларҙы маҡтап, яҡшы һүҙҙәр әйтеп, үҙҙәренә бала-сағаһына, туған-тумасаһына, мал-тыуарына ырыҫ, ҡот, иҫәнлек-һаулыҡ теләгән. Алғыштар туй йолаларында, бала табыу һәм тәрбиәләү йолаларында ла киң ҡулланылған.

Алғыш һүҙҙәр киләсәкте моделләү, киләсәкте булдырыу ролен үтәй. Һүҙ ауырыу-сихырҙарҙы, кешеләргә зыян килтергән яман заттарҙы ҡыуыу өсөн дә ҡулланылған. Мәҫәлән, бүҫер, биртек, арпа һ.б. сирҙәрҙе магик һүҙҙәр, хәрәкәттәр ярҙамында бөтөрөү. Баланы һаҡлау, уның киләсәген программалау ҙа һүҙ ярҙамында башҡарыла. Мәҫәлән, Арыҫлан исеме менән арыҫлан кеүек көслө, Миңһылыу – миңде бөтөрөү, Үлмәҫбай – үлмәй, ғүмерле булыу, Тимербулат – тимер һәм булат кеүек ныҡ булыу программаллана. Ҡарғыш һүҙҙәр кешене юҡҡа сығарыу өсөн ҡулланыла.

Шулай итеп, алғыш, ҡарғыш, теләк, исем, арбау, тел-теш, ҡарғыш ҡайтарыу, арбау, ҡәрҙәшлек терминдарын ҡулланыу һүҙҙең көсөнә ышаныу менән бәйле.

***ШАЙТАН.*** Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән образ. Ышаныуҙар буйынса, шайтан уҫал яман зат, Иблистең ярҙамсыһы, кешене юлдан, имандан яҙҙырыусы. Шайтан ут һәм төтөндән яралған тиҙәр. Ул төрлө ҡиәфәткә инә ала. Миҫал итеп Учалы районынан яҙып алынған материалдан өҙөк килтерергә була.

«Бер йылы кетеү гөттөм. Кетеүем зыяратҡа бер мәл инде лә китте бит. Көҙгө көн ине. Зыяратҡа ҡурҡа-ҡурҡа индем. Ҡараһам, яңы ҡуйылған Ишмөхәмәт бабай ҡәбере өҫтөндә өлкән бер йылан ята. Үҙе ҡапҡара. Ауыҙын ҙур асып, миңә ҡарап ята теге. «Дошман итеп күрә ине, шуғалыр инде ауыҙын асып ята», – тип уйҙаным. Бер һуҡтым – үлмәне, ике һуҡтым – үлмәне. Шунан һуң оҙаҡ аурыным. Батал ауылына инәй алып барып арбатты, өшкөрттө. Йылан түгел, шайтан булған теге».

*(Ш.Сафин, Аһылай ауылы).*

Икенсе бер хөрәфәти хикәйәлә шайтандарҙың кеше ҡиәфәтендә булыуы, тирмәлә йәшәүе, бала тыуҙырыуы, кешегә хас йолалар белеүе һүрәтләнә.

«Бынан күп йылдар элек бер ауылда ғәжәп хәл булыуын һөйләгәйнеләр. Шул ауылда халыҡты төрлө ауырыуҙарҙан дауалаған тирәяҡҡа билдәле табип әбей йәшәгән.

Йәйге матур кистәрҙең береһендә әбейҙең өйөнә ҡарараҡ йөҙлө, ыҫпай кейемле урта йәштәрҙәге ханым килеп инә. Ҡыҙының бәпәйләргә йыйыныуын һәм уға тиҙерәк ярҙам күрһәтеүен үтенә. Ят ҡатынды быға тиклем ауылда күрмәгәс, берәр үткенселер тип фараз итә әбей.

Ауыл осонда уларға күршеһе осрай. Ул әбейҙе туҡтатып:

– Әллә һыйырың көтөүҙән ҡайтманымы? Төнгә ҡаршы япа-яңғыҙ ҡайҙа юл тоттоң? – тип һорай.

– Ниңә яңғыҙ булайым – ти әбей. – Йомош килеп сыҡты...

«Ниңә был мине яңғыҙ тип әйтте әле, эргәмдәге ҡатынды күрмәнеме икән?» – тип уйлап ҡуя әбей. Уғаса, ауылға терәлеп торған күлгә яҡынлашҡас, яр башында ултырған тирмә күренә. Был күренеш әбейҙе тағы һағайта, уйға һала. Кемдәр ҡунаҡлаған бында? Әллә үткенсе ҡаҙаҡтармы икән? Ҡайһы арала тирмә ҡороп өлгөргәндәр?

Тирмәгә ингәс, әбей тағы аптырап ҡала. Уртала майшәм яна. Стенаға зиннәтле келәмдәр эленгән, шунда уҡ һауыт-һабалар теҙеп ҡуйылған. Иҙәнгә йомшаҡ, биҙәкле кейеҙ түшәлгән. Бер мөйөштә юрғандарға күмелеп, тулғаҡ тотоуҙан тирләп-бешеп йәп-йәш ҡатын ята. Уның сәсе туҙған, бите ҡыҙарған, ирендәре ҡара көйгән.

Табип ҡарсыҡ «бисмилаһи-р рахмани-р рәхим ...» тип эшкә тотона. Әбей доға уҡыған һайын, хужабикәнең йөҙө боҙола., ҡобараһы оса, бөршәйеп төшә, дер-дер ҡалтырай башлай. «Әбекәй, зинһар, «бисмилла» тип әйтә күрмә инде», – тип ялбара.

Ҡатындың үҙен бик сәйер тотош-йөрөшө ҡарсыҡта шөбһә тыуҙыра. Әллә ул хаттин ашҡан атеисмы, әллә сихырсымы? Шулай уйлап, әбей эшен дауам итә: сабыйҙы ҡабул итеп, кендеген ҡырҡып, юрғанға төрөп, ҡатынға тоттора.

– Ҡайһы яҡтарҙан килеп сыҡтығыҙ? – тип һорай үҙе.

– Беҙ бик алыҫтан да, үтә яҡындан да түгел.

Хужабикәнең кинәйәле яуабынан әбей бер ни ҙә аңламай, киреһенсә, шиге тағы арта төшә. Бәлә-ҡазаға юлыҡмаҫ борон был серле тирмәнән тиҙерәк сығып китергә ынтыла.

– Оло эш башҡарҙың, әбей, сәй эсермәҫтән ебәрмәйем, – ти ҡатын, әбейҙең ҡулынан тотоп, кейеҙ түшәлгән түшәккә ултырта. Әбей тертләп

китә, сөнки хужабикәнең ҡулы боҙҙан да һалҡын була. Шунда уҡ ҡатын ашъяулыҡҡа төрлө ризыҡтар теҙеп ҡуя.

– Ҡул йыуырға ине – ти әбей.

Ҡатын ҡулына көмөш ҡомған һәм ялтырауыҡлы еҙ тас тотоп килә.

– Рәхим ит.

Ҡомғандан ҡуйы, ҡара шыйыҡса ҡойола, тирмә эсендә танау ярырлыҡ әсе, ҡыркыу еҫ тарала. Әбей, ҡулын ышҡып-ышҡып һөртә лә, майҙа бешерелгән көлсә киҫәген алып ҡаба. Сәйнәй башлағас, уның «һаҫыҡ» ашамлыҡ икәнен тоя, төкөрөп ташларға уңайһыҙланып, көскә йотоп ебәрә. Сынаяҡтағы сәйҙе уртлағас, саҡ ҡоҫоп ебәрмәй.

– Ярар, мин китәйем инде, – ти әбей.

– Ниңә ашығырға? Ҡунып китерһең.

– Эйәк аҫтында торған ерҙә ҡунып ятмаҫмын инде. Өйҙә лә эшем ҡыйралып ята.

– Улайһа, аҡ юл һиңә... Хеҙмәтең буш булмаһын, беҙҙән бәләкәй генә бүләк ал, – ти хужабикә, әбейгә төйөнсәк тоттороп. – «Ғәфү ит, оҙата алмайым, ҡыҙымды бәпесе менән яңғыҙ ҡалдырып булмай», – тип өҫтәй.

Әбей нисек итеп өйөнә ҡайтып етеүен хәтерләмәй. Бөтә тәне ауыр, йоҡо баҫа, шунда уҡ урындыҡҡа ауа һәм тәрән йоҡоға тала.

Ул иртәгәһен ҡояш төшлөккә яҡынлашҡас ҡына урынынан тора. Тәне еңеләйеп китә. Кисә таныш түгел ҡатын биргән төйөнсөктө ҡулына ала. «Әһә, һалмаҡ ҡына күренә, ниндәй затлы әйбер тултырған икән?» – тигән уй йәшен тиҙлеге менән башынан үтә.

Төйөнсөктән ялтыр ҡурғаш ҡағыҙға төргән әйберҙәр сыға. Уларҙы берәм-берәм тарата башлай... Һәм күҙе дүрт була. Ялтыр ҡағыҙға кибеп ҡатҡан ит, һыйыр, ҡош-ҡорт тиҙәктәре төрөлгән була.

– Бынағайыш! Ит изгелек – көт яуызлыҡ, – тип ярһып китә әбей. – Оло кешене нисек мыҫҡыл иткән, ҡәһәр һуҡҡыры! Күрһәтәйем әле мин уға.

Ул әхирәтен эйәртә лә кисәге тирмә ултырған урынға йүнәлә. Күл буйын арҡыры-буйға айҡап сыҡһалар ҙа, тирмәне лә, хатта уның урынын да тапмайҙар. Яр ситендәге бейек үләндәр ҙә тапалмаған, исмаһам».

*(Ф.Иҙәшле. «Башҡортостан». 5.02.1999).*

Шайтандар, ышаныуҙар буйынса, төркөм-төркөм булып йәшәй. Уларҙың исемдәре лә бар икән. Илеш районында, мәҫәлән, Бәрнүш, Дөбөрнүш, Кәпшайтайтүш, Кетмер тигән исемдәр яҙып алынды.

*(Л.Басирова. Үрмәт ауылы).*

Ышаныуҙар буйынса, һәр кемгә фәрештә менән шайтан эйәреп йөрөй. Фәрештә яҡшылыҡҡа өндәһә, шайтан аҙҙырыу өсөн йөрөй. Мәҫәлән, Илеш районы материалында бына нимә тиелә был хаҡта: «Шайтансыз кеше булмай. Шайтан кешегә эйәреп йөрөй, аламалыҡҡа ҡоторта кешене. Өйгә кергәндә, шайтан кермәсен өсөн бисмилла әйтергә кәрәк».

*(М.Мөхәмәтов, Х.Мөхәмәтова. Сүлте ауылы).*

Ышаныуҙарҙа шулай уҡ шайтанды бәре, ен менән бутау, уларҙа уртаҡ сифаттар күрһәтеү таралған. Хатта бөтә яман заттарҙы ен-шайтан тип исемләү ҙә таралған.

Башҡорт телендә шайтан һүҙе менән *шайтан арбаһына ултырған, шайтан ояләған, шайтан алыштырған, шайтан алғыры, шайтан туйы, шайтан аяғын тыҡҡан, шайтан ботағы, шайтан ояһы, шайтан балаһы, шайтаныңды саҡырма, шайтан үпкән, шайтан өйөрмәһе, шайтан килеп күсерә, өмөтһөҙ шайтан; тәңре ашын шайтан ҡыҙғанған* тигән фразеологизмдар, тыйыуҙар, һуҡраныуҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр бар.

Килеп сығышы яғынан шайтан – ғәрәп сығанаҡлы һүҙ. Уның тәүге мәғәнәһе йылан.

***ШҮРӘЛЕ.*** Башҡорттарҙа шүрәле тураһында бик күп ышаныуҙар бар. Ғәҙәттә уны һалбыр имсәкле, оҙон сәсле, оҙон еҙ тырнаҡлы итеп күҙ алдына килтерәләр. Шүрәленең аяғы артҡа ҡарап тора икән. Маңлай уртаһында бер мөгөҙө була тиҙәр. Шүрәленең күҙҙәре уйнап, ут сәсеп тора икән.

Әкиәттәрҙә һыңар күҙле, һыңар аяҡлы шүрәле лә осрай. С.И.Руденко материалдарында ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, ир енесле шүрәле лә бар.

Мәләүез яҡтарында йыйған материалда шүрәленең сәсе башынан алына икән. Ғәҙәттә, ул сәсен алып тарай, тиҙәр. Әгәр ҙә кеше килеп сыҡҡанда сәсен кире кейеп өлгөрмәһә, шүрәле үлә икән.

*(Х.Яманһарина. Мәләүез р-ны, Һәргәй ауылы).*

Шүрәле менән бәйле ышаныуҙарҙа уның атҡа йәбешеп ауылға килеүҙәре киң таралған. Ҡайһы берҙәренең ауылда кейәүгә сығып, шүрәле араһына, шүрәле нәҫеленә нигеҙ һалыуы тураһында легендалар бар.

Шүрәле менән бәйле мифологияла уның урман эйәһе, яман зат булыуы, ҡытыҡлап үлтереүе тураһында ышаныуҙар киң таралған.

Мәҫәлән, Әбйәлил, Учалы райондарында йыйған материалдарҙа шүрәле яңғыҙ юлаусыға урман юлдарында тап була. Ул кешене көлдөрөргә тырыша. Көлгән кешене ҡытыҡлап, һеңен ҡатыра, тиҙәр. Икенсенән, ҡытыҡлағанда ул оҙон бармаҡтары менән кешенең йөрәген, үпкә-бауырын тартып сығара икән. Шуның өсөн шүрәле осраһа, көлмәҫкә, тешеңде күрһәтмәҫкә, йылға-фәлән осраһа тиҙ генә икенсе яғына сығырға, ҡуҙың менән һыуың булһа, уның өҫтөнә ырғытырға, ҡойорға йәки алдарға кәрәк, тиҙәр.

Шүрәле һыуҙан ҡурҡа. Шуға шүрәленән һыу аша сығып та ҡотолоп була. Һыуҙың икенсе яғында ҡалған Шүрәле: «Һыуҙың башы ҡайҙа?» – тип ҡысҡыра икән, сөнки, ул һыуҙы урап ҡына сыға, тиҙәр. Шүрәле бик тиҙ йөрөй. Шуға уны һыуҙың түбәненә ҡойған яғына ебәрәләр. Был осраҡта шүрәле йылға ҡойған диңгеҙгә тиклем китә икән.

Шүрәле килеп сығышы яғынан төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш.

***ЫЙЫТ.*** Ышаныуҙар буйынса, ҡайғы эйәһе. Башҡорт теленең диалекттарында ***ыйыт тартып илау, ыйыт күреү, ыйыт булыу*** тигән һүҙбәйләнештәр ҙә осрай. Ыйыт ғәҙәттә күҙгә күренмәй. Ҡайғы килер алдынан ул кешенең төшөнә инә, балаһын илата, этен олота, ҡоҙғон, һайыҫҡан, кәкүк ҡиәфәтендә кәртә-ҡураға килә.

Күбәләк башҡорттарында кеше үлгәс туғандары илаһа, ололар оҡшатмай. «Ыйыт тартып илап ултырма, ҡалғандары һау булһын тип, әйт», – тиҙәр ғәҙәттә. Ололар шулай уҡ баланың ауыҙын асып бушҡа илауын да яратмай. «Яман була, ыйыт тарта, кемдеңдер башына илай был бала», – тиҙәр. Эт олоһа: «Ыйыт тарта, хужаһының башына олой», – тип, уны үлтерәләр. Кешенең рухы, бала, эт ыйытты, йәғни килер ҡайғыны, алдан күрә икән. Кеше уны күрмәй, тик күңеле генә һиҙә икән, тиҙәр.

Ыйыт һүҙе төрки сығанаҡлы Ыйыҡ боронғо тәңре исеме менән тамырҙаш булырға тейеш.

***ЭТ.*** Башҡорт мифологияһында эт бик ҡатмарлы образ. Бер ҡараһаң ул кешегә ярҙам итеүсе, изгелек ҡылыусы зат. Мәҫәлән, яраны эттән ялатһаң бөтә, тиҙәр. Өс йәнле баланың да эсен эттән ялатыу йолаһы бар. Бала үлмәһен, һау-сәләмәт булһын тип уға *эт* йәки ***көсөк күлдәге*** кейҙергәндәр, ***эт ялғашына*** һалып алғандар. Эт йәки көсөк һүҙҙәре менән исем ҡушҡандар. Сағыштырығыҙ: Этҡол, Этбикә, Этбай, Көсөк һ.б. Өйҙө яман заттарҙан һаҡлау ниәте менән борон тупһа аҫтына эт йәки уның башын күмгәндәр. Шул уҡ ваҡытта башҡорт мифологияһында эт зыян килтереүсе зат та. Шуға уға ҡарата насар

мөнәсәбәт, дошманлыҡ тойғолары ла сағыла. Мәçәлән, экиәттә бәлә – әт, ә шайтан – ҡыҙыл эт һынына инә. Ышаныуҙарҙа ла эт олоһа, бәлә килә тиҙәр. Бигерәк тә эттең моронон нигеҙгә төртөп олоуын ололар яратмай. Эткә булған насар мөнәсәбәт, уны төрлө яман мифик заттарҙың ярҙамсыһы, ҡуштаны итеп һүрәтләүҙә лә сағыла. Мәçәлән, дейеүпәрейҙәр эт егеп йөрөй, убырлы ҡарсыҡтың эте атҡа әйләнеп ҡыҙҙы, малайҙы ҡыуып етергә ярҙам итә.

Магик медицина ла ла эт менән бәйле ауырыуҙар һәм дауалауҙар бар. Мәçәлән, ҡултыҡ аçтына шешек сыҡһа, шуны эт имсәге, тиҙәр. Был ауырыуҙы имләгәндә ҡырҡ һалма менән ишеккә төртә-төртә:

– Эттән килдең, эткә кит.
Ҡайҙан килдең, шунда кит, –

тип әйтәләр ҙә, шул һалмаларҙы эткә ашаталар. Эт тырнағы сыҡһа:

Миңә сыҡма, эткә сыҡ,
Хужаң һинең мин түгел,
Ниңә бында килдең һин?
Кит, кит, кит! –

тип һамаҡлап эттең тырнағы менән төрткөләгәндәр.

Тел осонғанда ла:

Телем осонған,
Телем осонған,–
Эт күтен үп,
Бесәй күтен үп, тфү, тфү. –

тип имләгәндәр.

Ҡоторған эт талаһа, ҡырҡ өйҙән ҡырҡ һалма йыйып, шуны ҡырҡ көн ашаталар. Унан һуң шул кеше ҡырҡ көн буйы ҡырҡ мәртәбә бер ерек ағасын сабырға тейеш була. Эт тешләһә, шул эттең ҡолағын ҡырҡып ашау ҙа осрай.

Эт өрөп сыҡһа, башҡорттар сихри көскә эйә булған арбау һүҙҙәре ҡулланған. Мәçәлән,

– Ләкен-ләкен,
Сөмбула ләкуа,
Инәң берәү, атаң ҡырҡ,

Тфү, тфү,
Ҡара ләғнәт!

Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс, эт өрөүҙән туҡтай, тешләшмәй китә лә бара икән.

Мәҡәл-әйтемдәрҙә, һынамыштарҙа, йомаҡтарҙа, фразеологияла эткә булған ҡатмарлы мөнәсәбәт сағылмай ҡалмаған. Сағыштырығыҙ, эт алғыһыҙ, эт ашаһын, эт бәйләү, эт бәйләһәң торғоһоҙ, эт бәләһе менән, эт бәхетле, эт өйөрө, эт туйы, эттән тыуған, эт һуғарыу, ауырыуҙан сыҡҡан эт ашамаҫ, эт этлеген итә; эт ҡоторһа ҡояш менән айға ынтыла, эткә бирһәң ашыңды, эттәр талар башыңды; аҡ эт, ҡара эт – барыһы ла эт, эт йәнле, эт күҙе төтөн белмәҫ, эт ҡарҙа ауынаһа, аяҙ була, күк этем күккә ҡарап өрә һ.б.

Эттең ябай ғына хайуан түгел икәнлегенә борондан килгән эт ҡушаматтары ла ишара яһай. Мәҫәлән, эткә Аҡтырнаҡ, Ҡытмыр тип исем ҡушһаң кәртә-ҡураға ен-шайтандар, Ҡашҡар тиһәң, бүре килмәй, тиҙәр. Үрҙә килтерелгән атамаларҙың Ҡытмыры шайтан исеме, ә Ҡашҡар бүре һүҙенең синонимы. Шулай итеп эт башҡорт мифологияһында бик ҡатмарлы образ.

Килеп сығышы яғынан эт төрки сығанаҡлы һүҙ булырға тейеш.

*ӘҘӘМ.* Башҡорт мифологияһына ислам менән килеп ингән образ. Ышаныуҙар буйынса, Әҙәм Алла тарафынан балсыҡтан яратылған зат. Хоҙай тәғәлә Әҙәмде үҙенә оҡшатып яратҡан. Иң беренсе уға үлемһеҙлек бүләк иткән, шунан бөтә нәмәләрҙең исемдәрен өйрәткән. Фәрештәләрҙе уға буйһонорға ҡушҡан. Әҙәмгә иптәшкә Һауаны булдырған. Шулай итеп Әҙәм Алла тарафынан яратылған, һөйөлгән зат булған. Шуға ла Алла Әҙәм менән Һауаға үҙенең янында ожмахта йәшәргә рөхсәт иткән. Әммә Әҙәм менән Һауа Иблис ҡотҡоһона бирелеп, Алла тарафынан тыйылған ағастың емешен ашай. Шуның өсөн улар күктән ергә ҡыуыла, үлемһеҙлеген юғалта, ҡара тир түгеп үҙ икмәген үҙҙәре булдырыуға дусар ителә.

Әҙәм ерҙә 900–1000 йыл тирәһе йәшәй. Һауа менән икеһенең бик күп балалары була. Шулай итеп ер йөҙөндә кешелек барлыҡҡа килә. Халыҡта Әҙәм тураһындағы легендалар әле лә йәшәй. Миҫал өсөн Илеш районының Үрмәт ауылында яҙып алынған материалды тәҡдим итеп була.

«Алла бар ул. Ул иң беренче Әдәмне яратҡан. Шуннан фирештәләрне былдырған. Шуннан соң ғына шайтанны яратҡан, юҡтан бар иткән. Әдәмгә күңелсез былмасын тип анабыз Һауаны бар иткән. Аны

инде атабыз Әҙәмнең ҡабырғаһынан былдырған. Шуннан ҡалған инде «Анабыз Һауа, атабыз Әҙәм» тигән сүләүләр».

*(Л.Басирова. Үрмәт ауылы).*

Хәҙерге башҡорт телендә Әҙәм һүҙенең мәғәнәһе бер нисә. Тәүге мәғәнәһе фекерләй, һөйләй, эш ҡоралдары тыуҙыра һәм хеҙмәт процесында уны файҙалана белгән иң юғары аҡыл көсөнә эйә булған йән эйәһе; кеше. Икенсе мәғәнәһендә юғары рухи һәм әхлаки сифаттарға эйә булған шәхес төшөнсәһе ята. Был төшөнсәләрҙең икеһендә лә быуаттар төпкөлөнән килгән Әҙәмгә ҡарата ихтирам һәм юғарылау тойғолары ята.

Башҡорт телендә әҙәм булыу, әҙәмгә һанау, әҙәм итеү, әҙәм балаһы, әҙәм заты, әҙәм имәнесе, әҙәм аҡтығы, әҙәм ҡалдығы, әҙәм мәсхәрәһе кеүек һүҙбәйләнештәр бар.

Әҙәм һүҙе Библиялағы Адам менән бер сығанаҡтан.

***ЮХА. ЮХА ЙЫЛАН.*** Башҡорт мифологияһында йылан 200, 1000 йыл кеше күрмәй йәшәһә, юхаға әйләнә. Юха һылыу ҡыҙ образына ла, егет ҡиәфәтенә лә керә ала икән. Юха шулай уҡ төрлө йыртҡыс һүрәтенә лә инә ала. Ҡатын образына ингән юха кешегә кейәүгә сыға. Яйлап ул кешене ауырыуға һабыштыра, киптерә, һарғайта, бара-бара үлтерә, ти. «Урал батыр» әкиәтендә лә юха һылыу ҡатын ҡиәфәтенә инә, Шүлгәнде «бер ҡараһаң – айыу, икенсе ҡараһаң – бүре йәки арыҫлан итеп» йөрөтә. Йөрөй торғас ул бер күлгә батып үлә. Шулай итеп, юха – иң яуыз заттарҙың береһе.

Ышаныуҙар буйынса, юханың кеше түгеллеген берәү ҙә белмәй икән, сөнки ул һис бер яғы менән дә кешеләрҙән айырылмай, ти. Уның тик кендеге генә булмай икән, шуға ҡарап ҡына юха икәнлеген белеп була тиҙәр.

Башҡорт телендә юха һүҙе хәйләкәр, таҫма телле кешегә ҡарата әйтелә.

Килеп сығышы яғынан *юха* ҡытай сығанаҡлы һүҙ һанала. Башҡорт теленән тыш ул сыуаш, татар, удмурт телдәрендә осрай.

***ЯЛМАУЫҘ.*** Башҡорт мифологияһында осраған яман мифик зат. Халыҡ ижадында ул ғәҙәттә аждаһа, 7 башлы йылан образында бирелә. Сағыштырығыҙ: «Егет ҡыҙҙы бирмәҫ өсөн 7 башлы ялмауыҙ аждаһа менән һуғышып китте, ти. Һуғыша торғас, егет ялмауыҙҙы еңгән, турап бөтөргән».

*(БХИ. Әкиәттәр. IV т.).*

М.Ҡулаев яҙмаларында ялмауыҙ иҫ киткес ҙур ауыҙлы мәскәй әбей, ҡарт ҡатын итеп һүрәтләнә.

Ышаныуҙарҙа ялмауыҙ йыш ҡына сихырсы, кеше ашаусы, ҡан һурыусы итеп тә һүрәтләнә. Бигерәк тә ул йыш йәш балаларҙы, ҡыҙҙарҙы урлай икән.

Ялмауыҙ һүҙе, образы бик күп төрки халыҡтарында бар. Башҡорт ялмауыҙы бигерәк тә татар, Себер татарҙары ялмауыҙына яҡын.

Килеп сығышы яғынан ялмауыҙ төрки сығанаҡлы ялмау һәм ауыҙ һүҙҙәре менән бәйле.

***ЯМАН. ЯМАН АРТАҠ.*** Башҡорт мифологияһында күҙгә күренмәгән ауырыу-зыян килтереүсе ҡурҡыныс мифик зат. Һөйләштәрҙә ямаҡ тигән варианты ла бар. Телдә яман ауырыу, яман шеш, яман ятҡан тигән ауырыуҙар исемдәрендә ҡулланыла. Был сирҙәрҙең сәбәптәрен элек-электән ауырыу эйәһе менән бәйләгәндәр. Мәҫәлән, муйын ауыртһа, Яман ятҡан тиҙәр. Уны бөтөрөү өсөн бағанаға, түңгәккә, ата ҡаҙға 3 тапҡыр:

– Әссәләмәғәләйкүм, бағана (түңгәк, ата ҡаҙ), әссәләмәғәләйкүм, бағана (түңгәк, ата ҡаҙ), әссәләмәғәләйкүм, бағана (түңгәк, ата ҡаҙ), – тип үтәһең. Шулай тиһәң, муйындың һыҙлауы бөтә икән.

Яман-артаҡ ен кеүек була. Шуға осрағанда ен доғаһын әйтһәң, ул ҡаса икән.

*(Н.Исмәғилева. Мәләүез р-ны, Һыртлан ауылы).*

Килеп сығышы яғынан *яман, яман артаҡ* төрки сығанаҡлы һүҙ.

***ЯМҒЫР, ЯМҒЫР ТӘҢРЕ.*** Башҡорттарҙа ямғырҙың сәбәбен ямғыр тәңреһе, ямғыр эйәһе, ямғыр хужаһы менән, һуңыраҡ Хоҙай тәғәлә, Алла менән бәйләгәндәр. Шуға борон-борондан ямғыр теләү, ямғыр яуҙырыу йолалары киң таралған булған. Был йолалар халыҡ ижады әҫәрҙәрендә киң сағылыш тапҡан. Ул йолалар әле лә йәшәп килә. Мәҫәлән, оҙаҡ ямғыр яумаһа, теләккә сығалар. Ямғыр теләгәндә мотлаҡ ҡара төҫтәге мал һуйыу йолаһы бар. Был йола балалар фольклорында ла сағылыш тапҡан.

Яу, яу, ямғырым!
Ҡара тәкә һуйырман.
Ингән, сыҡҡан балдарға
Туҡ эсәген бирермен.

Теләктән һуң ғәҙәттә һыуға һалышыу, һыуға ташлау йолалары
әрелгән. Был йолалар Ямғыр тәңрегә борон кеше ҡорбаны килте-
ҙе сағылдыра.

Теләктән һуң ҡара ҡаҙанды һыуға түңкәреү, Ырымбур яҡтарында
ры самауырҙы һыуҙа ҡалдырыу йолаһы ла бар. Был йола ла Ямғыр
ңрегә ҡорбан килтереүҙе сағылдыра.

Ямғыр яуҙырыу өсөн ил менән Яуын, Ямғыр буҡкаһы бешереп
ау, зыяратҡа 41 биҙрә йәки 41 сүмес һыу ҡойоу; һыу төбөнә ҡыу ат
шын, йәйташ тип йөрөтөлгән ваҡ йылға йәки ҡош бөрләтәүенән сыҡ-
н таш һалыу, ҡайынға таҫтамал элеү йолалары ла Ямғыр тәңренең
елен күреү, уны ризалатыу йолалары ҡасандыр булыуын күрһәтә.

Ямғыр оҙаҡҡа китһә, уны туҡтатыу өсөн Аҡ теләккә сыҡҡандар.
теләктә ғәҙәттә аҡ төҫлө мал һуйылған. Белорет районы башҡорт-
ры ямғырҙы туҡтатыу өсөн ауыл буйлап май йыйып Йәйташты ба-
п һылаған, Инйәр төбөнә ямғыр яуҙырыу өсөн һалынған ташты
уҙан алған.

Шулай итеп, ямғыр яуҙырыу, ямғыу туҡтатыу йолалары бик бай
и улар Ямғыр эйәһенең, Ямғыр тәңреһенең башҡорт мифологияһын-
айырым бер урын алыуын күрһәтә.

Ямғыр һүҙенә килгәндә ул бөтә төрки телдәрендә осрай һәм баш-
рт теленең төп лексик ҡатламына ҡарай.

***ЯРЫМТЫҠ.*** Ярымтыҡ тураһындағы материал гәйнә башҡортта-
нда таралған. С.И.Руденко XX быуат башында уҡ яҙып алған ле-
дала Ярымтыҡтың атта йөрөргә яратыуы, йөнтәҫ булыуы, күрәҙәлек
белеүе һүрәтләнә.

*(БХИ. Риүәйәттәр, легендалар. II т.).*

Ышаныуҙар буйынса, ярымтыҡ үксәһе алға ҡарап торған, бармаҡ-
ры оҙон, йөнтәҫ бер зат икән. Кешегә осраһа уны ҡытыҡлап йә аҙаш-
рып үлтерә икән. Бигерәк тә ярымтыҡ яңғыҙ кешегә ҡурҡыныс. Шуға
лар урманға яңғыҙ барырға ҡушмайҙар. Ярымтыҡ осраһа, тиҙ генә
лға, шишмә аша сығырға кәрәк, тиҙәр. Ул һыуҙан ҡурҡа, шуға яҡын
лә алмай икән. Ярымтыҡтан шулай уҡ алдап ҡасырға ла була. Бы-
ң өсөн аяҡ, өҫ кейемдәрен алдын артҡа кейеп ярымтыҡ юлына сы-
ға кәрәк. Ул эҙҙәргә ҡарап кире яҡҡа китәсәк, – тейҙәр.

Ярымтыҡ шүрәлегә яҡын мифик зат.

Ярымтыҡтың төрки сығанаҡлы ярым һүҙенән барлыҡҡа килгән.
раз үҙе лә, исеме лә донъя мифологияһындағы образ менән ауаздаш.

# Йөкмәткеһе

Ҡәҙерле уҡыусым ........ 3
Ағас эйәһе ........ 4
Аҙбар эйәһе ........ 4
Аждаһа ........ 5
Ай, Ай тәңре ........ 6
Ай тотолоу ........ 7
Айналайым ........ 8
Айыу ........ 8
Аҡ ........ 8
Аҡбуҙ, Аҡбуҙат ........ 9
Аҡҡош ........ 9
Аҡ йылан ........ 10
Аҡыҡ ........ 11
Алаҫлау ........ 11
Албаҫты ........ 11
Аҡ кейемле кеше ........ 12
Аҡ күгәрсендәр ........ 14
Аҡ күгәүендәр ........ 14
Аҡъял батыр ........ 14
Алла ........ 14
Алмаштырыу ........ 15
Алп ........ 16
Ант ........ 16
Аңдыу ........ 17
Арбау ........ 18
Арпа ........ 19
Артаҡ ........ 21
Артыш ........ 21
Ат ........ 22
Ауыҙ осоноу ........ 23
Ауыҙынан ел алһын ........ 23
Бабай ........ 23

Бағымсы .................................................... 24
Бай .................................................... 25
Байрамсылау .................................................... 26
Балыҡ .................................................... 26
Бапаҡ .................................................... 27
Баҫлығыу .................................................... 27
Беҙморон .................................................... 28
Бетеү .................................................... 28
Биҙгәк .................................................... 29
Биртек .................................................... 29
Бирән .................................................... 30
Бисура .................................................... 31
Бишмыйыҡ .................................................... 32
Боҡай .................................................... 33
Боҙом .................................................... 33
Бораҡ .................................................... 34
Бүре .................................................... 34
Бүҫер .................................................... 36
Быжы .................................................... 38
Бысаҡ .................................................... 39
Быума .................................................... 39
Борсаҡ, Боҙ .................................................... 40
Бөркәнсек .................................................... 41
Бәлә .................................................... 41
Бәрей .................................................... 42
Гәрәбә .................................................... 43
Ваба, Ваба ауырыуы .................................................... 43
Ғазраил .................................................... 44
Ғәйшә-Фатима .................................................... 44
Даға .................................................... 46
Дейеү .................................................... 47
Дәжжәл .................................................... 47
Еҙморон .................................................... 48
Ек, Ек эйәһе .................................................... 48
Ел, Ел күңеле .................................................... 48
Ен, Ен-пәрей .................................................... 49
Ер, Ер тәңреһе, Ер Аллаһы, Ер-һыу .................................................... 52
Ер кендеге .................................................... 54
Ете .................................................... 55

Зәмзәм һыуы ........................................................................ 56
Зөлпәкәй ............................................................................ 56
Зыярат эйәһе ....................................................................... 56
Зәхмәт ................................................................................ 56
Зәңге .................................................................................. 58
Иблис ................................................................................. 58
Исем ................................................................................... 59
Имәлтә ................................................................................ 60
Йелпеү ................................................................................ 60
Йома көн ............................................................................ 64
Йорт эйәһе ......................................................................... 64
Йөҙләк ............................................................................... 64
Йылан ................................................................................. 65
Йәй, Йәй тәңре ................................................................... 68
Йәйташ ............................................................................... 68
Йән ..................................................................................... 69
Йәннәт ............................................................................... 70
Йәһәннәм ........................................................................... 71
Йәшен ................................................................................. 71
Кесе йома ........................................................................... 73
Көн ..................................................................................... 74
Күҙ уғы ............................................................................... 74
Күк, Күк тәңре .................................................................... 76
Кәкүк .................................................................................. 77
Ҡарға .................................................................................. 78
Ҡоҙғон ................................................................................ 78
Ҡорҡот, Ҡорҡот ата, Ҡорҡот атай ...................................... 80
Ҡоро көн ............................................................................. 80
Ҡот ..................................................................................... 81
Ҡояш (Көн) ......................................................................... 85
Ҡытмыр .............................................................................. 86
Ҡыш .................................................................................... 86
Мөнкир, Нәнкир ................................................................. 87
Мунса эйәһе, Мунса ене ..................................................... 88
Мәмерйә эйәһе ................................................................... 88
Мәскәй, Мәскәй әбей ......................................................... 89
Нух пәйғәмбәр ................................................................... 90
Ожмах ................................................................................. 90
Осоҡ .................................................................................... 90

Өҙләк ........ 93
Өй эйәһе ........ 94
Өләш ........ 95
Өрәк ........ 97
Өсйән ........ 97
Самрау ........ 100
Сират күпере ........ 101
Тамуҡ ........ 101
Татран ........ 101
Тимер ........ 103
Тирмән эйәһе ........ 104
Тәңре ........ 104
Убыр ........ 105
Ут, Ут анаһы, Ут – усаҡ тәңреһе ........ 106
Үләт ........ 107
Хызыр Ильяс ........ 108
Һайыҫҡан ........ 109
Һары самауыр ........ 110
Һауа ........ 111
Һомай, Һомай ҡош ........ 111
Һүҙ ........ 111
Шайтан ........ 112
Шүрәле ........ 115
Ыйыт ........ 116
Эт ........ 116
Әҙәм ........ 118
Юха, Юха йылан ........ 119
Ялмауыҙ ........ 119
Яман, Яман артаҡ ........ 120
Ямғыр, Ямғыр тәңреһе ........ 120
Ярымтыҡ ........ 121

Научное издание

Хисамитдинова Фирдаус Гильмитдиновна

# БАШКИРСКАЯ МИФОЛОГИЯ


Ответственный за выпуск: Ф.С.Тикеев
Ответственный редактор: Р.М.Габдуллина
Редактор: Г.Ю. Юнусова
Компьютерная верстка: Г.Ю. Юнусова

Лицензия ИД № 05001 от 07 июня 2001 г.
Подписано в печать с оригинал-макета 24.05.02.
Формат 60x84 $^1/_{16}$. Бумага офсетная.
Гарнитура "Таймс". Печать офсетная.Усл.печ.л. 7.32.
Уч.-изд.л. 7.51.
Тираж 500 экз. Заказ №38
Цена договорная

Издательство «Гилем».
450054, г.Уфа, пр. Октября, 71

Отпечатано в типографии «Информреклама»,
450077, г.Уфа, ул. Ветошникова, 97.
Тел.: (3472) 52-01-94, e-mail: reklama@ufacom.ru

Хисамитдинова Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы - филология әре докторы, профессор, Рәсәй Фәндәр Академияһының к, тел һәм әҙәбиәт институты директоры урынбаҫары. 200-гә ғилми хеҙмәт авторы. Ф.Ғ.Хисамитдинова тел тарихын, астиканы, Башҡортостан тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүгә, орт телен уҡытыу методикаһына ҙур өлөш индергән ғалимә. этнолингвистика, мифология буйынса 30-лап хеҙмәте ия, Германия, Төркиә, Швеция һ.б. илдәрҙә донъя күрҙе. Хисамитдинова вуз, техникум, мәктәп, балалар баҡсалары ҙылған дәреслектәр, уҡыу әсбаптары авторы ла.

